ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 март (буранай) 2020

№ 10 (896)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

Мөхәббәтле донъябыҙҙың асылы



2

Әрмеләргә барһаң ине...

һөйгән йәрҙәрең менән



6

Ҡан менән һалынғанды...

милләтте, телде алыштырып ҡына юйып булмай



8-9

Өләсәйем



12

ТВ-программа 14

**Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 мартҡа тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" өс айға 338 һумға төшәсәк. Бергә булайыҡ!**

БАЙРАМ МЕНӘН!

8 март

## НИШЛӘР ИНЕК ҺЕҘҺЕҘ...

*Һигеҙ һаны -*
*Ҡатын-ҡыҙҙар һыны:*
*Өҙөлөрҙәй нескә билдәре.*
*Һигеҙ - игеҙ йөрәк,*
*Тигеҙ тормош,*
*Мөхәббәт һәм сафлыҡ билдәһе.*

*Һигеҙ һаны ике тамсы һымаҡ,*
*Ике тамсы -*
*Ғүмер нигеҙе!..*
*Ғашиҡтарҙың никах балдағы ла*
*Хәтерләтеп ҡуя*
*Һигеҙҙе.*

*Әммә тормош гел байрамдан тормай,*
*Йылдың көндәре күп*
*Һигеҙһеҙ.*
*Тик, һөйөклө ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ,*
*Нишләр инек икән беҙ*
*Һеҙһеҙ!*

Салауат ӘБУЗӘР.

## БАРЫ ҺЕҘ...

*Һинең наҙҙар нурлы яҙҙар кеүек*
*Йөрәгемде, йәнде иретә.*
*Был донъяла бары ҡатын-ҡыҙҙар*
*Беҙҙе текә баҫып йөрөтә.*

*Йөрәктәге моңдо тойомлаусы,*
*Яугир иткән беҙҙе ҡатын-ҡыҙ.*
*Йөрәк тибешенә дәрт өҫтәүсе*
*Наҙлы бер йән булып ҡалығыҙ.*

*Шундай оло йөрәк һеҙҙең йәндә,*
*Һөйөү менән тибә күкрәктә.*
*Ҡатын-ҡыҙҙар, йәнде өтөр күҙҙәр,*
*Дарман, өмөт бирә йөрәккә.*

*Наҙлы ҡояш төҫлө ҡараштарың,*
*Күгүләндәй йәнә ҡалҡамын.*
*Хыялыма ҡанат биргән йәнгә*
*Ел-дауылда аумаҫ ҡалҡанмын.*

Фәнил БУЛӘКОВ.

## БАШҠОРТ ҠАТЫНЫ

*Уралымдың сикһеҙ хазинаһы,*
*Балҡып ята алмас, алтыны,*
*Тик алмастан, алтынынан ҡиммәт*
*Аҫылташ ул - башҡорт ҡатыны.*
*Тарихыбыҙ ҡанға батҡан мәлдә*
*Ғазаптарҙы күпме татыны -*
*Дошмандарға йәшен күрһәтмәне,*
*Бирешмәне башҡорт ҡатыны.*
*Хәйләләргә артыҡ оҫталыҡ юҡ,*
*Телебеҙ ҙә ҡай саҡ ҡатылыр,*
*Тик изгелек - ҡандан килгән сифат,*
*Тоғролоҡло башҡорт ҡатыны*
*Һынағанда яҙмыш рух ныҡлығын,*
*Йән һаҡлаған кемдер һатылып,*
*Утта янған, ләкин сыҡынмаған*
*Иман һаҡлап башҡорт ҡатыны.*
*Улҡайҙары яуға киткән саҡта*
*Урҭҡайҙары ҡара ҡан тулы,*
*Еңеп ҡайт, тип, илде һаҡла, тиеп*
*Фатихалай башҡорт ҡатыны.*
*Юғалмауы ҡиммәт быуаттарҙа*
*Башҡорт тигән исем-атының,*
*Бының өсөн мең-мең һиңә рәхмәт,*
*Бөйөк әсә - башҡорт ҡатыны!*

Гүзәл СИТДИҠОВА.

## ШУНДАЙ АПАЙҘАР БАР!

Н. Некрасовка эйәреп...

*Илкәйемдә шундай апайҙар бар,*
*Һылыулығы телдән яҙҙыра,*
*Һыны рәссамдарҙы әсир итә,*
*Ҡараштары шиғыр яҙҙыра.*

*Илкәйемдә шундай апайҙар бар,*
*Һендереп тә гене һүҙ әйткән.*
*Күңелдәрҙе аяп, йәнде имләп,*
*Ҡылған хаталарҙы төҙәткән.*

*Илкәйемдә шундай апайҙар бар,*
*Ирҙәр күтәрмәҫлек йөк тартҡан,*
*Дошмандарға зәһәр уғын атҡан,*
*Сабып килгән атты туҡтатҡан.*

*Илкәйемдә шундай апайҙар бар,*
*Бар халҡымдың рухын күтәргән,*
*Йәнкәйҙәрен тапап уҙһалар ҙа,*
*Юғарыраҡ улар күптәрҙән.*

*Илкәйемдә шундай апайҙар бар,*
*Бәндәбикә ише һәр бере!*
*Ғәзиз күреп, йәнен иретәйек,*
*Ус төбөндә гене йөрөтәйек,*
*Ҡыҫҡа бит ул бәндә ғүмере!*

Зөлфиә ХАННАНОВА.

12+

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

**Булмышыбыҙ хаҡында уйлана-нитә башлаһаң, уның ике яҡлы булыуына иғтибар итмәй булмай: бер яғында - аҡыл булһа, икенсеһендә - хис-тойғо. Хаҡ Тәғәлә Әҙәм менән Һауаны, уларҙан таралып киткән кешеләрҙе бар ҡылғанда ни маҡсаттар ҡуйғандыр - был хаҡта беҙ ни бары фараз ғына итә алабыҙ. Һәр хәлдә, әҙәми затҡа аҡыл туплап, фекергә нигеҙләнгән маҡсатлы ғәмәлдәр ҡылып йәшәй алыу мөмкинлеге бирелгәнлеге бәхәсһеҙ.**

# МӨХӘББӘТЛЕ ДОНЪЯБЫҘҘЫҢ АСЫЛЫ

Аҡыл, интеллект хаҡында бихисап фәлсәфәүи хеҙмәттәр яҙылған, ғилми тикшеренеүҙәр уҙғарылған. Ул кешенең мейе эшмәкәрлеге үҫеше аша ғәмәлгә ашырыла. Ә бына әҙәм балаһының хис-кисерештәре нисегерәк шытып сыға ла, ни рәүешле тотоп та тыйып булмай торған ташҡынға әүерелә икән? Ошо урында һүҙ башы итеп башлаған фәлсәфәмде ҡуйып тороп, хис-тойғолар донъяһын һәр кемебеҙгә бүләк итеүсе берҙән-бер зат - ҡатын-ҡыҙ хаҡында һүҙ сурытырға мәжбүр буламын. Ни уйлаһағыҙ ҙа, нисек баһалаһағыҙ ҙа, ошо мәсьәләне ҡарағанда мин ҡатын-ҡыҙҙы алиһәләр кимәленә күтәрерлек дәлилдәр барлығын тоямын.

Иң элгәре бына нимә үтә лә ҡыҙыҡлы үә фәһемлелер. Һәр кемебеҙ әсә ҡарынында яралып, аҡ донъяға тыуған мәлгә тиклем шунда бәүелеп үҫә. Бәпес ятҡылығы - инәй затының тәү бишеге лә, йомшаҡтарҙан-йомшаҡ түшәге лә ул. Тап шунда тыуасаҡ бәпес менән әсә араһында ғына була торған мәңгелек бәйләнеш пәйҙә була. Изге әсәлек хисе нисек хасил булһа, инәһе наҙына мохтажлығы менән бергә бәпес йәнендә уға ҡарата һөйөү тойғоһо ла көсәйгәндән-көсәйә бара. Инә һөтө менән бергә бәпес һөйөү һутын да имәлер ул. Хәҙерге көндә медицина хеҙмәткәрҙәре йәш әсәләргә балаларын күкрәк һөтөн имеҙеүҙән баш тартмаҫҡа өндәп, махсус программалар булдыра. Бында башлыса инә һөтөнөң балаға башҡа бер ни менән дә алыштырғыһыҙ бер ризыҡ булыуын тәҡрарлайҙар. Әммә эш тик инә һөтөндә генә түгелдер. Әсә өсөн бәпесен имеҙеүҙән дә татлыраҡ, ләззәтлерәк ни барҙыр - үҙҙәре генә белә. Әммә бәпес өсөн быны алыштырырлыҡ башҡа ғәмәл юҡтыр ул!

Бына мин һеҙгә бер һорау бирергә теләйем. Бөйөк рус шағиры Александр Пушкин барыбыҙ өсөн дә билдәле шәхес. Ни өсөн ул, исмаһам, бер генә шиғырын булһа ла үҙ әсәһенә арнап яҙмаған? Мәктәп йылдарынан уҡ ятланып, хәтеребеҙ төпкөлөндә ҡалған "Подруга дней моих суровых, голубка дряхлая моя..." юлдарын да ул үҙенең няняһы Арина Родионовнаға бағышлаған. Бәғзе бер үҙе һөйгән йәрҙәренә лә байтаҡ шиғырҙарын арнаған шағир күңелендә нилектән үҙ әсәһенә ҡарата наҙлы, хисле һүҙҙәр яралмаған һуң?



Миненсә, бының бер генә сәбәбе барҙыр - ул замандарҙа рус дворяндары ғаиләләрендә бала тыуыу менән крепостной ҡатын-ҡыҙҙарҙан булып, яңыраҡ бала тапҡан әсә ошо дворян балаһына имеҙеүсе итеп тәғәйенләнгән. Шул ваҡыттарҙан бирле рус телендә "молочная мать", йәғни "һөт инәһе" тигән төшөнсә йәшәп килә. Тимәк, үҙ балаһына күкрәк һөтөн имеҙеп үҫтермәгән ҡатын-ҡыҙ үҙе лә тик һөт имеүсе бәпестә генә тыуа торған наҙҙан мәхрүм ҡала...

Ә хәҙер бер аҙ ғына булһа ла фантазияға бирелеп алайыҡ. Элегерәк бер ир затының тик ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған донъяға барып эләгеп, шунда кисергән мажаралары хаҡында кинофильм прокатта булғайны. Комедия һымағыраҡ ине шай. Аллаһи-билләһи, тим, әгәр был ысынбарлыҡта була ҡалһа, хәтәр ҡурҡыныс булыр ине. Ҡотһоҙ ҙа, йәмһеҙ ҙә, ғәмһеҙ үә мөхәббәтһеҙ ҙә бер донъя булыр ине. Әлбиттә, хәҙерге шайтан алыштыра башлаған фани донъябыҙҙа агрессив феминизм менән бер ҡатар ысын мөхәббәтте лесбий һөйөүенә алыштырыусы нескә заттар ҙа юҡ түгел. Әммә был - Барлыҡҡа килтереүсе Илаһи Затҡа хыянат итеүгә тиңдер. Замандың үҙенә күрә социаль сире итеп ҡабул итергә кәрәктер быны. Юғиһә, кешелек ни өсөн ике яртынан - ир-ат һәм дә ҡатын-ҡыҙ өлөштәренән бер бөтөн булып уҡмашҡан донъя рәүешендә яратылған һуң?

Хаҡ Тәғәләбеҙ, тәбиғәт-йыһан ҡанундары камилдарҙан камилдыр ҙа, унан да гүзәлерәк башҡа төҙөүсе-конструктор ҙа юҡтыр. Нинә, төнгө күк көмбәҙендә, икһеҙ-сикһеҙ йыһан төпкөлдәрендә емелдәшеп балҡыған йондоҙҙар хасил иткән мәңгелек картинанан да күркәмерәген ниндәй рәссам яҙа алыр ине, ә? Бар йыһанды ғына түгел, кешене лә гүзәлдәрҙән гүзәл итеп яралтмағанмы ни Ул? Улай ғына ла түгел, бер тамсы шыйыҡса һәм балсыҡтан (фән теленсә: һыу үә барлыҡ химик элементтарҙың махсус ҡушылмаһынан) әүәләнгән биологик тәнгә Хоҙай тыны өрөлөп (космик энергия бирелеп), мәңгелек мөхәббәт утынан яратылмағанмы ни Әҙәм? Иш янына ҡуш булып, тән иңенә (инь) йән (янь) биреүсе Тәү Әсәбеҙ Һауанан да гүзәлерәк, мөхәббәтлерәк берәй башҡа зат бармы һуң Ер йөҙөндә? Изге китаптарҙа Бөйөк Илаһтың үҙе яралтҡан тере әҙәми заттарҙы һоҡланып ҡабул итеүе һәм дә барса тере йәндән өҫтөн ҡуйыуы хаҡында яҙып ҡалдырылыуы ла юҡҡа түгелдер. Мөхәббәттән яралтылғандар һөйөү-мөхәббәттән һис арына алмаҫтар. Тик бының өсөн Илаһ ҡанунынан тайпылмау, фани донъя үҙгәргән-боҙолған замандарҙа ла йөрәгендә мөхәббәт утын һүндермәй тотоусы мәңгелек ҡуҙҙарҙы һаҡлай алыу зарур. Ир-егеттәребеҙ ҙә, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ошоно хәтеренән сығармаһын ине.

Ғәзиз әсәләребеҙҙе, үҙ итеп, яратып, хәләл ефетлеккә һайлап алған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы, ҡыҙ балаларыбыҙҙы, ялан сәскәләренән дә гүзәлерәк ошо нескә заттарҙы алиһәләй итеп күрергә лә, күҙ ҡараһылай һаҡларға ла ине беҙгә, хөрмәтле ир-егеттәр. Уларға ҡарата күңелдәребеҙ, уйҙарыбыҙ саф булһа, улар ҙа беҙҙең өсөн сафлыҡ сығанағы булып ҡалыр. Ә мөхәббәткә килгәндә - һәр кемебеҙ мөхәббәтле ғүмер көтә ала, ул тойғо бит икһеҙ-сикһеҙҙер, тик уны йөрәк төбөндә яралта белергә лә хыянат ҡылмаҫҡа кәрәктер.

Яҙ етеп, тәбиғәт ҡар һалҡынынан арынған бер мәлдә барса тереклек тантана итеү мәлен зарығып көтә. Мөхәббәт уяна бит, тап ошо миҙгелдә бар тере йән ҡояш йылыһына ла, һөйөү-һөйөлөү утына ла мохтажлыҡ кисерә. Үҙебеҙгә һөйөклө булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы алиһәләй күреп, уларҙың йөрәктәрен йылытырлыҡ, ваҡыты менән өшөбөрәк киткән күңелдәрен иретерлек һүҙҙәр табып, изге хистәребеҙҙе белдерә һалайыҡ, хөрмәтле туғанҡайҙар. Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙың Илаһ тарафынан ир-ат хаҡына яратылғанын белә-күрә тороп, улар хаҡын донъябыҙҙың иң юғары ҡиммәте дәрәжәһенә күтәрергә өйрәнәйек. Ысынлап тороп гүзәл заттар бит улар, беҙҙең башҡорт ҡыҙҙары! Күҙҙәренә баҡһаң - ялан сәскәләреләй балҡып тораларҙыр, йөҙҙәренә күҙ һалаһың икән - тирә-яҡҡа нур һибелгәндәй тойолалыр. Елдә елпенгән оҙон сәстәре тау ҡылғанылай күркәмлек өҫтәй уларға, ҡоралайҙыҡылай һомғол буй-һындарына һоҡланмаған кеше лә юҡтыр. Шағир булмағанды ла шағир хисле итер улар, һис шикһеҙ!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Бейеүсе торналар" скульптура композицияһын ҡарап сыҡты. Композиция баш ҡаланың Орджоникидзе районындағы "Имәндәр" скверында ҡуйыла. Өфө мэры Өлфәт Мостафин хәбәр итеүенсә, фонтан Бөтә донъя фольклориадаһының төп саралары башланыуға эшләй башлай. Өфөләрҙең яратҡан торналар скульптураһын реставрациялау һәм уны Октябрь проспектынан яҡшы күренһен өсөн фонтандың уртаһына ҡуйыу күҙаллана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Башкиравтодор" акционерҙар йәмғиәтенең "Ремстройдормаш" заводында күсмә "Транспорт сәғәте"н үткәрҙе. Орджоникидзе районының Төҙөкләндереү хеҙмәте майҙансығында республика етәксеһе соҡорҙарҙы ямау өсөн ҡорамалдар менән танышты, "Ремстройдормаш" заводында юл билдәләрен әҙерләү участкаһын, шулай уҡ автомобиль юлдарын тәртиптә тотоу өсөн машиналар паркын ҡарап сыҡты. "Транспорт сәғәте"ндә соҡорҙарҙы ямау, билдәләрҙе яңыртыу мәсьәләләрен ентекле тикшерҙеләр.

✓2020 йылдың апрелендә Өфөлә Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһының IV съезы була. Съезд Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһының төбәк йәмәғәт ойошмаһы тәҡдиме буйынса Башҡортостан Республикаһында дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙың һөҙөмтәлелеген арттырыу өсөн уҙғарыла.

✓17 апрелдә Өфөлә Башҡортостан Муниципаль берәмектәренең X съезы, шулай уҡ Урындағы үҙидара көнөнә арналған саралар уҙғарыла. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Съезд уҙғарыу тураһында ҡарар "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы тәҡдиме буйынса ҡабул ителде.

✓VI Бөтә донъя фольклориадаһы символикаһы менән иң яҡшы сувенир продукцияһын әҙерләүгә конкурс иғлан ителде. Унда ҡатнашыуға сувенир продукцияһын күпләп етештереү мөмкинлегенә эйә оҫталар ҙа саҡырыла. Кәрәкле тираж - 2000 дананан башлап. Конкурсҡа йомғаҡ 31 мартҡа тиклем яһала. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы һәм эштәрҙе 2020 йылдың 25 февраленән 2020 йылдың 20 мартына тиклем тапшырырға кәрәк.

ҠЫҘ-ҠАТЫН ҺҮҘЕ

# БЕҘ ҺАМАН ДА...

## ҡурсалауға мохтаж

**Гәзитебеҙҙең 5-се һанында БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары Эльвира Айытҡолова һәм Гөлнара Бикбулатова менән ғаиләләге йәберләүҙәрҙе иҫкәртеү тураһындағы диалог донъя күргәндән һуң интернет аша байтаҡ хат алдыҡ. Хаттарҙың барыһы ла ғаиләһендә йәберләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙан булды. Егерме беренсе быуатта йәшәһәк тә, донъя ҡуласаһын ҡатын-ҡыҙ өйөрөлтә һымаҡ тойолһа ла, уларҙың күбеһе ғаиләһендә йәберләнеп көн күрә икәне сер түгел бит инде.**



"Егерме туғыҙ йыл йәшәйбеҙ, бәхетле булған мәлдәремде бармаҡ менән дә һанай алмайым, - тип яҙа бер автор. - Хәҙер инде балалар ҙурайған, үҙаллылар, инде түҙмәһәм дә була һымаҡ. Тик ташлап китһәм, бөтөнләй эшлектән сығыр, урамда йөрөп үлер, тием. Ә көн күрһәтмәй. Эсә лә ҡайта, ҡайта ла тауыш ҡуптара, мәсхәрәләй, кәмһетә. Шул хәтлем туйҙым. Был ғүмер тиҙерәк тамамланһын ине, тип теләйем..."

Икенсе хатта бына ошондай юлдар бар: "Яратам да яратам, тип өйләндә лә, ҡәҙерләмәй, һәр эшемдән кәмселек таба, "һин анра, башһыҙ, ялҡау" тип тукып ҡына тора. Ҡул күтәрмәһә лә, рухи яҡтан ныҡ бөтөрә. Йөҙ китеп, йөҙ ҡайттым инде. Ғәфү үтенеп, ынғай ғына йөрөп ала ла, тағы башлай. Ирҙең ошолай итеп йәберләгәненән яҡлаған закон юҡ та, булмаҫ та..."

Өсөнсө хат кәнәш тә һорамай, ә уйҙары менән генә бүлешә: "Балаларым бәләкәй, шуларҙы аҙ ғына күтәрәйем тип түҙәм. Шул арала яйлап аҡса туплайым, ситтә эш белешәм. Көн дә кисен һыра тотоп ҡайтҡан, аҙ ғына башына сыкһа, аҡырған да һүгенгән атай тәрбиәһендә балалар үҫтергем килмәй... "

Был хаттарҙы күптәре хәсрәтен кемгәләр һөйләү, бер аҙ түгелеп-бүҫкәреп алыу өсөн генә яҙа - аңлашыла. Әммә барыһында ла уртаҡ зар - ғаиләлә тыныслыҡ булмау, йәберләнеү, кәмһетелеү, туҡмалыуҙар, имгәнеүҙәр. Һәм бында шул уҡ классик геройҙар. Ролдәре лә шул уҡ: йәберләүсе - ир, йәберләнеүсе - ҡатын.

Бер егет: "Ҡыҙҙар шундай һәйбәт һәм нескә генә лә, бынау йыуан һәм уҫал ҡатындар ҡайҙан килеп сыға икән?" тип аптыраған, ти бит әле, бында ла шуның кеүек һорау тыуа: "Яҡлауҫы, һаҡлауҫы булырға теләгән егет ҡайһы арала туҡмауҫы, кәмһетеүсе иргә әүерелә ул?"

Ниндәй ирҙәр ҡатындарын кәмһетә, рәнйетә, хатта ҡул күтәрә, даими рәүештә, йылдар ағымында баҫым аҫтында йәшәтә икәнде психологтар ҙа, социологтар ҙа һәм башҡа махсус белгестәр ҙә тәфсирләп тикшергән инде. Үҙе шундай ғаиләлә үҫкән, ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәтләү тигәнде күрмәгән-белмәгән, бала сағында яратылмаған, психик травма алған, ҡаты әсәй ҡулында баҫылған малайҙарҙан шундай ирҙәр үҫеп сыға, тиҙәр улар. Тағы ла, башҡа ирҙәр араһында үҙенең ирлеген бер нисек тә күрһәтә алмағандар ҡатынын туҡмап, үҙбаһаһын күтәрә, эшендә һәр ваҡыт көсөргәнештә йөрөгән ирҙәр өйҙә агрессияһын сығара, тигән фекерҙәр бар. Шулай уҡ яза алмауға өйрәнеп, ҡорбанының ҡаршылаша алмаҫын, көсһөҙләгән белеү ҙә баш мейеһе артыҡ сәләмәт булмағандарҙа хайуан инстинктын уята икән. Унан тағы, ҡанһыҙ рәүештә кеше туҡмауҫыларҙың күптәре, тикшергән осраҡта, психик тайпылышлы булып сыға. Тимәк, бөгөн ғаиләһендәгеләрен йәберләп йәшәтеүселәрҙе тикшертеү зарур, кем белә, ундай сирле әҙәмдән нимә сыҡмаҫ? Ә инде иң беренсе ғәйеп - эскелек. Башҡорттарҙың эскелекте күтәрә алмағаны яңылыҡ түгел. Улар был утлы һыуҙы, урыҫтар һымаҡ, өҫтәл артында ғына йырлашып ултырып эсеп, ятып йоҡлай белмәй. Беҙҙәкеләр мотлаҡ болара, батырлыҡтар эҙләп сығып китә, кемгәләр бәйләнә һәм ҡул аҫтына йыш ҡына әлеге бахыр ҡатын эләгә. Бәлки, ҡатынын йәберләргә лә теләмәйҙер ул, әммә араҡы быны эшләтә. Араҡы туҡмата ла, зәғифләй ҙә, хатта үлтертә лә. Тик араҡы үҙе яуап бирмәй, енәйәт өсөн, ғәҙәттә, кешеләр яуап тота.

Беҙҙең милләт ҡатын-ҡыҙы түҙемле. Башҡорт ҡатындары ҡаты, уҫал, тупаҫ, тиһәләр ҙә, уларҙы сабырһыҙ тип әйтеү төптө ҡырын булыр. Ни эшләптер, ғаиләләге кәмһетеүҙе лә, туҡмалыуҙы ла күтәрә улар. Эскән ирҙе лә ғүмер буйына кеше итеп йәшәтергә тырышалар. Бөтөн мәшәҡәттәрҙе, ауырлыҡтарҙы үҙ елкәләрендә өҫтөрәүгә лә күнәләр. Бәлки, был беҙгә боронғо йолалар менән һалынған аң-ғәҙәттер. "Барған ереңә таш булып бат", "Артыңа көл" тигән әйтемдәр ҙә ҡыҙҙың ниндәй хәлдә лә ире янында торорға һәм түҙергә тейешлеген, "Ир һуҡҡан ер тамуҡта янмай" кеүектәре ирҙән эләгеү ҙә ғәҙәти күренеш тигәнде аңғарта бит. "Беҙҙең өләсәйҙәр ҙә түҙгән, әсәйҙәр ҙә түҙгән, беҙ ҙә түҙәйек, ҡатын өлөшө шулай", тип ебәрә ҡайһы бер инәйҙәр. Ә асылда, урыҫ сәйәхәтселәре боронғо башҡорттар тураһында: "Башҡорт ирҙәре ҡаты, әммә ғәҙел, ҡатындарына тупаҫ түгелдәр, һуҡмайҙар, ҡыйырһытмайҙар, сөнки улар эсмәйҙәр", - тип яҙып ҡалдырған. Тимәк, халҡыбыҙҙың ир-егете һуңғы йөҙ йыллыҡта ғына шулай ваҡланған - ҡатындар менән һуғыша башлаған булып сыға.

Бөтә ирҙәр ҙә улай түгел. Миҫал өсөн генә үҙегеҙ барлағыҙ әле таныштарығыҙҙы. Ниндәйҙер үҙ шөғөлә, ҡыҙыҡһыныуы булған, мәҙәниәтле, дөрөҫ тәрбиә алған ирҙәрҙең ғаиләләрендә ундай проблема юҡ. Тимәк, баланың киләсәктәге ғаилә именлеген булдырыуҙы ата-әсә бөгөндән ҡайғырта башларға тейеш. Һеҙ үҙ-ара мөнәсәбәтегеҙҙе яйлай алмайһығыҙ, ирешеп-талашып, һуғышып-янъяллашып йәшәйһегеҙ һәм шунда ла "балалар өсөн торам" тип аҡланаһығыҙ икән - был дөрөҫ түгел. Ғауғалар һеҙҙең балаларығыҙ тормошона ла күсәсәк. "Улым, һин атайың һымаҡ булма" тип өгөтләү генә аҙ. Әсәһен туҡмағанды күреп үҫкән ир бала йә ҡурҡып ҡалып, йә башҡа сәбәптәр булғанда, асыуын үҙенең яҡындарын ҡыйырһытыу аша сығарып өйрәнәсәк.

Беҙҙә ирҙәрҙе ир итеп күтәрергә, абруйын төшөрмәскә, уны башлыҡ, хужа итеп күрһәтергә тырышалар. Кемдәрмә? Әлеге ҡатын-ҡыҙҙар. Боронғораҡ инәйҙәр хатта үҙе баҫып торғанда ла ирҙе ултыртыу яғын ҡарай, ишектән ирҙе беренсе үткәреп юл бирә, ауыл магазиндарында әле лә ирҙәрҙе сиратҡа торғоҙмайҙар. Күп ҡатындар үҙҙәре ашамағанда ла иренең тамағын туйҙырып ҡуйырға ашыға, уға яҡшыраҡты кейҙерергә, уны бимазаламаҫҡа, ваҡытында ял бирергә, ваҡ мәшәҡәт менән борсомаҫҡа тырыша. Хатта күп ғаилә проблемаларын да уларға әйтмәй генә хәл итәләр. Ирҙәр баласағының баҡса-мәктәп-уҡыу тормошона артыҡ ҡатнашмай ҙа тиерлек. Әгәр ир эшләй һәм аҡса алып ҡайта икән - ул хан бәрәбәрендә. Эшһеҙ булып, йорт-ҡура араһында ҡул ҡаушырып ултырмағандарын да баһалайҙар әле. Һәм хатта донъяһына бер файҙаһы булмаған, эсеп-туҙып йөрөгәндәрен дә аҫырап тоталар. Шунлыҡтан, бында (беҙҙең йәмғиәттә) "Ирҙәрҙе яҡлайыҡ!" тип лаф ороу урынһыҙ.

Ғаиләләге йәберләүҙе сикләү тураһындағы законды индерергә уйлауҙары ла юҡтан түгел. Бөгөн ил төрмәләрендә бикле булған ҡатын-ҡыҙҙың илле проценттан күберәге үҙ-үҙен белешмәҫ хәлгә етеп ирен үлтереп ултыра. Был хәл ҡатындың оҙайлы ваҡыт иҙелеп, баҫылып, ҡыйырһытылып йәшәүенән, донъя михнәттәрен бер үҙе һөйрәүенән, көсө етмәҫтәйҙе хәл итеп маташыуының сиге ул.

Ҡатын-ҡыҙҙың теле яман, ул ирҙе туҡмау хәленә еткерә ала, тигән дә фекерҙәр бар. Мин бының менән килешеп тә ҡуя яҙғанда бер дини яҙманы тыңлап, уйға ҡалдым. Унда мәсеттә күп ир-ат йыйылған да, оло дин әһеле төрлө яҙма һорауҙарға яуап бирә. Бер һорауҙа ошолай тиелә:

- Ҡатыным мыжып-игәп йәнемә тейә, шуның өсөн уны язаға тарттырырға буламы?

Мулла яуап бирә:

- Бер бәйғәмбәргә шундай бер ир тап ошондай һорау менән килһә, бәйғәмбәрҙә ҡатыны пыр туҙҙырып әрләп ята икән. Быны күргән ир: "Мин тап ошо мәсьәлә менән килгәйнем, ахыры, һеҙ ярҙам итә алмаҫһығыҙ, һеҙҙең үҙегеҙҙең дә ҡатынығыҙ яман икән", - ти. Шунда бәйғәмбәр: "Туғандарынан, ата-әсәһенән айырылып, минең өйөмә килгән, миңә ҡатын булып үҙенең яҙмышын ышанып тапшырған, миңә балалар тапҡан һәм уларҙы көткән, миңә ашарға бешереп, керемде йыуған, ауырыһам - дауалаған, мин йоҡлағанда өҫтөмә япҡан, һуңлаһам - йоҡламай көткән, сит ҡатындарға күҙ һалһам - көнләшеп үпкәләгән, кәрәктә йылыһын-назын биргән һәм бар булмышы менән ошо йортомдо ҡотайтып торған ҡатындың әрләүенә генә түҙмәйемме инде мин!" - тип яуап биргән.

Шунан мулла әлеге һөйләгәндәрен: "Ҡатын-ҡыҙҙың сарбаулығы, ваҡсыллығы һәм сарсор булып ирешеп китә алыуы уның йомшаҡлығы, тәбиғи халәте. Уларҙы бындай ҡылығы өсөн ғәйепләргә кәрәкмәй. Ул ир кеше түгел, һин уны үҙеңә тиң ҡуйып, елкәһенә ауырлыҡ һалып боҙма, уға йылы өй һәм йылы ҡараш кәрәк, уның бурысы бала табып үҫтереү", - тип бик матур һәм фәһемле итеп йомғаҡлап ҡуя. Ысынлап та, уйланырлыҡ, шулай бит?

Әлбиттә, был бик оҙаҡ һөйләрлек, һыу буйы яҙырлыҡ тема. Фекерҙәре булғандар үҙҙәре дауам итер. Ә минең ир-егеттәргә өндәшкем килә: ҡыйырһытмағыҙ ҡатын-ҡыҙҙарығыҙҙы, улар тап һеҙҙең яҡлауға һәм һөйөүгә мохтаж.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓22 апрелдә иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем тотош илдә Конституцияға төҙәтмәләр тураһында закон проекты буйынса тауыш биреү ойошторола. Дәүләт Думаһына уны 20 ғинуарҙа ил Президенты Владимир Путин индерҙе. Дәүләт Думаһы закон проектын 23 ғинуарҙа беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Закон проектында Конституцияның 22 бүлегенә төҙәтмәләр индереү буйынса тәҡдимдәр бар.

✓Йыл аҙағында Дим районының "Сағыу" биҫтәһендә яңы балалар баҡсаһы асыла, тип хәбәр итте республика Төҙөләш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте. Мәғариф учреждениеһы "Демография" милли проекты сиктәрендә төҙәлә. Әлеге ваҡытта бинаға нигеҙ һалынған. Быйыл Башҡортостанда "Демография" милли проекты сиктәрендә бөтәһе 3900 урынлыҡ 24 балалар баҡсаһы һалыу күҙаллана.

✓Өфөлә ҡыйыулыҡ, әүҙем гражданлыҡ позицияһын күрһәткән балалар һәм үҫмерҙәр бүләкләнде. Уларға ете номинацияла "Бирешмә!" беренсе балалар премияһы тапшырылды. Бишбүләктән Инсаф Миһранов, Бөрйәндән Гөлназ Биргәнова һәм Гөлиә Исҡужина, Мәсетленән Фәнзил Ғәйнетдинов, Хәйбулланан Гөлсәсәк Шәрипова, Ишембайҙан Ләйсән Хәмитова һәм Өфөнән Рената Хәкимова еңеүселәр тип танылды.

✓Бөтә донъя ҡулланыусылар хоҡуҡтары көнө уңайынан Башҡортостан Республикаһының Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты "ҡыҙыу бәйләнеш" асты. Ведомство белгестәре консультациялар бирә, кәрәк булһа, дәғүәләр төҙөүҙә ярҙам күрһәтә. "Ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны: (347) 218-09-78. Шылтыратыуҙар 31 мартҡа тиклем ҡабул ителә.

✓Илебеҙҙең баш ҡалаһында "Мәскәү һылыуҡайы - 2020" матурлыҡ конкурсы уҙғарыла. Конкурсҡа һайлап алыу 7 мартҡа билдәләнгән. Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта уҡып йөрөгән студенттар һәм аспиранттар ассоциацияһы һәм Yasmin ижади студияһы. Быйыл конкурс етенсе тапҡыр ойоштороло (ҡатнашыусыларға законлы вәкилдәренең яҙма ризалығы кәрәк).

✓Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө уңайынан 4 марттан Башҡортостанда пенсия һәм башҡа социаль түләүҙәрҙе ваҡытынан алда таратыу башланды. 10 марттан түләүҙәр график буйынса таратыла, тип белдерҙеләр Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса идаралығында.

ҠЫҪҠАСА

# ХӘТЕР КӨНӨ

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров айырым хәтер көнө тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы, был турала ул Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә белдерҙе.** "Беҙ быны кешеләргә зыяратҡа барып, туғандарын һәм яҡындарын иҫкә алырға мөмкинлек биреү өсөн эшләйбеҙ, ә властың бурысы - халыҡҡа уңайлы инфраструктура булдырыу (зыяраттарға маршруттар, дежурлыҡ, бөтә конфессия вәкилдәренең эшен ойоштороу)", - тине республика етәксеһе. "Башҡортостан Республикаһында Иҫкә алыу һәм ихтирам көнө тураһында"ғы указда 2 май көнө билдәләнә. Йыл һайын был көндә маршруттар һәм зыяраттарҙа башҡа саралар ойоштороуҙан тыш, муниципалитеттар Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, ветерандар һәм тол ҡатындарҙың, тыл эшсәндәренең, ҡораллы көстәр һәм хәрби хәрәкәттәр ветерандарының ҡәберҙәрен тәртипкә килтерергә ярҙам итергә тейеш.

✓ **Әсәлек капиталы беренсе бала тыуғас та тапшырыла башлай. Рәсәй Президенты Владимир Путин әсәлек капиталы программаһын киңәйткән законға ҡул ҡуйҙы. Был хаҡта рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталына һылтанма менән ТАСС хәбәр итте.** Документҡа ярашлы, программа 2026 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыла. Ике балалы ғаиләләр өсөн түләү күләме арта. Шулай уҡ түләүҙәрҙе йыл һайын индексациялау ҡаралған. Капиталды 2020 йылдың 1 ғинуарынан беренсе балаһы тыуған йәки уллыҡҡа алған ғаиләләр алырға мөмкин, уларға 466 617 һум түләнә. Икенсе һәм артабанғы бала донъяға килгән йәки уллыҡҡа алынған осраҡта түләү күләме 616 617 һум була. Ғаиләләрҙең әсәлек капиталын торлаҡ һалыуға йәки реконструкциялауға (шул иҫәптән баҡса участкаларында) йүнәлтеү мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Быйыл Рәсәйҙә миллиондан ашыу ғаилә беренсе һәм икенсе балаға аҡса алыр тип көтөлә.

✓ **Йыл башына Башҡортостанда даими халыҡ һаны 4037,8 мең кеше тәшкил иткән. 2019 йылдың 1 ғинуары менән сағыштырғанда ул 13,2 мең кешегә кәмегән, тип хәбәр иттеләр Федераль дәүләт статистикаһы хеҙмәтенән.** Эксперттар билдәләүенсә, уҙған йылдың ғинуар-декабрендә демографик хәл республикала яңы тыуған сабыйҙар һәм вафат булыусылар һанының кәмеүе менән айырылып тора. "Отчет осоронда халыҡтың тәбиғи кәмеүе күҙәтелә", - тип белдерҙе улар. Әйтәйек, 2019 йылда Башҡортостанда 41 меңдән саҡ ҡына ашыуыраҡ кеше тыуған (2018 йылда - 47 мең). Һәм, киреһенсә, былтыр республикала 49,2 мең кеше яҡты донъя менән хушлашҡан. 2018 йылда улар күберәк булған - 50,4 меңдән ашыу. "Уҙған йылда республикала мең кешегә 10,4 яңы тыуған сабый һәм 12,2 үлгән кеше тура килгән", - тип өҫтәне статистиктар.

✓ **Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты һәм "Әсәләр советы" "Бала табырға ваҡыт" акцияһын башлап ебәрҙе. Иң әүҙемдәргә йөклө ҡатын-ҡыҙҙар йә иһә яңы тыуған сабыйҙар өсөн бүләктәр тапшырыла.** Хәбәр итеүҙәренсә, акция йөклө йәки бала табырға теләгән ҡатын-ҡыҙҙарға бер-береһенә йыл башынан балалы ғаиләләр өсөн дәүләт яғынан тормошҡа ашырылған ярҙам саралары хаҡында һөйләргә мөмкинлек бирә. "Бала табырға ваҡыт" акцияһында ҡатнашыу өсөн Instagram селтәрендә #балатабырғаваҡыт билдәһе менән фото һалырға һәм йөклөлөктө планлаштырыу тарихы тураһында яҙырға кәрәк. Бала табыу хаҡында уйлаған гүзәл заттарға ошо социаль селтәрҙә фанбиллектәр һәм фильтрҙар булдырыла. Бала көткән ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең фотоһын info@butskaya.ru электрон почтаһына ебәрергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БУШЛАЙ...

**2020 йылдың 1 сентябренән Башҡортостанда барлыҡ мәктәптәрҙең 1-4 класс уҡыусыларын бушлай ашатыу башлана. Был хаҡта Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе.**

"1 сентябрҙән башлайбыҙ. Әҙерләнеүегеҙҙе һорайым. 1 сентябрҙән бөтә мәктәптәрҙә лә ата-әсәләр балаларына нимә ашатыуҙарын күреһен өсөн дегустация саралары үткәрергә кәрәк", - тине республика етәксеһе.

Киләһе уҡыу йылынан республикала башланғыс класс уҡыусылары өсөн бер тапҡыр ҡайнар аш менән тукланыу хаҡы 55 һум була. "Ошо суммаға баланы һәйбәт ашатырға мөмкин. Иң мөһиме - быны кешесә һәм белеп эшләү", - тип өҫтәне Радий Хәбиров һәм республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякинға Финанс министрлығы һәм федераль Мәғариф министрлығы вәкилдәре менән ошо мәсьәләне өйрәнергә ҡушты. Башҡортостанда мәктәптәрҙә ҡайнар аш менән намыҫлыҙ тәьмин итеүселәр булмаҫҡа тейеш, тип иҫкәртте республика етәксеһе. Ул муниципалитет башлыҡтарына быны иғтибар менән күҙәтеп барырға ҡушты. "Тәү сиратта дәүләтерән һеҙгә булыр. Бының өсөн һеҙ яуаплы", - тине Хәбиров.

Йәкшәмбе, 1 мартта, Рәсәй Президенты Владимир Путин башланғыс класс уҡыусыларын бушлай ашатыу тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Документ хоҡуҡи мәғлүмәт интернет порталында баҫылған. Ул баҫылып сыҡҡандан һуң 60 көн үткәс көсөнә инә.

# КӨТӨП АЛЫНДЫ...

**Өфөнөң Затон биҫтәһендә Әҙеһәм Иҫҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбенең яңы бинаһын асыу тантанаһы уҙҙы.**




Был - биҫтәләге берҙән-бер балаларға өҫтәмә музыкаль белем биреү учреждениеһы, ул 1966 йылдан бащлап йәш өфөләрҙе башҡарыу оҫталығы һәм музыка сәнғәте нигеҙҙәренә өйрәтә. Бығаса тиклем музыка мәктәбе Пожарский урамындағы 1926 йылда һалынған иҫке бүрәнә бинала урынлашҡайны. 2016 йылда уҡыу йорто Әхмәтов урамындағы бинаға күсерелде. Һуңғараҡ биҫтәлә халыҡ һанының артыуына бәйле Чкалов һәм Союз урамдары киҫешкән урында балалар музыка мәктәбенең яңы заманса бинаһын һалыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Төҙөлөш 2018 йылдың йәйендә башланды. Бина йыл ярым эсендә төҙөлдө. Яңы бинала 400 уҡыусының төрлө йүнәлештәр буйынса белем алыу мөмкинлеге бар. Фортепиано, гитара, скрипканан тыш, ҡурай, ҡумыҙ, думбыра кластары асылды, башҡорт фольклор ансамблдәре һәм оркестрҙар, хореография класы ойошторолдо. "Хәҙер был республикабыҙҙа иң яҡшы музыка мәктәптәренең береһелер, моғайын, - тине Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров. - Быны менән генә туктап ҡалмабыҙ. 2020 йылда Ҡыйғы һәм Миәкә районларында яңы музыка мәктәптәрен проектлау ҡаралған. Уларҙы киләһе йылда тапшырабыҙ. Артабан барлыҡ ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә яңы музыка мәктәптәрен төҙөүҙе дауам итербеҙ".

# ТЫЙЫРҒА!

**Бөгөн "Юғары ос!" мәғариф форумында Радий Хәбиров дәрестә балаларға смартфондар ҡулланыуҙы тыйыуҙы мәктәптәр ҡарамағына ҡалдырырға, тигән ҡарар ҡабул итеүен әйтте.**

"Әлбиттә, был ҙур зыян", тип билдәләне республика етәксеһе һәм психолог Андрей Курпатовтың һанлы аутизм тураһында сығышы менән видеоролик күрһәтте. Бынан алда мәктәптәрҙә уҡыусыларға телефондар кәрәкме, юҡмы икәнен белеү өсөн ата-әсәләр араһында һорау алыу уҙғарылды. Уларҙың 75 проценты кәрәкмәй тип яуапланы, 25 проценты смартфон ҡулланырға кәрәклеге өсөн тауыш бирҙе.

"Хөкүмәттә ҡул аҫтында эшләгән хеҙмәткәрҙәремә телефонда соҡоноп ултырыуҙы тыйҙым. Ысынлап та, һөҙөмтә бар. Үҙемдә тәртип урынлаштырырмын да, ә бына мәктәптәрҙә белмәйем, - тип билдәләне республика етәксеһе. - Әлбиттә, Испанияла, Францияла тыйыу тәжрибәләре бар, бынан бер кем дә үлмәгән. Ләкин беҙҙең йәмғиәт - рәнйеүсән. Тыйһаң, балаларҙың хоҡуғын һәм иркен тартып алалар тип прокуратураға яҙа башларҙар". Радий Хәбиров Мәғариф министрлығына ошо мәсьәләне өйрәнеүҙе дауам итергә тигән тәҡдим индерҙе. Ул пилот проекты сифатында бер нисә мәктәптә генә смартфондар файҙаланыуға сикләү индерергә кәңәш бирҙе.

# ҠОРОЛТАЙҘА...

**Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында етәксе алмашынды. Йәмәғәт ойошмаһын хәҙер Ғәлим Яҡупов етәкләй.**

Ғәлим Миңлегәле улы Яҡупов 1972 йылдың 3 сентябрендә Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Профессиональ журналист. 1993 йылда "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһында мөхәррир вазифаһында эш башлап, 2000-2004 йылдарҙа "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы генераль директоры урынбаҫары - радиотапшырыуҙар студияһы директоры вазифаһын башҡара. Һуңынан Новосибирскиға эшкә китә, унда "Новосибирск" бөтә Рәсәй телерадиотапшырыуҙар компанияһы" филиалы директоры булып эшләй. 2007-2010 йылдарҙа "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы директоры була. 2010 йылдың декабренән - Башҡортостан Республикаһы мәҙәниәт министры урынбаҫары, 2011-2017 йылдарҙа - "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы директоры. 2017 йылдың мартында - Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе урынбаҫары, һуңынан 2017 йылдың июлендә "Матч ТВ" федераль спорт телеканалының Екатеринбург филиалы етәксеһе итеп тәғәйенләнә. 2018 йылдан - "Вся Уфа" телеканалының генераль продюсеры.

Бынан алда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһын Искәндәр Юлдашев биләне. Ул Рәсәй башҡорттарының Федераль милли-мәҙәни автономияһы башҡарма директоры итеп тәғәйенләнде.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә яҙғы ташҡынды үткәреүгә әҙерләнәләр. Быйыл ташҡын осоро ғәҙәттәгенән иртәрәк башланыр, моғайын, ти белгестәр. Ҡала хеҙмәттәре әҙерлек эштәрен башлаған да инде. Һыу баҫыу ихтималлығы булған райондарҙа иҫкәртеү рейдтары уҙғарыла, ошонда йәшәгәндәрҙең исемлектәре яңыртыла. Ҡарҙың нығ иреүе сәбәпле һәр ваҡыт һыу баҫҡан урамдарҙан ҡар сығарыла.

✓2 марттан ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре баш ҡала юлдарында "Йәйәүле" профилактик операцияһын үткәрә. Водителдәрҙең һәм йәйәүлеләрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен белеүен тикшереү 12 мартҡа тиклем дауам итә. Полиция хеҙмәткәрҙәре айырыуса юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған йәйәүлеләргә, атап әйткәндә, тыйылған урында йәки светофорҙың ҡыҙыл утына юл аша сыҡҡандарға иғтибарын йүнәлтә.

✓2019 йылда республика бюджеты килеменең дөйөм күләме 199 миллиард һумға тиерлек еткән. Был 2018 йылға ҡарағанда 20 миллиард һумға йәки 11,2 процентҡа күберәк, тип белдерҙеләр Башҡортостан Хөкүмәтендәге ултырышта. Шул уҡ ваҡытта уҙған йылда республика бюджеты сығымы 215 миллиард һум тәшкил иткән, был 2018-гә ҡарағанда 35 миллиард һумға йәки 20 процентҡа күберәк.

✓Стәрлетамаҡтан 20 йәшлек йырсы Эрик Әхмәтов федераль каналдың "Әйҙәгеҙ, бөтәбеҙ бергәләп!" проектында сығыш яһаны. Эрик 88 тауыш йыйып, өс лидер иҫәбенә инде. Хөл иткес ҡаршы тороуҙа ул 92 балл йыйҙы һәм "Әйҙәгеҙ, бөтәбеҙ бергәләп!" шоуының финалына үтте.

✓Башҡортостанда 2020 йылдың ғинуарында 122,7 мең квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән, тип хәбәр итә Башстат. Шуның 3,5 мең квадрат метрын төҙөүселәр - юридик берәмектәр, 119,2 мең квадрат метрын шәхси төҙөүселәр һалған. Милекселәр 12,58 миллиард һумға төҙөлөш эштәрен башҡарған (2019 йылдың ғинуарына 138,4 процент).

✓21 февралдән Өфөлә 18-се маршрут буйынса "Үҙәк баҙар - 8 Март ҡасабаһы" троллейбус хәрәкәте тергеҙелә. 2010 йылда юлдарҙы төҙөкләндереү сәбәпле, 18-се маршрут буйынса хәрәкәт туҡтатылғайны.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА СОВЕТЫНДА

# КҮКТӘН КӨТМӘГЕҘ...

**Беренсе квартал - отчеттар һәм киләсәккә пландар билдәләү ваҡыты. Был йоланан Өфө ҡалаһы хакимиәте лә ситтә ҡалманы. Ошо көндәрҙә ҡала округы Советының Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашҡан ултырышында көн үҙәгенә сығарылған 18 мәсьәләнең иң мөһиме, моғайын, ҡала хакимиәте башлығының уҙған 2019 йылда Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫеше йомғаҡтары буйынса яһалған отчетын тыңлау булғандыр.**



Үҙенең сығышында Өлфәт Мостафин властың халыҡҡа асыҡ булыуы, улар менән бәйләнештә эшләүе, фекерҙәрен тыңлауы, ишетеүе һәм ҡолаҡ һалыуы, проблемалы мөрәжәғәттәр буйынса эш алып барылыуы тураһында билдәләне, сөнки дәлилле конструктив тәнҡит эште тағы ла яҡшыртыуға этәргес булып тора. Быға дәлил итеп ул былтыр хакимиәткә 65 мең мөрәжәғәт килеүен һәм уларҙың һәр береһе иғтибарға алыныуы хаҡында белдерҙе.

Әлбиттә, үҫеш, тәү сирата, иҡтисадҡа ныҡ бәйле. Былтыр ҡала бюджеты килеме 19,6 процентҡа артҡан һәм 33 миллиард һумдан ашып киткән. Сығымдар 32,4 миллиард һум булған, йәғни йыл профицит менән тамамланған. Кредиттарҙы килем иҫәбенә ябыуҙан муниципаль бурыс күләме 100 миллион һумға кәмегән, шулай уҡ кредит килешеүен ҡайтанан ҡарау һөҙөмтәһендә муниципаль бурысты хеҙмәтләндереүгә киткән сығымдарҙы кәметеүгә өлгәшенгән, йәғни процентлар түләү буйынса экономия 185 миллион тәшкил иткән. Былтыр сәнәғәт етештереүе темпы 104 процент булған, ҡала иҡтисадына инвестициялар күләме 4 миллиард һумға артып, 102 миллиард һумдан ашҡан.

Хакимиәт башлығы үҙ сығышында торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, транспорт хеҙмәтләндереүе, урамдарға яҡтылыҡ үткәреү системаһын модернизациялау, йәшелләндереү, капиталь ремонт һәм ял итеү зоналарын, скверҙарҙы реконструкциялау мәсьәләләренә лә туҡталды. Былтыр ҡаланы төҙөкләндереү маҡсатына 1 миллиард һумдан ашыу сумма тотонолһа, быйыл ул ике тапҡырға арттырыласаҡ. Әйткәндәй, ҡалала бер үк ваҡытта бер нисә проект тормошҡа ашырыла, шулай уҡ йыл һуңына тиклем ҡала үҫешенең Генераль планын эшләп бөтөү ҙә мөһим бурыстарҙың береһе булып тора.

Радий Хәбиров яңы команда эшләй башлағандан һуң баш ҡалала ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелеүен билдәләп, баш ҡаланы артабан да үҫтереү буйынса төп бурыстар билдәләне. Улар ер һәм милек мөнәсәбәттәренә, территорияны төҙөкләндереүгә, йәмәғәт транспорты эшмәкәрлегенә һәм башҡа өлкәләргә ҡағыла.

"Ҡала командаһы тырышты, эшләне, әммә быға тиклем республиканың дәүләт власы органдары менән мөнәсәбәттәрҙең дөрөҫ көйләнмәүе баш ҡала үҫешен тотҡарлап торҙо. Йәмғиәттә төшөнкөлөк, үҙ көсөнә ышанмау хөкөм һөрҙө, - тине төбәк Башлығы. - Әлбиттә, бер йыл эсендә ҡаланы тулыһынса үҙгәртеү мөмкин түгел. Әммә хәҙер эш планлы, тыныс бара".

Радий Хәбиров баш ҡалала таҙалыҡ булдырыу кеүек проблемаларҙы хәл итеү кәрәклеген белдерҙе: "Әгәр беҙ ҡаланы бысраҡтан таҙартмаһаҡ, үҙебеҙҙән һуң ыңғай фекер ҡалдыра алмаясаҡбыҙ. Мин быға тиклем дә Өфөләге ҡыштың һәм ҡарҙың торлаҡ-коммуналь йәки хужалыҡ ҡына түгел, ә сәйәси проблема булып тороуы тураһында белдергәйнем. Тап ошо нигеҙҙә халыҡтың властарға ышанысы кәмегән". Республика Башлығы баш ҡалала таҙалыҡ булдырыуға аҙымлап барырға кәрәклеген билдәләне. "Алға барыу мөмкинлегебеҙ, йылдарға һуҙылған, "ҡартайған", ҡул һелтәп ҡуйылған бик күп проблемаларҙы хәл итеп, беҙ Рәсәйҙең иң яҡшы ҡалалары рәтенә баҫа алабыҙ", - тине ул.

Республика Башлығы Өфө халҡын ҡылыҡһырлап: "Улар - ябай ғына граждандар түгел. Улар республиканың иң юғары интеллектлы, иң белемле, үҙаллы һәм төрлө ҡалыптарҙан азат фекер йөрөткән категория", - тип белдерҙе һәм шуға ла улар менән ышаныс нигеҙендәге мөнәсәбәттәр төҙөүе еңелдән булмауын, ә инде әгәр баш ҡаланы, унең халҡының кәйефен үҙгәртмәгәндә, республика алдына ҡуйылған бурыстарҙы үтәү мөмкин булмаясағына баҫым яһаны.

Радий Фәрит улы шулай уҡ төҙөлөш өлкәһенә, атап әйткәндә алданған өлөшсөләр, социаль объекттар, шул иҫәптән мәктәптәр етештереүенә иғтибар бүлде. Ул Өфөнөң нисек итеп "финанс-иҡтисади пикенан" сығыуын да билдәләне: "Бер йыл эсендә ҡала хакимиәте менән республика Хөкүмәте ҡулға-ҡул тотонашоп эшләп, ҙур миллионлы, күп миллиардлы бурыс мәсьәләһен хәл итте. Хәҙер ҡала бюджеты дефицитта түгел, ә профицитта".

2024 йылда баш ҡала Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүҙең 450 йыллығын билдәләйәсәк. Республика Башлығы ошо йәһәттән теейшле Указ ҡабул итеү буйынса Рәсәй Президенты Владимир Путинға мөрәжәғәт итәсәген белдерҙе. "Был бик мөһим дата. Тейешле документтар әҙерләнә һәм ил етәксеһенә сығасаҡмын. Әммә указ көтөп ятырға кәрәкмәй, әҙерлек эштәрен алдан башлау зарур. Республика Хөкүмәте ярҙам итергә әҙер. Өфө уны нисек ҡаршылар? 450 йыл, әлбиттә, юбилей түгел, әммә ниндәйҙер ҡарар ҡабул итеп, алға барыу юлын табырға мөмкин", - тине Радий Фәрит улы.

Республика Башлығының был һүҙҙәре хәтергә уйылып ҡалған "күктән көтмәгеҙ, бәхет тик килмәҫ" тигән шиғыр юлдарын иҫкә төшөрҙө.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЙЫЛЫЛЫҠ ӨСӨН - ЯҢЫСА



**Ҡыштың яҙ менән ҡырталашып, үҙенең хакимлығын бирмәскә маташҡан мәле. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә ошо ваҡыттың хәүефлелеген билдәләп, Өлфәт Мостафин урамдарҙы, тротуарҙарҙы һәм йәйәүлеләр йөрөгән юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу һәм һәр саҡ контролдә тоторға, боҙлауыҡтар барлыҡҡа килеп, граждандарҙың сәләмәтлегенә зыян килтереү ихтималлығын иҫтән сығармаҫҡа саҡырҙы.**

Шулай уҡ тиҙҙән ғәм иғтибарын үҙенә йәлеп итәсәк йылғаларҙа боҙ китеү һәм һыу ташыу проблемаһы ла көн үҙәгендә булды. Әммә төп урында йыл һуңында - йыл башында (ҡышҡы миҙгелдә) халыҡ араһында ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырған коммуналь түләүҙәр күләменең артыуы сәбәптәре торҙо. Был турала "Өфө инженер селтәрҙәре" МУП-ының башҡарма директоры Максим Петров сығыш яһаны.

Мәғлүм булыуынса, ағымдағы йылытыу миҙгелендә Өфө ҡалаһы йылылыҡ өсөн түләүҙәрҙең яңы ысулына - "1/8" схемаһына, йәғни факт буйынса, йылылыҡ ҡулланылған ваҡыт өсөн генә түләүгә күсте. Уға ярашлы, әгәр йортта дөйөм иҫәп ҡоролмаһы ҡуйылған булһа, милек хужалары счетчик күрһәткән һандар буйынса ғына түләй. Әгәр иҫәп ҡорамалы юҡ икән, иҫәп-хисап норматив буйынса һанала. Максим Петров бындай ысулдың ыңғай яғы тип түләүҙәрҙең асыҡ булыуын һәм улар буйынса тикшереү алып барыуы еңелләшеүен, йылылыҡ өсөн йәйгеһен түләргә кәрәкмәүен, йыл йомғаҡтары буйынса түләүҙәрҙе дөрөҫләү талап ителмәүен билдәләне. Схеманың кире яғы булып йылытыу осоронда түләүҙәрҙең ҙур суммаға барып баҫыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Үкенескә күрә, яңы системаға күскәндә 2019 йыл башында 1/12 схемаһы, йәғни йылылыҡ миҙгелендәге сығымдарҙы 12 айға бүлеп түләү, тормошҡа ашырылһа, йыл һуңында икенсе - 1/8 схемаһы индерелде. Шуға күрә түләүҙәрҙә айырма барлыҡҡа килде һәм 2020 йылдың беренсе кварталында ошо айырма ҡаплана. Был - күсеү осорондағы һуңғы корректировка, - тине Максим Петров. Бындай төҙәтеүҙәр былтыр энергия менән тәьмин итеүсе ойошма менән туранан-тура килешеү төҙөүселәр өсөн ике тапҡыр үткәрелә: һәр бер ойошма - йылылыҡ биреүсе һәм идара итеү компанияһы - үҙе коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеүсе булған осорҙо ҡарай. Билдәләнеүенсә, халыҡҡа уңайлы булһын өсөн төҙәтеүҙәр ике этапта - ғинуар һәм февраль өсөн индерелә. Әлеге ваҡытта предприятие икенсе этапты үткәрергә әҙер.

Кәңәшмә һуңында Өлфәт Мостафин тағы ла бер тапҡыр юлдарҙағы соҡорҙарҙы "ямау" һәм, ер ҡарҙан әрселгәс, ҡалала санитар таҙартыу ойоштороу зарурлығына иғтибар йүнәлтте.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Имгәнгәндә

❖ Яңы имгәнгән урынға ала миләүшә майы, күптән күгәргән урынға розмарин майы һөртөү килешә. Һыҙырылған, яраланған урынға календуланан төнәтмә һәм май эшләп һөртөү ярҙам итә. Төнәтмә әҙерләү өсөн календула сәскәһенә 1:5 нисбәтендә араҡы ҡойорға, 3 аҙна төнәтергә һәм боҫламалар эшләргә.

❖ Май әҙерләгәндә календула сәскәһен ваҡлап ыуып, эс майы менән 1:10 нисбәтендә ҡатыштырырға. Эс майын бының өсөн пар өҫтөндә тотоп иретергә. Был дауаны ҡулланғанда яра эҙе ҡалмай.

### Яра уңалтыу

❖ Яраны марганец иретмәһе менән сайып, спиртҡа һалынған кесерткән япраҡтарынан боҫлама эшләп ябырға. Төнәтмә эшләү өсөн бер литр һауытты тултырып кесерткән япрағы һалып, өҫтөн ҡаплағансы спирт ҡойорға, ныҡлы ябырға һәм 14 көн ҡояшта төнәтергә.

❖ Дегәнәк, сөгөлдөр, юл япрағы, ерек, сирень япраҡтарын төйөп, уңалтыу һәм таҙартыу өсөн яраға ябырға була.

❖ Дегәнәктең яңы ҡаҙып алынған 75 г тамырын ваҡлап турап, бер стакан зәйтүн йәки үҫемлек майы ҡойорға, бер тәүлек төнәтергә. Шунан ҡайнатырға, һөҙөргә һәм һыуытырға. Бәйләместе килеп сыҡҡан ҡайнатмала сылатып, яраға көнөнә 2-3 тапҡыр ябырға. Оҙаҡ уңалмаған яраны ла бөтөрә.

❖ Оҙаҡ уңалмаған яраға бер ус тирәк бөрөһөн ярты литр сусҡа майында 20 минут ҡайнатып, һөҙөргә һәм һөртөргә. Операцианан һуң ҡалған яраны ла яҡшырта.

❖ Бармаҡтағы яра оҙаҡ уңалмаһа, 1 сей йомортҡаға 1 ҡалаҡ бал ҡатыштырып бинтҡа һыларға, яраға ҡаплап бәйләргә. Бәйләместе көнөнә ике тапҡыр - иртәнсәк һәм кискеһен яһарға, бер аҙнанан яра уңалыр.

❖ Аяҡ яраланһа, ябай ғына әҙерләнгән дауа ярҙам итер. Ваҡ ҡырғыс аша кер һабыны һәм һуғанды үткәреп, бутарға һәм шәкәр ҡушып болғарға. Барыһын да бер тигеҙ нисбәттә алырға. Яралы урынға бәйләргә. Тәүҙә уны 3 сәғәт һайын яңыртып бәйләргә, яра уңала башлағас, һирәгерәк эшләргә була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Элмәк йөй декоратив ҡабартма сигеү өсөн ҡулланылған. Уның ярҙамында ҙур булмаған түңәрәктәр ҡайылған, соляр биҙәктәргә төрлө төҫтәге түңәрәктәрҙе ҡушып эшләгәндә лә ҡулланылған был йөй, был осраҡта төрлө оҙонлоҡтағы сәнсемдәр ҡояш нурҙарын һынландырған.**

Ҡайһы бер көньяҡ-көнсығыш ауылдарында (күпселек Урал аръяғында) ҡусҡарлы биҙәктә хисаплы шыма нағыш менән эшләнгән ваҡ деталдәр осрай. Ғәҙәттә йондоҙҙар кеүек таралышҡан, йә шахмат тәртибендә урынлаштырылған, йә геометрик фигураларҙы - ромб, өҫкө өлөшө тоташҡан өсмөйөш, әүернә рәүешле оя биҙәктәр хасил итеп берләштерелгән бәләкәй генә шаҡмаҡтар шулай сигелгән. Түшәк һәм сергетыштарҙа бындай нағыштар төҫлө ҡайманың тышҡы яғында, әйберҙең ситендә урынлашҡан. Ә бына янсыҡтарҙа ситтә генә түгел, урта өлөшөндә лә ҡайылған.



*Хисаплы шыма нағыш һәм ҡуш элмә менән ҡайылған янсыҡтар. МАЭ. Т.К. Сурина фотоһы.*

Көнсығыш башҡорттарының (Силәбе һәм Ҡурған) боронғо ҡайыу алымдарына хас булған хисаплы шыма нағыш Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышындағы табындарҙа ла киң таралған булған. 1906 йылда табындар йәшәгән Ҡолош ауылында (Учалы районы) С.И. Руденко ҡыҙыл ҡомас тауарҙан тегелгән, суҡтары ҡыҙыл һәм йәшел йөн ептән эшләнгән, хисаплы шыма биҙәктәре ебәк һәм кизе-мамыҡ ептәр менән ҡайылған туй янсығы һатып ала (РЭМ, кол. 1002-31). Күк, йәшел, һары һәм ҡара фигуралар (урталағы ҡыя шаҡмаҡтарҙы тура дүртмөйөштәр уратҡан) ике рәт кәкерсәктәр ("кәзә тояҡ" йөйөн ҡулланып)менән уратылған. Бындай янсыҡтар шул заманда ла, һуңғараҡ та Урал аръяғы башҡорттарында йыш осрай (Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ райондары). Белорет районының көнсығыш өлөшөндә лә янсыҡтарҙы ҡайығандар. 1909 йылда Д. Месарош Һаҡмар буйынан хисаплы шыма нағышлы бер нисә янсыҡ һатып ала.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

**"Йәшлек" гәзите һандарының береһендә "Ҡыҙҙарға нисек хәрби булырға?" тигән һорауға яуап баҫылғайны. Был тема "Киске Өфө"нө уҡыусы ҡыҙҙарыбыҙҙы ла ҡыҙыҡһындыралыр, тип уйлап, отставкалағы хәрби табип булараҡ, ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәрби хеҙмәтенең нескәлеген бер аҙ яҡтыртып китмәк булдым. Гүзәлдәребеҙгә бер талай аныҡ ҡына кәңәштәр ҙә бирергә ниәтем.**

# ӘРМЕЛӘРГӘ БАРҺАҢ ИНЕ...

## һөйгән йәрҙәрең менән



Кемдәр улар - хәрби ҡатын-ҡыҙҙар? Тарихыбыҙҙы байҡаштырһаҡ, бик боронғо өләсәйҙәребеҙҙең өләсәйҙәре араһында ла сая ҡыҙҙар булғаны, уларҙың ирҙәре менән бергә яу сапҡаны хаҡында хикәйәттәр етерлек. Һуңғыраҡ тарихыбыҙҙа, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла яу яландарында - алғы һыҙыҡта яралыларға тәүге ярҙам күрһәтеүсе санитар һәм шәфҡәт туташтары, шулай уҡ элемтәселәрҙең күпселеге ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған. Әлеге көндә лә гүзәлдәребеҙ әрмелә үҙҙәрен һынатмай. Беҙ хеҙмәт иткән дивизияла яҡташ ҡыҙҙарыбыҙ ҙа байтаҡ ҡына ине. Учалы ҡыҙы Сәүиә, Белореттан Рита, Салауат районынан Миләүшә, Әлшәйҙән Нурия, Люциә, Ҡалтасынан Лена һәм башҡалар хеҙмәт иттеләр. Улар башлыса үҙҙәренең офицер йә прапорщик булған хәләл ефеттәренә эйәреп килгәйнеләр. Хәҙерге көндә хаҡлы ялдалыр инде улар.

Тураһын әйтергә кәрәк: ҡатын-ҡыҙҙарҙың әрме хеҙмәте лә бик еңелдән түгел! Төп һөнәренән (элемтәсе, табип, шәфҡәт туташы, ашнаҡсы һәм башҡа) тыш, ир-егеттәр менән бер рәттән хәрби формаға ҡайыш тағып, итек кейеп, стройҙа йөрөү булһынмы ул, әленән-әле "полевое" учениеларға сығып, ҡырҙа палаткаларҙа йәшәүме, автомат-пистолеттарҙан атыу йә спорт күнекмәләреме - улар һәр саҡ алғы сафта. Хәрби хеҙмәт юлын һайлаған ҡыҙҙарыбыҙға етди, хатта бәғзе ваҡыт уҫал командирҙарҙың бойороғон һис һүҙһеҙ үтәп йөрөү кәрәклеген, "Есть!" тигәндән башҡа һис бер нәмә әйтергә тейеш булмауын да күҙ уңынан ысҡындырыу ярамай. Командир менән бәхәсләшеү ҡәтғи тыйыла. Уның теге йәки был бойороғо һинең күңеленә оҡшап етмәгән, хатта ғәҙелһеҙ һымаҡ булып тойолған хәлдә лә! "Ҡыҙыу нөктәләргә" барып эләгеү ихтималлығын да онотмау зарур. Урыҫтар әйтмешләй, служба - есть служба. Әлбиттә, сирләп киткән саҡтар ҙа булғылай, ғаиләле ҡатындар өсөн "декрет ялы"на китеүҙәр ҙә тәбиғи. Бындай осраҡтарҙа илебеҙҙең закондары тулыһынса үтәлә, йәғни ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың хоҡуғы ҡыҫылмай, тимәксемен. Хәрби ҡаласыҡтарҙа балалар баҡсаһы ла, мәктәптәр ҙә бар...

Ә шулай ҙа әйтергә ниәтләгән һүҙем икенсе. Мине һәр саҡ нык ҡына борсоған мәсьәлә - бәғзе бер гүзәлдәребеҙҙең хәрби хеҙмәткә яңғыҙ килеп, ситтәргә тормошҡа сығып китеүе. Үкенескә, ундайҙар менән танышмын. Башҡа милләт кешеләрен бәхетле итеүсе нәфис заттарыбыҙҙы ҡыҙғанам. Башҡа халыҡтар тарафынан беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙҙың баһаланыуы, бер яҡтан, яҡшы ла, әммә... мин уларҙы һәр саҡ йәлләй инем. Бала сағынан Яҡшығолова, Сәлихова булып үҫкән яҡташ ҡыҙҙарыбыҙҙың артабан Гринько, Кувшинская булып китеүе, сәстәрен һарыға буяттырған, сөм-ҡара күҙҙәренә зәңгәр төҫтәге контакт линза ҡуйҙырған Рәсимәләр - Рая, Фәйрүзәләр Фая булып төрлөләнеүенә ошо көнгәсә "эсем көйә". Бындай ҡыҙҙарыбыҙҙың балалары, әлбиттә, башҡорт булмай... Элегерәк, үҙебеҙҙең Баймаҡ яғында егеттәрҙе әрмегә оҙатҡан саҡта, ошондайыраҡ бер шаян йыр ишеткеләй торғайным:

...Алмабикәм, Алмабикәм, Алмабикәм ҡала бит,

Алмабикәм ҡалмаҫ ине - военкомат ала бит!

Военкомат шау-гөр килә военкомдары менән.

Армияға барһаң ине һөйгән йәрҙәрең менән...

Тап бына ошо йырҙа әйтелгәнсә, офицермы ул, прапорщик йә контракт буйынса саҡырылған сержант, йә иһә рядовой һалдатмы - үҙебеҙҙең егеттәрҙе тормош иптәше итеп һайлап алһындар ине ҡыҙҙарыбыҙ. Яҡташ ир-егеттәребеҙ булмаған бер генә хәрби часть тә юҡтыр, тип уйлайым. Бынамын тигән милләттәштәребеҙ күп әрмелә. Берәй Маруська эләктереп алмаҫ элек, ана шуларҙы "ҡороҡлап" алһағыҙ - һеҙҙән уңған кеше булмаҫ, ҡәҙерле һылыуҡайҙар. Фәлән районыбыҙҙа тыуып үҫкән, әммә хеҙмәт иткәндә икенсе милләт ҡыҙына өйләнеп, йылдар буйына үҙенең ата-әсәһенә сираттағы ялға ла ҡайта алмай йөрөгән бәғзе бер башҡорт офицерҙары менән дә танышмын. Башҡорт ир-егеттәрен барыһы ла ярата. Егеттәребеҙҙең әрмелә нисек баһаланыуҙары хаҡында элек тә йыш ҡына яҙғылай торғайным. Яҡташығыҙ менән тормош ҡорһағыҙ, сираттағы ялға йыл һайын бергә ҡайтып йөрөү өсөн дә яҡшы буласаҡ. Балаларығыҙҙы ла саф башҡортса ғына һөйләшергә өйрәтеү мөмкинлеге булыр. Ситтә йәшәүегеҙгә ҡарамаҫтан, йәшәгән йортоғоҙ, фатирығыҙ - Башҡортостандың бәләкәй генә бер өлөшө һымаҡ тойолор. Үҙ өйөңдә рәхәтләнеп, ауыҙ тултырып башҡортса һөйләшеп ултырыуҙары - үҙе бер бәхет бит! Бының менән мин башҡа милләт халыҡтарын кәмһетергә уйламайым, Аллаһ һаҡлаһын! Тик шул ысынбарлыҡты таныйыҡ: улар ҙа (урыҫмы ул, мари йә сыуаш булһынмы) ана шуны - балаларының үҙҙәренең милләттәштәре менән йәрәшеүен теләй бит. Әсәйем мәрхүмәнең "Үҙ йынысығыҙҙы табып донъя көтөгөҙ" тигән һүҙҙәре әле булһа ҡолағымда сыңлай. "Йыныс" - ғәрәпсәнән урыҫсаға "принадлежность"(национальная, половая) тип тәржемәләнә. Ата-бабаларыбыҙ борон тәрәнерәк аңлаған һәм ҡулланған был һүҙҙең тик яртылаш мәғәнәһен генә беләбеҙ бөгөн.

Ә ғүмер тигәнең һиҙелмәй генә үтә тора. Һалдат лөғәтендә ошондай бер әйтем йөрөй: "Дембель - неизбежен, как крах империализма". Хеҙмәтегеҙҙе тамамлағас та әлеге ҡатнаш ғаиләлә, кемдең иленә ҡайтырға, тигән мәсьәлә иң беренсе планға сығасаҡ. Шул көн еткәс, һәр кемдең үҙ яғын ҡайыра башлауы - тәбиғи. Крыловтың басняһындағы аҡҡош, суртан, ҡыҫала һымаҡ тартҡылаштар була башлаһа - эш харап! Өҫтәүенә, балаларығыҙ ир етеп, ситтә тамыр йәйеп өлгөргән хәлдә, илгә ҡайтып йәшәү хаҡында бөтөнләйгә онотորға тура килмәгәйе...

Ә инде икегеҙ ҙә бер тирәнән булһағыҙ, отставкаға сыҡҡас - тыуған яғығыҙға шатланышып ҡайтып та етерһегеҙ, ин шәә Аллаһ. Нәҡ тә беҙҙең һымаҡ. Тик маҡтана, тип уйламағыҙ, берүк. Оҙайлы хәрби хеҙмәтте тамамлап, хәләл ефетем Әминә (хәрби званиеһы - старшина) менән бергә Башҡортостаныбыҙға ҡайтып, улдарыбыҙға үҙебеҙҙең яҡтың ҡыҙҙарын килен итеп алып биреп, бөгөнгө көндә ейән-ейәнсәрҙәребеҙ менән үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, көнгөр-ҡаңғыр итеп йәшәп ятыуыбыҙға ҡыуанып яҙыуым. Хәрби хеҙмәт юлын һайлаған гүзәлдәребеҙгә бына шундай кәңәшем бар ине. Раббыбыҙ һәммәләребеҙгә иман, һаулыҡ, ғаилә бәхете насип итһен.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН СЫҠҠАН ҮҪӘРГӘНДӘР БЕҘ!

**Этнограф Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, үҫәргәндәр башҡорт ырыуҙарының көньяҡ-көнсығыш төркөмөнә ҡарай. Ошо ғалим раҫлауынса, үҫәргәндәрҙең тәү атамаһы мөйтән булған. Үҫәргән ырыуының килеп сығышын өйрәнеү XX быуат башындағы революцияға тиклемге рус ғалимдары, совет осоро тарихсылары һәм яңы дәүер тикшеренеүселәре иғтибарынан ситтә ҡалмаған проблема булып тора.**




Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо башҡорт ырыуының иң боронғо тамырҙарын юллау ахырынаса хәл ителгән мәсьәлә түгел. Өҫтәүенә, үҫәргән этнонимы үҙе бер эксклюзив башҡорт атамаһы булып, тик башҡорт ырыу-ҡәбилә номенклатураһында ғына осрай. Әйтергә кәрәк, шул уҡ ҡыпсаҡ, табын, меркет, салйоғот, ҡоңғрат, мең, тиләү һәм башҡа бәғзе бер башҡорт ырыуҙары атамаларының этнонимик параллелдәрен ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡарағалпаҡ, ҡырғыҙ, нуғай кеүек төрки ҡәүемдәрендә, монголдарҙа осратып була. Шуға ҡарамаҫтан, ғалимдарҙың күпселеге үҫәргән берлегенең боронғолоғон һәм уның башҡорт этносы формалашыуындағы ролен инҡар итмәй. Үҫәргәндәрҙең башҡорт халҡының иртә этник субстратына ҡарауын белдереүсе этнограф Р.Ғ. Кузеев былай тип яҙа: "Үҫәргәндәрҙең, түңгәүерҙәрҙең, шулай уҡ башҡа ҡайһы бер башҡорт ҡәбиләләренең ата-бабалары иртә урта быуаттар эпохаһындағы ғәрәп-фарсы сығанаҡтарында баджгард, баджгурд, басджирт йә иһә башхарт дөйөм исеме аҫтында билдәле була." Икенсе бер яҙмаһында ул үҫәргән һәм түңгәүерҙәрҙе "иртә урта быуат баджгардтары" тип атап, уларҙы бурджан-бөрйәндәр менән бергә боронғо башҡорт ҡәүеменең ядроһы итеп күрһәтә.

Р.Ғ. Кузеевтың ошо өс башҡорт ырыуының башҡорт этнонимын йөрөтөүе һәм халыҡ булараҡ башҡорттоң этник үҙәген (ядроһын) тәшкил итеүе хаҡындағы фекерҙәренең билдәле сәбәбе бар. Күрәһең, тап ошо өс ҡәүемдең ҡасандыр уртаҡ шәжәрәләре булып, ошо юғалған сығанаҡта уларҙың тәү ата-бабалары сифатында билдәле бер уртаҡ тарихи шәхес күрһәтелгән булған.

Р.Ғ. Кузеевтың тап бөрйән, үҫәргән һәм түңгәүер ырыуҙарының башҡорт исеме аҫтында танылыуы хаҡындағы фекерҙәре XX быуат башындағы билдәле этнограф Сәғит Мираҫовтың "Башҡорт шәжәрәләре" тигән хеҙмәте менән бәйле булыуы мөмкин. С. Мираҫов бына ниҙәр яҙа (нөсхәләге орфографияға ярашлы бирелде): "Әгәр ҙә был шәжәрәләргә та дл янырға тура килһә, был шәжәрәләр беҙгә байтаҡ нәмәләр асыб бирә алалар. Берҙән, дөйөм башҡорт халҡының бер атанан ғына таралған халыҡ булмай, мынан мең - мең ярым йыл элек һәр ҡәбилә үҙ алдына айырым йәшәб һуңынан бер халыҡ, бер йәмғиәт булып китеүҙәрен; икенсе: башҡорттарҙың төрөк нәҫеленән булыуын. Сөнки һәр бер шәжәрә үҙенең төб бабаларын төрөк ҡәүеменән булған мәшһүр бер кешегә итеб бәйләйҙәр. Бәғзеләре һун төрөктәрендә булған Баламирға, бәғзеләре Аланджа-ханға, Угузға, бәғзеләре уйғыр төрөктәренән булған Култикингә, бәғзеләре манғул хандарынан булған Чингиз, Мамай, Майҡы, Туҡтамыш, Идигу, бәғзеләре Аҡһаҡ-Тимергә итеб бәйләйҙәр. Мәҫәлән, Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәләре Уғуз-хандан айырылыб һуңынан үҙҙәре өлкән бер дәүләт булып манғул баҫҡанлығы дәүерендә һәр тарафҡа таралғандар әйтәләр. Шулай уҡ Ҡаңлы ырыуҙары үҙҙәренә Ҡаңлы исемен Уғуз биргән тиҙәр. Бөрйән, Үһәргән, Түңгәүер ырыуы шәжәрәләре үҙҙәренең төб бабаларын уйғыр төрөктәренең ханы булған Култикин, анан һуң Аланджа-ханға, анан Нух улы Яфәскә итеб бәйләйҙәр. Табындар үҙҙәрен Майҡы-бийгә, анан Аҡһаҡ-Тимергә бәйләйҙәр. Меңләләр үҙҙәрен һун төрөктәренең ханы Баламирға бәйләйҙәр. Миндә юғарыла әйтелгән ырыуҙарҙың һәр ҡайһының шәжәрәләре бар. Әммә Көҙәй, Ҡыуаҡан, Ҡатай, Тамиән ырыуҙарының ғына шәжәрәләрен күрә алғаным юҡ."

Күренеүенсә, этнограф С. Мираҫов бер юлы өс айырым башҡорт ырыуының төп бабаһы сифатында тарихта Көнсығыш Төрки ҡағанаты исеме аҫтында билдәле булған дәүләттең сәйәси һәм хәрби эшмәкәре Култегинде күрһәтә.

Үҫәргәндәрҙең этник структураһын килеп сығышы буйынса тулыһынса бер иш, тип әйтеп булмай. Был бер ни тиклем кимәлдә уларҙың эске бүленешендә - теге йәки был аймаҡ-түбәләргә ҡарауында ла сағыла. Тикшеренеүсе П.С. Назаров үҫәргәндәрҙең түбәндә һаналып үтелгән бүлем атамаларын яҙып алған: ҡунаҡ, аснаҡ, әфәнде, сураш, бишей, шишей, айыу, ҡыуаҡан һәм һары. Быларҙың һуңғы ике бүлеме - ҡыуаҡан һәм һарылар - үҫәргәндәргә һуңыраҡ осорҙа килеп ҡушылған, тип иҫәпләнә. Күрәһең, айырым ырыу булған ҡыуаҡан башҡорттарының бер ярсығы ниндәйҙер сәбәптәр менән бәйле үҫәргәндәргә ҡушылып китеп, уларҙың бер түбәһен барлыҡҡа килтергән. Ә үҫәргәндәрҙең төп этник нигеҙен мөйтәндәр тәшкил итә. Башҡа төрки ҡәүемдәрендә үҫәргән этнонимы булмаған хәлдә лә, ҡарағалпаҡтар һәм үзбәктәр составында мөйтән ҡәбиләһе барлығы билдәле. Атамалары тап шул мөйтән этнонимына ауаздаш боронғо халыҡтар төрлө тарихи сығанаҡтарҙа теркәлеп ҡалған. Үҫәргән ырыуының тәү тарихи тамырҙары ла ошо мөйтән атамаһы менән танылған ҡәүемдәргә барып тоташыуына шик юҡ.

Үҫәргән ырыуы башҡорттары фольклоры, уларҙың риүәйәттәре, яҙма шәжәрәләре нигеҙендә уларҙың килеп сығышы хаҡында билдәле һығымталар яһап була. Ошо фольклор сығанаҡтарында, үҫәргән шәжәрәләрендә, ошо ырыу хроникаһын тәшкил иткән "Таварих-и башҡорт" әҫәрендә үҫәргән ырыуының тәү бабаһы сифатында Мөйтән бей исемле легендар шәхес күрһәтелә. Күрәһең, был осраҡта тәү баба исеме, йәғни антропоним нигеҙендә ошо исем менән нарыҡланыусы айырым ҡәүемдең барлыҡҡа килеүе халыҡ хәтерендә ошо рәүешле нығынып ҡалған.

Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа үҫәргәндәрҙең туранан-тура ата-бабалары итеп мөйтәндәр атала. Мәҫәлән, "Мөйтән бей хаҡында йыр" тигән фольклор әҫәрендә ошо турала былай әйтелә: "Барса башҡорт мөйтәндәргә буйһондо. Үҫәргәндәр күп һанлы булып китте. Бөрйән, ҡыпсаҡ бейҙәре уларға баш һалды... Йөҙ тамғалы башҡорттар Уралға күсеп килде". Бында мөйтән һәм үҫәргән бәйләнештәре, уларҙың көсәйеүе, барса башҡортҡа баш булыуы мотивы аша Уралда ойошҡан тотош башҡорт берлеге идеяһы ("йөҙ тамғалы башҡорттар") сағылыш тапҡан.

Мөйтән һәм үҫәргән этнонимдары йәнәшәлеге, ошо исемдәге ҡәүемдәрҙең ҡан-ҡәрҙәшлеге үҫәргәндәрҙең шиғри шәжәрәһендә аныҡ һүрәтләнә. Ошо боронғо ҡобайырҙа Мөйтән бейҙең Үҫәргән исемле улы тыуып, артабан исемен үҙ ырыуына ҡалдырыуы хаҡында бәйән ителә: "Әҙәм балалары дәүере үтеп китте, Сыңғыҙ хан заманы етте. Тоҡсаба бей улы башҡорт халҡының бабаһы, Мөйтән уның исеме... Мөйтән улы Үҫәргән, күп һанлы булды уның тоҡомо. Ул саҡта дүрт олоҫ Үҫәргән исемле ине..."

Тикшеренеүсе Л.С. Толстова, фольклор материалдарына, этнонимия һәм топонимия мәғлүмәттәренә таянып, мөйтәндәрҙең Алғы Азия (хуррит-митания) сығышлы булыуы хаҡында фараз итә. Уның хеҙмәттәренә риүәйәттәр томанына сорналған, "тарихи йомаҡ"-ҡа әйләнгән Боронғо Хорезмды күп йылдар дауамында өйрәнгән тарихсы, этнограф һәм археолог С.П. Толстов тикшеренеүҙәре этәргес көс булып тора.

Ысынлап та, ошо боронғо илдең тәү тарихын яҡтыртырҙай яҙма сығанаҡтар юҡҡа иҫәп. Хорезмдың тарих төпкөлөндә бөйөк дәүләт булыуын Амударъя дельтаһында һәм Арал диңгеҙенең элекке ярҙары буйында һибелеп ятҡан күп һанлы археологик ҡомартҡылар ғына дәлилләй бөгөн.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

112-се Башҡорт атлы дивизияһының ойошторолоу шарттары, хәрби хеҙмәткә үҙ теләге йә иһә мобилизация буйынса саҡырылған башҡорт ир-егеттәренең кисерештәре, уй-фекерҙәре хаҡында яҡындан белгән полк комиссары Сәғит Әлибаев үҙенең көндәлегендә байтаҡ мәғлүмәт туплай. Шул хәтирәләрҙә бәғзе башҡорт яугирҙарының исем-шәрифтәре лә телгә алына. Быйыл, Бөйөк Еңеүгә 75 йыл тулыу уңайы менән, ошо милләттәштәребеҙҙең исемдәрен гәзитебеҙ биттәрендә яңынан иҫкә алыу, яу ҡырҙарында ятып ҡалғандар хаҡында хәтер яңыртыу барыбыҙ өсөн дә сауаплы бер эш булыр ине. Шуның өсөн иғтибарыбыҙҙы тағы ла Сәғит Әлибаев көндәлектәренә йүнәлтәйек. Һүҙ 1942 йылдың ҡышҡы һәм яҙғы айҙарындағы хәл-ваҡиғалар хаҡында бара.

**15 февраль.** Бөгөн йәкшәмбе, программа занятиелары юҡ. Көн һалҡын булһа ла, матур ғына. Сағыу ҡояш нурҙары күкшел ҡарҙа йым-йым уйнай.Таһир Кусимов бына нисә көндәр инде полкта саңғы ярышына әҙерлек алып барҙы. Эскадрондар һәм батареяларҙағы саңғысы егеттәр был эшкә сәмләнеп тотондо.

1-се эскадрондан - Ф. Нафиков, Мәжитов, Нәбиев; 2-сенән - Хәләф Шәйхисламов, А. Мәтинов, Ф. Ибраһимов һәм башҡалар; 3-сөнән - Яхъя Ишбулдин, Сәғит Хафизовтар; 4-сенән - М. Шәрипов, А. Солтанов, М. Мөсәләмовтар; пулеметсыларҙан - С. Ғибаҙуллин, М. Хоҙайбирҙин, Фәхретдинов һәм башҡалар килгән. Кроста рядовойҙар ҙа, командирҙар ҙа ҡатнаша. Политруктарҙан Ғилемхан Хәсәнов, Зыя Латипов, И. Чанышев, яңыраҡ ҡына килгән пропаганда инструкторы Хөсәин Хәлирахмановтар бар.

Ярыш бик сәмле үтте. Сослоҡта, етеҙлектә бер кем дә ал бирергә теләмәне, әлбиттә. Бына финишҡа яҡынлай ҙа башланылар. Боҫрап, аһылдашып, әммә көс-ҡеүәт урғылтып, арыҫландай алғырланып, йөрәкһеп килә егеттәр. Беренсе булып майор Таһир Кусимов үҙе килде. Баштан уҡ һәйбәт үрнәк күрһәтә командир! Егеттәрҙең уға ихтирамы тағы артты. Кусимов артынса Нәбиев, сержант Нафиков, Мәжитов, Фәхретдинов, миномет батареяһы егете С. Садиҡов, Яхъя Ишбулдиндар атлығышып килеп етте.

Уларҙы ҡурайсылар Батырғәли Вахитов, Шәйхетдин Ҡорбанов, Ғәйфулла Сарбаев (Баймаҡ театрынан) күңелле көйҙәр уйнап ҡаршыланы.

Ярыш күмәкләп күңел асыуға әйләнеп китте - бейеү, йыр башланды. Өҙә баҫып бейеүселәр байтаҡ ҡына булып сыҡты. Йырҙа ла һынатмайҙар. Хәмит Бикҡолов скрипкала һыҙҙыра (иҫең китер - бармаҡтары нисек өшөмәй), Хәмиҙулла Вәлиев баянда уйнай. Дивизия политбүлеге начальнигы Әхмәт Абдуллин да наян бейеү башҡарҙы. Кәйефе шәп. Кросҡа ҡатнашыусылар аҙаҡ фотоға төштө.

М.М. Шаймоҡатов ярышты баштан уҡ күҙәтеп торҙо, фиништан һуң саңғысыларҙы ҡайнар ҡотланы. "Дөрөҫ эшләйһегеҙ, һуғыш шарттарында беҙгә, аттан төшөп, саңғыға баҫырға ла тура киләсәк", - тине.

Аҙаҡ часть командирҙары, комиссарҙары, служба начальниктары кәңәшмәһендә полковник шундай һөҙөмтә яһаны:

- Беҙгә һәр ваҡытта ла ана шундай үҙаллы эшмәкәрлек кәрәк, - тине ул.

Юғарынан команда көтөп кенә эш итеү һис тә яраған нәмә түгел. Инициатива мотлаҡ кәрәк. Унһыҙ уңышҡа ирешеү юҡ. Етәкселектә, ойоштороу эшендә шаблон, трафарет булырға тейеш түгел. Бына 1-се полктың командиры Кусимов, байтаҡ халҡын саңғы ярышына алып сығып, ҡалай шәп эшләне. Матур башланғыс был. Ә бит уға кросс тураһында бер кем дә әйтмәгәйне. Уставта ла, йәкшәмбе көн мотлаҡ саңғы походы йәки кросс үткәрелһен, уның башында полк командиры барһын, тиелмәгән. Һәр кем эштә бынан өлгө алһын ине...

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

# ҠАН МЕНӘН

## милләтте, телде алыштырып

**Бер-береһен ҡанатландырып, дәртләндереп кенә түгел, ә бер-береһен үҫтереп, ижадына һәм хеҙмәтенә булышлыҡ итеп, бер-береһен һаҡлап һәм ҡәҙерләп йәшәй белгән ғаиләләр, әлбиттә, һоҡландыра. Улар күптәргә үрнәк тә, фәһем алыр тормош күргәҙмәһе лә. Тап бына шундай башҡорт ғаиләһе ғүмер итә Татарстандың Ҡаҙан ҡалаһында. Гәзитебеҙҙең күптәнге дуҫтары - Фирҙәүес һәм Йәҙгәр Бәшировтар улар. Улар инде ярты быуаттан ашыу ирле-ҡатынлы ғына түгел, ижадташтар ҙа, фекерҙәштәр ҙә, көрәштәштәр ҙә. "Беренсе уҡыусым да, кәңәшсем дә, тәнҡитсем дә, мөхәррирем дә, сәркәтибем дә", ти хәләл ефете хаҡында Йәҙгәр Әхәт улы. Һәм әлеге һөйләшеүҙә лә улар бер-береһен бүлдермәй генә, береһе һөйләгәндә икенсеһе яратып ҡына ҡарап ултырып, әңгәмәләште. Һоҡланыу ҙа һәм нисектер ғорурлыҡ тойғоһо ла ҡалдырҙы был оло быуын ғаиләһе.**



**Хөрмәтле ҡунаҡтарыбыҙ, һеҙҙе яҙмышмы, шөғөл-хеҙмәтегеҙме, ситтә йәшәргә мәжбүр иткән, шулай бит? Ситтә башҡорт булып йәшәү нисек ул?**

**Фирҙәүес Бәширова:** Ситтә йәшәү - ул үҙенде һынау. Хатта ҙур урында эшләһәң дә, бик бәхетле булһаң да. Тыуған ерҙә, үҙ халҡың араһында көн итеү - ул бөтөнләй икенсе нәмә. Сит тарафтарҙа йәшәү һәм икенсе милләт вәкиле булараҡ үҙ урыныңды тотоп, үҙ һүҙеңде раҫлап йәшәү - ҙур яуаплылыҡ. Был ҡайҙалыр ситтә уҡып сығыу йәки командировкала булып ҡайтыу ғына түгел. Унда һин ете ят кешеләр араһында йәшәйһең, йәғни көнкүрешең дә, эшең дә, күтәрелгән-ҡолаған саҡтарың да, сәләмәт булған-ауырыған мәлдәрең дә, бәхетле-бәхетһеҙ көндәрең дә һәм башҡа бөтөн донъяуи киҫерештәрең дә ситтәрҙең күҙ алдында. Ә беҙ Йәҙгәр ағайың менән һәр ваҡыт йәмғиәт үҙәгендә булып, яуаплы вазифалар биләгәс, үҙебеҙҙе башҡорт милләтенең бер вәкиле итеп кенә түгел, ә артыбыҙҙа тотош халҡыбыҙ тора һәм уны тейешле кимәлдә күрһәтә белергә тейешбеҙ, тип йәшәнек.

Студент саҡта әле Силәбе ҡалаһында баҙарҙа йөрөйбөҙ, үҙебеҙсә иркен итеп башҡортса һөйләшәбеҙ. Аңғарам, артыбыҙҙан бер апай эйәреп йөрөгән һымаҡ. Беҙ ҡайҙа барабыҙ, ул да шунда, беҙ туҡтаһаҡ, ул да яйлай... Ахырҙа, тегегә төбәлдек. Шунда был апай: "Ҡайһылай матур итеп һөйләшәһегеҙ. Тыңлап йөрөп кинәнәм", - тине уңайһыҙланып. Шул саҡта туған телемдең матурлығын, йомшаҡлығын башҡалар ҙа тойғанына, һоҡланғанына инандым, бындай хәлдәрҙе бөгөнгө көнгә тиклем күҙәтәм. Телдәр белеүҙең кәрәклегенә инанһам да, туған телде белеү мотлаҡ, тип иҫәпләйем, сөнки ул әсәйеңдең теле, халҡыңдың тарихы.

Силәбе дәүләт политехника институтында уҡығанда гәзит сығара инек, мин дә шунда шиғырҙарымды баҫтырам, мәҡәләләр яҙам. Төркөмдәштәрем бер мәл: "Фирҙәүес, башҡорттарҙың һәр береһе тота ла шиғыр яҙа ала тиҙәр, шул дөрөҫмө?" - тип һорайҙар. Мин шул саҡ шиғыр йә таҡмаҡ сығара алған таныштарымды, шиғыр менән һөйләшеп йөрөгән туғандарымды, унан килә үҙебеҙҙең шағирҙарыбыҙҙы иҫләнем дә, ысынлап та, милләттәштәремдең һәр береһе ошондай талантҡа эйә бит тип уйлап, "Эйе, тап шулай!" тип яуапланым. Бына ошо йәш кенә саҡта уҡ ситтәр араһында үҙ милләтемдең исемен һәм намыҫын юғары тоторға бурыслы икәнемде төшөнөп йәшәнем шулай.

**Йәҙгәр Бәширов:** Һеҙ минең тарихымды беләһегеҙ. Беҙҙең ауыл тотошлайы менән "татар" тип яҙылып, шулай тип инанып үҫкән һәм арыуыҡ ғүмер үткәргән кешеләр инек бит инде. Татарстандың КамАЗ заводында генераль директор урынбаҫары булып эшләгән йылдарҙа унда күп өлкәләрҙән һәм шул иҫәптән Башҡортостандан да эркелеп йәштәр эшкә килә ине. Шул саҡта генераль директор башҡорттарҙың барыһын да миңә ебәрә, башҡорттарыңды урынлаштыр, һин бит башҡорт, ти ине. Әлбиттә, яҡташтарымды ҡабул итәм, әммә оло коллегамдың мине ни өсөн "башҡорт" тип атауын аңламайым. Үҙемдең башҡорт икәнемде белмәйем бит әле ул саҡта. Етәксебеҙ бит инде оҙаҡ йылдар ҙур коллективты етәкләгән, әллә күпме милләттәр менән аралашҡан, уларҙы яҡындан белеп-танып өйрәнгән бик аҡыллы кеше. Һәм шул миңә: "Башҡорттар бик ышаныслы һәм сыҙамлы, уларҙа эске көс һәм ҡыйыулыҡ бар", - тип ҡабатлай ҙа "Һин дә шул башҡорт ул", тип ҡуя ине. Аҙаҡ, ысынлап та, шәжәрәмде тикшереп, бөтөн ауыл тарихын асыҡлағас, башҡорттар булып сыҡтыҡ. Бына шулай мин үҙемдең башҡорт икәнемде белмәй йөрөгәндә лә күҙәтеүсән халыҡтар минең милләтемде, милләтемә хас характер һыҙаттарымды, булмышымды танып торғандар. Шуға ла, әгәр һин ниндәйҙер бейеклектәр яулайһың йәки ниндәйҙер даның, исемең сыға, йә булмаһа ҙурыраҡ урын биләйһең икән, һинең кем икәнеңде белергә теләйәсәктәр, тип әйткем килә. Һәм беләсәктәр ҙә! Улар һине "Фәлән Фәләнов" тип түгел, ә йышыраҡ милләтең атамаһы менән йөрөтәсәк.

**Һеҙҙең берегеҙ рәссам, икенсегеҙ шағирә булырға хыялланған. Ике ҡомарлы, илһамлы һәм шауҡымлы йән нисек осрашты икән?**

**Йәҙгәр Бәширов:** Беҙ Фирҙәүес апайың менән осрашҡанда мин әрме хеҙмәтенән ҡайтҡан һалдат кейемендәге егет, ул гимназияның аҡ яғаһын һалып та өлгөрмәгән йәш ҡыҙ бала, беребеҙ рәссам, икенсебеҙ шағирә булырға хыялланған ысынлап та шауҡымлы йәштәр инек. Әммә тормош беҙ ҡорған хыялдарҙан ғына тормай шул. Ижад итергә уйланым да... Силәбе дәүләт политехника институтының автомобилдәр конструкторлау, дизайнлау факультетына уҡырға индем. Рәсем төшөрөп кенә аҡса эшләп булмай икәнде аңлай инем сөнки.

Силәбе өлкәһендә йәшәп ятабыҙ. Фирҙәүес шағирә булғас, беҙгә Рәшит Шәкүр, Сафуан Әлибаев һымаҡ шағирҙар йыш килә торғайны. Мин уларҙы балыҡ тотоп һыйлайым, улар шаулап-гөрләп ултырып һөйләшә, шиғырҙар уҡыйҙар. Һәм миңә: "Йәҙгәр, Фирҙәүесте бындай һәләте менән Башҡортостанға алып ҡайтырға кәрәк", - тиҙәр. Ә үҙем рәсемдәр тураһында уйлай ҙа алмайым хәҙер, ғаиләне ҡарарға кәрәк. Әммә икебеҙҙе лә ижадтан төңөлткө килмәй. Исмаһам, беребеҙ үҙ хыялына тоғро ҡалһын ине, тип уйлап, шағирәне башҡорт мөхитенә, яҙыусылар ойошмаһына яҡынайтыу өсөн, диплом алғас, Бәләбәйҙәге "Автонормаль" автозаводына йүнәлтмә һораным.

Иң башта, әле танышлыҡҡа тиклем, икебеҙ ҙә Ҡаҙағстанда сиҙәмдә эшләгәйнек. Башҡортостанға ҡайтҡас, Фирҙәүес ана шул сиҙәмдә эшләгән халыҡ, уларҙың тормошо, шул ваҡиғалар хаҡында повесть яҙа башлағайны. Ул яҙа, мин тыңлайым, төҙәткеләйем. Шул әҫәрҙе Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһына тикшереүгә алып барҙыҡ. Әҙәби консультант (исемен яҙмайыҡ) Фирҙәүескә бер айҙан килергә ҡушҡан. Барғайны: "Яҙғас, уны Лев Толстой кеүек яҙырға кәрәк", - тип ҡульяҙмаһын ҡулына тоттороп, күңелен төшөрөп ҡайтарҙы... Шиғырҙарын да ҡабул итмәй, баҫмай аптыраттылар. Ул заманда, күрәһең, ойошма тирәһендә бер төркөм тупланған да, башҡаларға юл ябыҡ булғандыр. Хатта бөгөн беҙ белгән билдәле яҙыусы-шағирҙарыбыҙҙың күптәре лә ситкә тибелгәйне ул осорҙа.

Беҙ артабанғы ижадыбыҙ, тормошобоҙ хаҡында күп уйлаштыҡ, кәңәшләштек. "Автонормаль"дә баш инженер дәрәжәһенә лә күтәрелгәйнем, генераль директор, Яр Саллыла көс йыя башлаған "КамАЗ" берләшмәһенә ебәрәбеҙ, тигәс, ҡаршы килмәнек. Бында ла һынатманым. Эшләгәс, торлағын да алдыҡ. Йәйләп "КамАЗ"дың генераль директоры урынбаҫары вазифаһына тиклем күтәрҙеләр. Әммә ниндәй генә дәрәжә биләгәндә лә, көнгә төн ялғанып эштә йөрөгәндә лә, күңелдән рәсем төшөрөү хыялы китмәне. Һәм, ниһайәт, алтмышты үткәс, яңынан картиналар төшөрә башланым.

**Фирҙәүес Бәширова:** Ағайығыҙ "Һин яҙ", тине һәр ваҡыт, хыялыма ҡаршы килмәне. Әммә ҡатын-ҡыҙ тормошо иң беренсе балалар һәм ғаилә, көнкүреш ваҡлыҡтары менән күмелгән була. Шул дәүерҙе үткәрмәйенсә, ҡулдарға ирек тә юҡ. Шулай ҙа, Аллаға шөкөр, бер нисә китап сығарҙым һәм әле лә ул хыялыма тоғромон.

Ул йылдарҙа Яр Саллылағы "Ләйсән" исемле татар әҙәби ойошмаһының иң көслө сағы булғандыр. Мин уның йыйылыш, семинарҙарына, төрлө сараларына йөрөй башланым. Бик йылы ҡабул иттеләр, ә инде 1986-1989 йылдарҙа, Ҡаҙанға күскәнгә тиклем, был ойошманы мин етәкләнем. Ошо 3-4 йыл эсендә генә ҙур залдарҙа М.Кәрим, Р.Сафин, "Ағиҙел" журналдары кисәләрен, Башҡортостандың йәмғеһе егермеләп яҙыусы һәм башлап яҙыусылары менән осрашыуҙар ойоштороҙоҡ.

**Бала сағығыҙ хаҡындағы хәтирәләрҙе уятҡанда улар ҡайһылайыраҡ булыр ине?**

**Фирҙәүес Бәширова:** Атайым һуғыштан яраланып ҡайтҡан яугир булған. Әсәйемә өйләнгән. Ул саҡта ауылда ир-егет юҡ, булғандары ла алтын баһаһында бит инде - атайым улай-былай сыуала башлаған. Әсәйем ғорурлығына барып, миңә йөклө көйөнсә үҙ ауылына ҡайтҡан да киткән, атайым килеп, уны ҡайтарырға ныҡышып йөрөһә лә, яңынан бармаған. Артабан әсәйем икенсе кешегә кейәүгә киткән, ә мин өләсәйем ҡулында тороп ҡалғанмын. Нәфисә өләсәйем мине биш йәшемә тиклем шундай яратып, ҡуйынында ғына йоҡлатып, әкиәттәр һөйләп, артынан эйәртеп кенә йөрөтөп үҫтерҙе, күңелемә иң күркәм изге ғәҙәттәрҙе лә ул һалғандыр. Бөгөн мин балаларыма ла, балаға тәрбиә биш йәшкә тиклем һалына, тием, шул дөрөҫ тә. Ул ваҡытта бит ололар бер-береһенә йөрөшәләр, киске ултырмаға йөрөйҙәр ине, шунда мине һәр береһе тупылдатып һөйә. Бына бит, сабый йөрәген ҡаҡһытмағандар, бөтә ауыл менән яратып йәшәткәндәр.

Өләсәйем вафат булғас, әсәйем мине үҙенең яңы ғаиләһенә алды. Әлбиттә, биш йәшлек бала өсөн был ҙур һынау ҙа, артабанғы сынығыу ҙа булғандыр, әммә өләсәйем һалып өлгөргән изгелек орлоҡтары шытып сыҡҡайны һәм мин йәшәүҙе яратып өлгөргәйнем инде: күңелем ҡатманы, кешеләргә мөнәсәбәтем үҙгәрмәне, ышанысым юғалманы.

Мәктәпте тамамлар алдынан класташтарымды ҡайғыртып йөрөүем хәтеремдә. Утыҙ баланың күбеһе етем, уҡыуҙа өлгәшмәгәндәр ҙә етерлек. Ҡайҙалыр үҙаллы барып, имтихан тапшырып йөрөр хәлдәре лә, мөмкинлектәре лә юҡ. Тоттом да Стәрлетамаҡ педагогия институты ректорына "Беҙҙең интернатҡа килеп, төрлө

*Бына бит ҡалай: ҡан менән һалынғанды милләтте, телде алыштырып ҡына юйып булмай. Шунлыҡтан, әлеге көндә башҡорт ҡурайына, йырҙарына һәм башҡа рухи ҡиммәттәренә ҡыҙыҡһынғандарҙың да тамыры башҡорттор ҙа, улар ҙа минең кеүек аҙаша-аҙаша үҙ тамырҙарына килеү юлдарын эҙләйҙәрҙер, тип уйлайым. Башҡаса булыуы мөмкин түгел. Ни өсөн төптө юҡҡа бер милләт вәкиле икенсе милләттең ниməһенәләр оронһон, ти! Быны бары тик ҡан хәтере уяныуы менән генә аңлатырға була. Шуны аңдары менән дә тойоп, шәжәрәләренә күҙ һалһындар ине кешеләр.*

**✓ *Ирҙең ғорурлығын ая. Ҡатын-ҡыҙға аҡыл шуның өсөн дә бирелгән. Булдыҡлы ирҙең иғтибарын ҡатын-ҡыҙҙың юҡ-бар ваҡлығына, кер-иҙән бысрағына йәлеп итмә, киреһенсә, бөйөгрәк һәм бейегерәккә этәр.***

# ҺАЛЫНҒАНДЫ...

## ҡына юйып булмай

ауылдарҙан йыйылған балаларҙан имтихан алығыҙсы, уларҙың күптәренең атайҙары юҡ, аҡсалары юҡ", тип хат яҙып ебәрҙем. Бер заман институттың ректоры беҙҙең мәктәп-интернат директоры менән бәйләнешкә ингән. Ғабдрахман Ғәбит улы мине кабинетына саҡырта. "Ни эшләп улай баш-баштаҡландың?" - тип асыулана. Мин уға хәлде аңлатып бирҙем. "Улайһа, әйҙә, үҙең йый ун биш баланы, имтихан алырға киләләр", - тип сығарып ебәрҙе. Ике кластан Стәрлетамаҡ пединститутының рус теле һәм әҙәбиәте факультетына балалар йыйҙым, ун икегә тултырҙым быларҙы. Сығарылыш имтихандарының икенсе көнөндә үк бер профессор килеп төшмәһенме! Ун ике баланың ун берен уҡыуға ҡабул итеп ҡайтып китте. Шатлығыбыҙҙы белһәгеҙ! Барыһы ла уҡып сығып, мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында хеҙмәт иттеләр. Бына шундай тиктормаҫ, үткер, тынғыһыҙ бала булдым мин.

**Йәҙгәр Бәширов:** Беҙҙең атай һуғышта ятып ҡалып, әсәйебеҙ өс малайҙы бер үҙе күтәрҙе. Атайыбыҙ 1942 йылдың февралендә һуғышҡа алынған да, апрелендә һәләк тә булған. Ә мин шул йылдың июлендә тыуғанмын. Атай менән күрешмәгәнбеҙ ҙә булып сыға. Өлкән ағайым һанғырау-телһеҙ ине. Һөйләшмәһә лә, математика, техника яғынан башлы булды. Икенсе ағайымды әсәйҙең ҡустыһы тәрбиәгә алып үҫтерҙе. Мине шул һөйләшмәгән ағайым ҡарай, әсәй колхоз эшендә. Өсөнсө класҡа барғанымда әсәйҙең әлеге ҡустыһы Ибраһим ағайыбыҙ өлкән ағайымды МТС-ҡа эшкә урынлаштырҙы. Ул шулайтып яңғыҙ апаһының улдарын кеше итешергә тырышты. Әскәт ағайым телһеҙ булһа ла башлы ине, тигәйнем бит, яҡшы эшләгәне өсөн уға шунда бүлмә бирҙеләр һәм беҙ әсәйем менән уның янына ҙур урыҫ ауылына күсеп барҙыҡ, әсәй МТС-та иҙән йыуа башланы. Мин бөтөнләй русса белмәйем, шунлыҡтан, өсөнсө класҡа барырға тейеш булһам да, ҡабаттан беренсегә рус класына ултырып уҡый башланым. Бәләкәй ауылдан килгән мосолман балаһын һыйҙырмайҙар, русса аңлаша алмайым, шулай ҙа һуғышам, бирешмәү өсөн физик күнегеүҙәр яһайым, торабара спортҡа ылығып киттем. Шулай итеп, мин бәләкәйҙән сит халыҡтар араһында сынығыу алдым. Был бирешмәүсәнлек, еңмешлек миңә киләсәк юлдарымда, йәшәйешемдә ярҙам итте лә инде.

**Сит халыҡтар араһында сынығыу алдым, тиһегеҙ. Һеҙ бала сакта, йәш сакта милли аңлашылмаусылыҡтар бик үк тойолмағандыр бит?**

**Фирҙәүес Бәширова:** Совет заманында милләтселеккә юл ҡуйылманы, һәр хәлдә, беҙ бар милләттәрҙе лә хөрмәт итергә һәм яратырға тейешбеҙ, тигән лозунг аҫтында үҫтек. Ә шулай ҙа рус телен белмәгәндәрҙе ҡыйырһытыу ул саҡта ла булды, әле лә бар икәнен танымай булмай. Унан һуң, ғаиләләрҙә лә, сит милләттән кәләш алма, кейәүгә барма, тигән йола һаҡлана, тыйыуҙар бар ине. Һәр хәлдә, башҡа милләттән булған кейәүҙәр, кәләштәр араһындағы айырманы шәйләй инек. Ә шулай ҙа тап шул осорҙарҙа ҡатнаш ғаиләләр барлыҡҡа килә башланы. Хәҙер генә быға иғтибар итмәйҙәр, ә ул заманда барыбер был күренешкә ситенерәк мөнәсәбәт ине. Йәҙгәр ағайына тормошҡа сыҡҡас, миңә лә күптәр "һатлыҡ йән" тип ҡараны. Әммә ул саҡта мин буласаҡ иремдә сит милләт сифаттарын тоймағанмын да, аңғарған булһам, уға ылыҡмаҫ та инем, бәлки. Бына бит, күңелде алдап булмай: үҙ башҡортомдо барыбер танығанмын!

**Йәҙгәр Бәширов:** Йәш ваҡытта ҡыҙҙар егеттәрҙе, егеттәр ҡыҙҙарҙы күҙләй. Был тәбиғи хәл. Икенсе милләт вәкилдәре менән уҡығас һәм эшләгәс, мин һәр ваҡыт үҙебеҙҙекеләр менән айырманың ер менән күк араһы булыуын аңғара инем. Башҡорт ҡыҙҙары барыбер үҙенә йәлеп итә ине.

Бала сағымдан башҡорт моңона ғашиҡ инем. Әле бәләкәй генә көйө йылға буйлап сығып китәм, отоп алған башҡорт йырҙарын ҡысҡырып йырлайым, уларҙағы "һ", "ҙ" хәрефтәрененең әйтелеше бигерәк тә оҡшай. Бына бит ҡалай: ҡан менән һалынғанды милләтте, телде алыштырып ҡына юйып булмай. Шунлыҡтан, әлеге көндә башҡорт ҡурайына, йырҙарына һәм башҡа рухи ҡиммәттәренә ҡыҙыҡһынғандарҙың да тамыры башҡорттор ҙа, улар ҙа минең кеүек аҙаша-аҙаша үҙ тамырҙарына килеү юлдарын эҙләйҙәрҙер, тип уйлайым. Башҡаса булыуы мөмкин түгел. Ни өсөн төптө юҡҡа бер милләт вәкиле икенсе милләттең нимәһенәләр ороһон, ти! Быны бары тик ҡан хәтере уяныуы менән генә аңлатырға була. Шуны аңдары менән дә тойоп, шәжәрәләренә күҙ һалһындар ине кешеләр.

Үҙемдең асылымды асыу ҙа бит уйламағанда килеп сыҡты. Ауылдаштарым ауыл тарихын өйрәнеп яҙып биреүҙе үтенде. Тотондом шул эшкә. Ырымбур яғынан килгән халыҡ, тип теркәлгән архивта. Тикшерә башлағайным - башҡорттар! Ярты быуат татар булып йәшәгәндән һуң ҡапыл ғына башҡорт булып китеп булмай бит инде, ауылдаштарым да шаҡ ҡатты. Күптәр ышанманы. Үҙем дә ҡаңғырҙым һәм атай-әсәйемдең тамырын айырым өйрәндем, юҡ, уларҙың икеһенең дә ата-бабаһы башҡорттар булып сыҡты. 1750 йылда Минзәләнән килгәндәр башҡорттар. Ул заманда Миңзәлә яҡтарының башҡорт төйәге булғанын беләбеҙ бит инде хәҙер. Аҙаҡ ул төбәк башҡорттарының татарға әйләнеүе бары сәйәси һәм иҡтисади сәбәптәрҙән барлыҡҡа килгәнен дә беләбеҙ. Хәҙерге көндә минең туғандарымдың күбеһе башҡортлоҡтарын ҡабул итә алды, күпмеһелер ҡабул итмәне әле. Улар һаман "Һине ҡатының башҡортлоҡҡа күндергән" ти ҙә ҡуя. Юҡ, Фирҙәүес тарафынан бер ваҡытта ла бындай баҫым булманы. Мин унда бары башҡорт ҡатындарының тоғролоғон, ғаиләнән бирелгәнлеген, ирҙе күтәрә, хөрмәт итә белеүен, мәрхәмәтлеген, сабырлығын ғына күрҙем. Һәм был асышты ла мин үҙем яһаным.

**Сит тарафта йәшәгәс, һеҙгә милләтте матур яҡтан күҙәләндереп кенә түгел, милләт өсөн көрәшеп тә йәшәргә тура килгәндер?**

**Йәҙгәр Бәширов:** Минең "Сквозь толщу времён", "Новый взгляд на историю народов Поволжья и Урала", "Бөйөк Башҡортостан", "Башҡортхан", "Ҡол Ғәли" китаптарын ентекле уҡып сыҡһағыҙ йәки башҡорт тарихын өйрәнһәгеҙ, һеҙ башҡорттоң бер тарихи ваҡиғала ла агрессив булмағанын, ә кәңәшләшеү, килешеү, һөйләшеү юлы менән оло эштәр башҡара килеүен күрәһегеҙ. Ул борон-боронан уҡ башҡа халыҡтарға килешеү менән бара белгән һәм уларҙы ла үҙ еренә килешеү менән һыйындырған. Бер илгә лә баҫҡынсы булып, яулап алыу, буйһондороу маҡсаты менән юлланмаған. Беҙҙең бөтөн яуҙар ҙа һаҡланыу сараһы. Һин беҙгә теймәһән, беҙ яугир булмаҫбыҙ. Һин беҙгә теймәһән, милләтсе лә, көрәшсе булмабыҙ. Әммә беҙҙе яугир булырға ла, көрәшсе булырға ла мәжбүр иткәндәр, итәләр. Ана шулай көрәшә алғанға ла беҙ бар, ә әллә ниндәй күплектәге, муллыҡтағы халыҡтар юғалған. Яуабым бер: милләт өсөн көрәшеү мотлаҡ.

Шул уҡ ваҡытта башҡаларҙы хөрмәт итергә һәм һанларға ла кәрәк. Бына мин КамАЗ производствоһында күп милләттәр менән етәкселек иттем, тип әйттем бит инде, шул саҡта кешегә кешелекле булып ҡына уларҙың хөрмәтен яулау мөмкин булыуын аңланым. 130 меңлек эшсеһе булған заводҡа килеп инәм, ҡырҡ минут ваҡыт бүлеп, цехтар аша үтеп, халыҡтың хәлен белеп, күҙҙәренә ҡарап, ҡулдарын ҡыҫып йөрөп сығыуҙың зарурлығын аңлайым. Йәштәрҙең арҡаһынан ҡағып, ололарын үрнәк итеп ҡуйып, ҡатын-ҡыҙын аяп ҡына әҙәм күңеленә үтеп була. Ниндәй милләт вәкиле булһа ла уларға әҙәмсә мөнәсәбәт кәрәк. Көрәшеп йөрөп кенә юғары булып булмай, иң беренсе үҙең хөрмәт күрһәтә бел, унан һин үҙеңдекен яулай, һаҡлай алырһың.

**Фирҙәүес Бәширова:** Ошо урында өҫтәп, беҙҙең самимилыҡ, йәғни, артыҡ сабыйҙарса бер ҡатлы, ышаныусан булыуыбыҙ тураһында тағы бер тапҡыр иҫкәртер инем халҡыбыҙҙы. Башҡорт халҡы үтә лә ябай һәм эскерһеҙ бит ул. Был фекеремде яҡлап бәхәсләшә алам. Ғүмер буйы ситтә һәм сит халыҡтар араһында йәшәгән осорҙарҙы күҙәтеүҙәрем бирә миңә бындай дәлилде. Башҡа берәүҙә лә беҙҙең кеүек кешегә төпһеҙ ышаныу, икенсене фәрештә тип уйлау юҡ. Ана шул ышаныусанлығыбыҙ арҡаһында күпме билдәле шәхестәребеҙ бәләгә тарыған һәм әле лә тарый тора. Үҙебеҙ ҙә әле, ағайың менән, ураған һайын алданып торабыҙ, һаман һабаҡ алған юҡ. Дә-әә, былар беҙҙе ярыҡ ялғашҡа ултыртты бит, тип ултырып көлөп алабыҙ хатта. Бына ошо милләтебеҙгә хас бер ҡатлылыҡ менән дә һаҡ булһын ине йәштәр. Бигерәк тә милли мәнфәғәттәр һағында йөрөүселәр.

Милләт өсөн көрәшеп йәшәргә кәрәк, әлбиттә. Мин халҡыбыҙ тыуҙырған рухи байлыҡтарҙың сағыулығына, батырҙарыбыҙҙың маһирлығына, йәш быуындың, бәләкәстәрҙең талантлығына һоҡланам, һөйөнәм. Беҙҙең халҡыбыҙ, Уралыбыҙ - кешелектең хәтер һандығы, рухи шишмәһе, Ер йөҙөндәге бер ожмах баҡсаһы. Ошо халыҡҡа нисек оҙон, бәхетле, иждадлы ғүмер теләмәйһең дә, нисек уның мәнфәғәттәре өсөн ҡулдан килгәнсә көрәшмәйһең. 1998 йылдан бирле, арыуыҡ ҡатмарлы йылдар дауамында,Татарстан башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, "Башҡорт йорто" етәксеһе вазифаларын башҡарғанда халҡым мәнфәғәтендә эшләгән эштәрем бөгөн дә көс, дәрт бирә. Халҡына булған һөйөү, ҡайҙа йәшәүеңә ҡарамаҫтан, уға хеҙмәтең менән баһаланалыр.

**Бая һанап киткән китаптарығыҙ, ғөмүмән, фекерҙәрегеҙ, асыштарығыҙ менән бик ҡыйыуһығыҙ һеҙ, Йәҙгәр ағай. Ғүмер буйы етәкселектә эшләһәгеҙ ҙә, үҙ урынығыҙ өсөн ҡурҡып, һағайып, һүҙ-фекер һайлап ҡына йәшәп өйрәнмәгәнһегеҙ. Был характермы, әллә принциптармы?**

**Йәҙгәр Бәширов:** Мин производство өлкәһендә, төрлө милләттәр араһында хеҙмәт иткән, үҫкән кеше, тип әйттем инде. Башҡорт донъяһында үҙ башҡорттарым менән баҫтырышып йөрөп өйрәнмәгәнмен. Ситтәр араһында йә батыр булырға ла һанланырға, хәлеңдән килмәгәндә, шымып ҡалырға кәрәк. Мине лә күп тапҡырҙар ҡолатырға, тапарға ынтылғандар булды. Был осраҡтарҙа бары тик эшеңде ныҡлы белеп-башҡарып, бөтә нәмәгә яуаплы ҡарап һәм рухи яҡтан да, физик яҡтан да көслө булыу ғына ҡотҡара. Миңә ата-бабамдан яугир ҡаны күскән һәм шул ҡан еңелергә бирмәй ҙә.

Китаптарым буйынса ла нимәләр әйтергә уҡталған, бәхәсләшергә теләктәре булғандар бар, әммә улар миңә ҡара-ҡаршы тороп һүҙ өндәшмәй. Был ризаһыҙлығыңды белдерә алмау, баҙнатһыҙлыҡ ул. Бындай кешеләр менән икеләтә ҡурҡынысыраҡ. Ундайҙар һине кәрәк урында яҡламаясаҡ, өндәшмәҫ ризалыҡ менән дөмбәҫләтәсәк кенә. Мин һүҙемде әйтә һәм шул һүҙ өсөн урынында уҡ яуап та бирә торған ерҙә хеҙмәт иттем һәм ошоларҙың барыһы ла характерыма ла йоғонто яһаны.

**Ике ижад кешеһенең шулай оҙаҡ йылдар гармонияла ғүмер итеүенең һәм бер-береһенә булған хистәрен йылы, матур, тулы килеш һаҡлай алыуының сере бармы?**

**Йәҙгәр Бәширов:** Ир менән ҡатын дөйөм "кеше" атамаһында булһалар ҙа, улар икеһе ике донъя, ике планета. Уларҙы сағыштырырға ла, икеһенә бер үк талаптар ҡуйырға ла ярамай. Ирҙәргә ҡатындар менән көс һынашыу килешмәй. Ҡатындар - улар ҡатындар, улар хисле лә, йомшаҡ та, ҡайтымһаҡ та. Шул уҡ ваҡытта уларҙа шундайын эске көс һәм ҡөҙрәт бар. Уның теләктәренә һәм булмышына хөрмәт менән ҡарау кәрәк. Ышаныһын, өмөттәрен аҡларға, рәнйетмәҫкә кәрәк, һәм шул принцип менән йәшәнем дә. Һиңә балалар тапҡан, уларҙы тәрбиәләгән, күҙеңә ҡарап аңлап һәм хәленән килгәнсә ярҙам итергә тырышып торған аҡыллы, аңлы, әхлаҡлы ҡатын менән ниңә бәхетле булмаҫҡа? Аллаһ Тәғәлә иргә ҡатынды шуның өсөн биргән. Бары ҡәҙерен белергә генә кәрәк.

**Фирҙәүес Бәширова:** Ир кешегә үҙ аллы булырға форсат биреү зарур. Ул яңылышһа ла, икенсерәк фекер йөрөтһә лә, һиненсә эшләмәһә лә, юлына ҡаршы сыҡмаҫҡа, аяғына һарылып, эшен туҡтатмаҫҡа, ҡамасауламаҫҡа, баҫмаҫҡа кәрәк. Ул көрәшсе, яугир, ул ғаиләне һаҡлаусы һәм уның мәнфәғәтен ҡайғыртыусы. Уға шул яугирлығын үҫтерергә генә булышлыҡ ит. Ирҙең ғорурлығын ая. Ҡатын-ҡыҙға аҡыл шуның өсөн дә бирелгән. Булдыҡлы ирҙең иғтибарын ҡатын-ҡыҙҙың юҡ-бар ваҡлығына, кер-иҙән бысрағына йәлеп итмә, киреһенсә, бөйөгрәк һәм бейегерәккә этәр. Ҙурҙы бәләкәйҙән айырыу зарур. Ул сағында үҙең дә уның ҡурсыуында һәм хәстәрендә генә көн күрерһең. Тормош бит, төрлө саҡтар булды, була тора. Беҙ холоҡ-фиғелебеҙ менән икебеҙ ике төрлө, әммә донъяға, тормошҡа уртаҡ ҡарашлыбыҙ. Кешелек донъяһында төп урынды биләп торған ғаиләнең бәхет нигеҙе - ул ир һәм ҡатындың бер-беренә булған хөрмәте, изгелеге икәненә инанабыҙ. Бына шулай, боронғоса ҡарашлы, ололар аҡылына, бер-беребеҙгә таянып йәшәргә тырышҡан ғаилә инде беҙ. Аллаға шөкөр!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ир һәм ҡатын -**
**бер сығыҡтың ике башы,**
**Был бөтөнлөк -**
**ғаиләнең нигеҙ ташы!**
**Был бөтөнлөк -**
**кешелектең нигеҙ ташы! -**
**тигән ҡанатлы һүҙҙәр менән тамамланы һөйләшеүҙе Фирҙәүес апай.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
*әңгәмә ҡорҙо.*

***✓ Әкиәтсе менән ҡиссасыны донъя мәшәҡәттәре баҫа барҙы. Әминә бала аҡылы менән булһа ла, замананың да, улар йәшәгән тормоштоң да матур итеп һөйләнгән тылсымлы әкиәттәрҙән, ай-һай, алыҫ икәнен нығыраҡ аңлай ине.***

# ЯҘМЫШ ҠИССАҺЫ

*Таңһылыу ҠАРАСУРИНА*



*"Әйтсе, бурыл,*
*ә һуң йәшәр өсөн*
*Ҡайһы һуҡмаҡ менән*
*баралар?"*
*(Ғ. Сәләм).*

- Ят инде. Һүндер шәмде. Башым ауырта башланы кәрәсин еҫенә. Ҡуй шул китабыңды...

Әсәһененең ошо һүҙҙәренән һуң да уҡый әле атаһы ҡалын китабын. Эсвит бар ҙа ул, тик уны сәғәт ун икелә завут һүндерә. Таңғы алтыла өс тапҡыр гудок бирә лә тағы яндыра. Эсвит һүнгәс, атаһы өрләктәге шәмде тоҡандыра. Аҫмалы шәмдең эшләпәһенә, яҡтыраҡ булһын, типтер инде, сәй ҡурғаштары йәбештерә. Урындыҡҡа тороп ала ла шәм яҡтыһында ла уҡый әле китабын.

- Тора бир әле. Үҙем һүндерәм хәҙер. Ял ит. Таң менән урманыңа китергә лә баһа.

Шунан һуң ғына атай бите араһына шырпы бөртөгөн билдә итеп һала ла китабын кәштә башына һөйәй. Ҡолаҡ артына ҡыҫтырып ҡуйған папиросын ала ла тышҡа сығып китә.

Ул сығып киткәс, әсәһе урын-ерҙе рәтләштерә, яҫтығын ҡабарта. Әминә быны күрмәһә лә ишетеп ята. Атай менән әсәй шаршау эсендә йоҡлайҙар. Көндөҙ шаршауҙы әсәһе тарта ла урҙаға ҡалҡытып элә. Ҡыҙҙары өй уйнайбыҙ, тиһәләр, төшөрөп бирә. Эре сәскәле көрән ҡыҙыл ҙур шаршау ҡыштарын үҙе бер донъя! Күршеләрендәге Жеүәржәттәргә (Жеүәржәттең Зөбәржәт икәнен уҡырға барғас саҡ белде Әминә.) барып өй уйнайым, тиһәләр, уларҙың шаршауҙары ла юҡ. Жеүәржәттең атаһы менән әсәһе яңы өйҙәрендәге төпкө бүлмәлә тимер карауатта йоҡлайҙар икән. Урта ишектәрен ябып ҡуялар, ти. Жеүәржәттәргә әкиәт һөйләмәйҙәр микән ни, тип гел аптырай Әминә...

Атаһы тыштан инеп, шәмде һүндерә лә урындыҡ ситенә ултырып сисенә. Нәскиҙәрен мейес ҡашағаһына һала. Аҡ мейес яҡтыһына, тәҙрәнән төшкән ҡар яҡтыһына атаһы бәһлеүән булып күренә Әминәгә. Бәһлеүән булмаһа, урындыҡ таҡталары шығырлап китер инеме ул ятҡанда?

Атаһы шаршау эсенә инеп ятһа, гел әсәһен дөпөлдәтеп һөйә. Әминәләрҙе лә, урмандан ҡайтҡас, арҡаларынан дөпөлдәтеп һөйөп ала атай. Тик әсәйҙе ул сәпсим башҡаса итеп һөйә. Әминәнең хатта шаршауҙың ситен генә ҡалҡытып ҡарағыһы килеп китә. Ярамай шуу-ул. Их, атай менән әсәйҙең уртаһына төшөп ятҡанда-аа... Әсәһененең:

- Әбей менән бабай
Ғыр-ғыр йоҡлай,
Уртаһында бер бәпәй
Һикереп төшөп уйнай, - тигән әкиәтендәге кеүек...

Оҙон урындыҡтың был яғында дүрт бала ята теҙелешеп. Ике малай, ике ҡыҙ. Ә әсәһе бишенсегә ауыр аяҡлы икән. Көндөҙ Хәжирә инәй менән сәй эскәйнеләр, шунда инәйҙәре әсәһенә ҡарап:

- Тағы ауыр аяҡлыһың икән. Етәр инде, килен, - тигәйне.

- Етәр, тип, ҡайҙа итәйем мин уны. Булһын, үҙем яңғыҙ үҫтем, - ти ҙә ҡуя бит.

- Ирҙәргә ни... Үҙең әҙерәк хитрит ит һуң.

- Белмәйем мин хитрит-митрит тигән нәмәне.

Уларҙың был хәбәренең бер ниһен дә аңламай Әминә.

Әсәһе хитрит итә белмәгәнгә аяғы ауыр булып киткән микән? Юғиһә, Әминәнең йоҡламай ятҡанын белеп, атаһы үҙҙәренең эргәһенә саҡырып ала ине. Хәҙер әсәһе ятҡырмай урталарына.

- Былай ҙа урын етмәй. Тулай, йоҡо бирмәй, - ти башлаған ниңәлер. - Ятһын тегеләре менән. Ҡашҡаһы бар мәллә ошононлоң?

- Бар. Кеше сыға минең был ҡыҙымдан.

- Атай... Ә әкиәт?

Әсәһе ишетеп ҡалмаһын, тип атаһына ғына шыбырҙай Әминә. Шаршау аҫтынан башын ғына сығарып, атаһы бышылдай:

- Тағы йоҡтамай ятаһыңмы, ташый? Әсәң һөйҙәмәнеме ни?

- Эәэй... Һин һөйҙә.

Әсәһененең әкиәттәрен дә, йомаҡтарын да Әминә ятлап бөткән инде. Тегеләр әсәй әкиәтенә күптән хыр-хыр, ә Әминә атаһын көтә. Атаһының да әкиәттәре "Борон-борон заманда әбей менән бабай йәшәгән, ти", - тип башлана. Тик гел генә: "Уларҙың бер генә бөртөк малайҙары булған, ти. Ул малайға Бербөртөк тип исем ҡушҡандар, ти", - тип дауам итә.

Атаһының әкиәттәрендә әллә ниндәй ят һүҙҙәр бар, шул һүҙҙәр әсир итә Әминәне.

- Ҡайһы ерҙә ҡалдыҡ әле, ҡыҙым?

- Ырудник тигән ерҙә, атай.

- Әәә, эйе. Бабай бер көндө әбейен эйәртеп, тауға сығып киткән. Барғандар-барғандар ҙа бер төптән сыҡҡан дүрт ҡайын эргәһенә туҡтағандар. Бабай шул ергә тәрәәән итеп соҡор ҡаҙған да, ти, ҡуйынындағы ат башындай алтынын күмгән, ти. Әбейенә әйткән, ти: "Ошо ерҙе онотма, - тигән, ти. - Бербөртөк ҙурайһа, ошонда алып килеп күрһәтерһең. Икегеҙ байығып китерһегеҙ ат башындай алтынға, тигән, ти..."

- Атай, тапҡанмы Бербөртөк шул ерҙе?

- Юҡ. Бабай үлеп киткән, ә әбей күрһәтмәгән. Тау эйәһе аңдып тик йөрөгән, ти, сөнки.

- Дейеүме?

- Эйе.

Әсәй һөйләгән әкиәттәрҙә әбей үлә лә, бабай икенсе әбей ала. Үгәй әсә бабайҙың балаларына көн күрһәтмәй. Ә бында бабай үлеп китһә лә, әбейе икенсе бабай алмай. Шуныһы бигерәк оҡшай Әминәгә.

-Бербөртөк ай үҫәһен көн үҫеп, егет ҡорона тулғанда, батша бер фарман сығарған. Уның сапҡынсылары ауыл һайын йөрөп, шул фарманды таратҡандар, ти. "Кемдең ниндәй һөнәре бар, шул - шул ерҙәге майҙанға йыйылырға! Үҙ һөнәрен күрһәтергә тейеш!" - тигәндәр, ти...

Атаһының бышылдап ҡына һөйләүе Әминәне ойота. Ни тиклем тырышмаһын, йоҡо уны баҫа. Әсәһененең:

- Ята бирегеҙ әле. Шыбырҙашҡан булып. Етәр һеҙгә, - тигәнен ул инде ишетмәй. Әкиәт төшөндә дауам итә. Әминә әлеге майҙанға үҙе бара. Бербөртөктөң һөнәрен үҙ күҙҙәре менән күрә, сәпәкәй итә, шарҡылдап көлә, шатлыҡ йәштәрен һөртә. Ә Бербөртөк майҙан уртаһында бейей, ти! Бөтә кеше таң ҡалған, ти, сөнки былай бейеүҙе бер кемдең дә күргәне булмаған, ти...

Әминәләр йоҡонан тороуға атай өйҙә булмай. Тик ҡыҙыҡайҙың иҫендә:

"Батша илселәре Бербөртөктө аяҡтарын ергә лә тейгеҙмәй батшаның ансамбил тигән һарайына алып киткәндәр..." Шуға ла:

- Ҡайһы ерҙә туҡтаныҡ әле, ҡыҙым? - тигән һорауға, Әминәнең яуабы әҙер:

- Ансамбил тигән ерҙә, атай. Фәйзи Ғәскәров тигән батшаның ансамбил тигән бейеүселәре араһында Бербөртөктөң дә бейегәнен әсәһе әйткәйне инде. Әкиәт дауам итә. Аҙағы юҡ атаһының мажаралы, мауыҡтырғыс әкиәттәренең. Көн һайын уҡ һөйләй ҙә алмай ул, һағындырып, көттөрөп кенә һөйләй.

- Атай, был әкиәт түгел дә инде... Әкиәт улай булмай ҙа инде, - тип аптырап китә ҡайсаҡ Әминә.

- Әкиәт түгел шул. Был ҡисса, ҡыҙым, тормош ҡиссаһы. Бер малай тураһында.

- Әә. Әсәй һөйҙәгән Йософ ҡиссаһы һымаҡмы?

- Шулайыраҡ.

* * *

Бәләкәй генә сағынан, иҫ белә башлағандан хыялый ҡыҙыҡай аҡ ҡыштар сафлығын тойоп, ҡышҡы төндәр сихырында бәүелеп, әкиәт-ҡиссалар тылсымына арбалып үҫте. Ҡыштар ғына хәтеренә уйылып инеп ятҡан ниңәлер. Яҙҙар-көҙҙәрҙә донъя мәшәҡәттәре күберәк булғандыр, күрәһең. Ҡыҫҡа төнлө йәйҙәрҙә атай менән әсәйгә йоҡо туйғансы йоҡлау былай ҙа теймәгәндер. Ә ҡыштар... Их, ул бала саҡтағы ҡыштары! Әсәһе лә ҡышҡы төндәрҙе яратты. Ҡиссаларҙы ул да тыңлай ине. Атай менән бергә тышҡа сыға ла: "Һүрәткә һалырға ине был төндө", - тип инә. Йә: "Ай һыуҙай яҡты", - ти. Бисмилләһын әйтеп, тәҙрә яҡтауына бысаҡ һөйәй ҙә ҡорғанын ярты лаш аса. Их, ул саҡтағы ҡышҡы төндәр...

...Әминәләр ҙурая барған һайын, әсәйҙең ауыр аяҡлы саҡтары йышайған һайын, әкиәттәрҙе һирәгерәк һөйләй башланылар. Әкиәтсе менән ҡиссасыны донъя мәшәҡәттәре баҫа барҙы. Әминә бала аҡылы менән булһа ла, замананың да, улар йәшәгән тормоштоң да матур итеп һөйләнгән тылсымлы әкиәттәрҙән, ай-һай, алыҫ икәнен нығыраҡ аңлай ине. Мәктәп китаптарындағы өй эсе лә, ашамлыҡтар ҙа, өҫбаштар ҙа, шат, көләс йөҙлө балалар ҙа Әминәләрҙең дә, ауыл кешеләренең дә йәшәүенән бик ныҡ айырыла икән. "Шоңҡар булып осоҡ урмандағы бөтә һуҡмаҡ, бөтә аранан", - тип ҡабатларға яратҡан атаһы ла ерҙән йөрөй икән. Ябығып та киткән үҙе. Өйҙә лә ниндәйҙер ауыр шом тоя Әминә. Етмәһә, Хәжирә инәһененең ҡайһы саҡтарҙа һығылып илаған әсәһен йыуатып:

- Нимә булды ул һеҙгә? Күсеп килгән саҡта ҡандай кешеләр инегеҙ. Әллә тел-теш баҫтымы икән? - тип аптырауы Әминәне хафаға һала.

- Бар яраштыра, юҡ талаштыра шул, - тигәндәрен дә аңлап етмәй. Юҡ сағы күберәк була башланы атайҙың ошо ҡиссаһынан һуң: "...Бербөртөктө бер иблес бисә үҙенең урынына һатыусы итеп ҡуйған. Һин гырамытный, донъя күргән, яу үткән егетһең, тип маҡтап-хуплап, албырғатҡан. Бер айҙан Эрвезийә тигән кеше килеп, Бербөртөктөң елкәһенә растрат тигән нәмәне сығарып һалған. Бөтә халыҡ шаулашҡан, тик бер нисек тә ярҙам итә алмағандар. Бербөртөктө зинданға бикләргә теләгәндәр, тик халыҡ ирек бирмәгән, сөнки ғәйеп теге бисәлә булған, ти..."

Ололарҙан ишеткәндәрен Әминә хәҙер үҙе Бербөртөк ҡиссаһы, тип кистән-кис бәләкәстәргә һөйләй. Әсәһененең:

- Әҙәм ыстрамы бит! Дасаты ни тора, ғәрҙеге! - тигән һүҙҙәрен аңламағас, ҡиссаға ҡушмай.

Юҡ талаштыра икән шул. Талашып та алалар ине. Тик бер-береһенә ғәйеп ташламанылар. Ҡиссалағы "растрат" өсөн тормошта оҙаҡ түләнде атаһы. Тотоп алып ҡалынғандан һуң өйгә күпме генә аҡса менән ҡайтҡандыр ул, әсәһененең, ҡалайтабыҙ инде, тип көйәләнгәне әле лә хәтерендә.

- Алты бала, һигеҙ ауыҙ бит, нимә еткермәк кәрәк...

Атаһының йыш ҡабатлай башлаған:

- Әйтсе, бурыл, ә һуң йәшәр өсөн

Ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар? - тигәнен бер кис көтөп кенә торғандыр әсәһе:

- Тубырсыҡтың аҡсаһы шәп, тиҙәр бит... - тине.

Урман ҡырҡҡан арала тубырсыҡ йыйып тапшырған аҡсаға 70 килолыҡ бер тоҡ он, сәй-шәкәр, һабын-тоҙ алған көн матур байрам булып күңеленә уйылып ҡалды Әминәнең.

Икенсе йылдың ҡышҡы каникулында ла Әминә менән ағаһы ике тоҡ ҡарағай тубырсығы йыйып, ун һигеҙ һум аҡса эшләнеләр. Уба-туба нәмә алдылар. Әсәһененең ҡыуаныуҙарыы-ы.

- Беҙ ҙә ошолайтып байығып китербеҙ әле, ивит, әсәй?

- Инде бирешмәҫбеҙ Алла бойорһа, бәпәйҙәрем эшкинеп килә бит. Мин дә йөрөр инем дә, мынау өйҙәге йәнле тубырсыҡтарҙы ҡайҙа итәһең...

Эштән бушаған арала атаһы тыранса ярып "осора" (Рәжәп ағай шулай тине) башланы ялан яғына. Ялан яғынан ем килә ине тоҡ менән. Тауыҡ - ҡаҙға ла тамаҡ кәрәк бит. Тырансаның "осҡанын" күрә алмаһа ла, атаһының тыранса ярғанын ҡарап торорға ярата Әминә.

Сухәләк ҡарағай бүрәнәгә балта осо менән тәүҙә юл һалып сыға атаһы. Шунан шына ҡатып сыға. Шунан балта осо менән шаҡара-шаҡара китә бүрәнә буйлап. Ул алып ташлаған шыналарҙы Әминә бер урынға өйә. Ә йоҡа ғына тырансалар шытыыыр-шыты-ыр

итеп бүрәнә олононан айырыла бара, айырыла бара...Үҙе бер ҡисса инде! Бындай һүрәт мәктәп китаптарында юҡ. Сайыр еҫтәре сығарып, дыңғылдап торған йоҡа ғына таҡталарҙың һүрәтен атаһынан башҡа кем эшләй алһын? Йырып барып сыҡтылар атаһының елкәһенә сығарылған растрат тигән һынауҙы. Еңел тын алып ҡалдылар. Атайҙың һыны турайҙы, әсәйҙең йөҙө алһыуланды. Шулай ҙа күмәккә күп кәрәк шул...

Атаһы бер көндө: "Әйтсе, бурыл..." - тип һүҙ башлап та өлгөрмәне, әсәһе:

- Ҡулың эш белмәгән кеше кеүек, аптыранып ултырмасәле, - тине.

Шунан китте атаһының эштән бушаған саҡтарында башҡарған тағы бер кәсебе. Аҡлыкәртишкәләрҙәге кешеләрҙе матур-матур кейемдәр кейҙереп, үҙҙәрен йәшәртеп, һылыулап, кәртинкә итә ине атаһы. Йоҡа одеялдарҙы шау сәскәле "ковер"ҙарға әйләндерҙе, тәбиғәтте төшөрҙө. Клубтарға әллә күпме картиналар эшләне. "Худыжник" тигән сәйер исем таҡтылар атаһына. Тик Әминәләрҙең үҙҙәрендә генә бер нәмә лә булманы.

- Ҡайҙан алдым, ҡайҙа ҡуйайым, тигән генә кыраскыларынды үҙебеҙгә әрәм итмә инде. Эшләрһең әле байыҡҡандың иртәгеһенә, - ти торғайны әсәһе.

Ленинград тигән бер ҡалала худыжниктар уҡый торған ер бар икән. Атаһы шуның әҙрисен гәзиттән күреп ҡалып, һүрәттәр эшләп ебәргән. Атаһын эй саҡырҙылар шунда, эй ебәрҙеләр саҡырыу ҡағыҙҙарын, эй ебәрҙеләр. Асып уҡый алманы атаһы ҡиссаһының был биттәрен.

* * *

Әскелтем генә еҫле һыҡмалы буяуҙарҙың исемдәрен уҡый ҙа башҡортсаһын һорай Әминә. Бында ла ҡыҙыҡай атаһының эргәһендә.

- Атай, аквамарин ниндәй төҫ була ул? Ә ультрамарин? Лазурь нисек була? Аҡ кыраскыңа ништәп белила тип яҙғандар?

Атаһы яуап бирмәй. Ауыҙы буш түгел. Ул һүрәттәрен шиғыр һөйләй-һөйләй төшөрә. Буяуҙарын баш бармағына элеп, аҫтынан дүрт бармағына ултыртып тотҡан фанир таҡтаһына һығып һалғанда ла, бутай-бутай картинаһына һөрткәндә лә, ситкәрәк китеп, ҡарап торғанында ла һөйләй. Оҙон шиғырҙар пайыма тип атала икән, пайыманы ятҡа һөйләй.

- Урман.
Урмандарҙа ҡараҡ йөрөй.
Урман.
Урмандарҙа бысаҡ бар.
Бер үҙе генәме?
Әхмәт унда
Бер һыҙғырһа, дүрт-биш дуҫ таба...

Атаһын тыңларға ярата Әминә. Пайымалағы Әхмәт ҡараҡ тас уның атаһы һымаҡ һылыуҙыр, көслөләр, батырҙыр. Исеме лә атаһыныҡы һымаҡ бит хатта. Дыуамаллығы ла барҙыр. Аптыранып киткән саҡтары, үкенгән мәлдәре лә. Әминәгә атаһы был ергә серле ҡиссаларҙан ебәрелгән, шонҡар тигән ҡош булып осоп йөрөгән-йөрөгән дә ергә килеп төшкәндер һымаҡ тойола. Уның атаһы ошо урам, хатта ошо ауыл ирҙәренән бер башҡа ҡалҡыуыраҡ, йөрөгән юлы бер ярға бейегерәк, ҡылған эштәре өҫтөнөрәк кеүек. Уның әхирәттәренең береһенең дә атаһы ут сәсрәтеп биемәй, ҡурай уйнамай, гармунда һыҙҙырмай, һүрәт төшөрмәй, шиғыр һөйләмәй, урыҫсаны һыу кеүек эсмәй, урыҫса ҡалын-ҡалын китап уҡымай! Какуй урыҫса, башҡортса китапты тотоп та ҡарамай күбеһе. Яуҙа йөрөп ҡайтҡандары ла һирәк. Юҡ, уларҙың атайҙары ла шәп, тик Әминәнең генә атаһы хыяллы, ҡанатлы.

- Шауҡымлы, - ти торғайны әсәһе.

Башҡаларҙан бер башҡа ҡалҡыуыраҡ булғанғалыр, күрәһең, заманаһының хәмер зәхмәте нығыраҡ ҡағылды шикелле атаһына. Был зәхмәт зиндан ише генә түгел ине. Атаһына ҡыбырлай алмаҫлыҡ итеп бығау һалды. Ғорур башын эйҙерҙе, теҙ сүктерҙе, күҙҙәрен бәйләне, аңын томаланы. "Аҡ шоңҡарҙар булып османыҡмы бөтә һуҡмаҡ, бөтә аранан? " - тип һөйләй башлаһа ғына, телен көрмәлдерҙе. Бер кем дә, бер нәмә лә кәрәкмәй ине атаһына. Донъянан ваз кистерҙе хәмер зәхмәте.

Аҙағынан ауырый ине оҙаҡ итеп. Түшен түшәп йөҙтүбән ята ла, ашамай-эсмәй, һөйләшмәй, ыңрашмай тик ята көндәр буйы.

- Ятаһың инде мына йәнеңде ҡыйнап... Кешене үҙ ғүмерендә өс хәтәре аңдып торор, ти. Һуғышты әйтмәйем, ул ил өҫтөнә килгән афәт. Унан тере ҡайтыуың үҙе бәхет. Ә Фрунзела йәшәгәндә? Беҙҙе ҡотҡарам, тип утта ҡалып, тере сыҡтың. Унда бер үлемдән ҡалдың. Ә Инйәрҙә һуң? Сплавта йөрөгәндә, һалығыҙ таралып һыу аҫтында, һал аҫтында ҡалып та балалар бәхетенә имен ҡалдың. Ә был хәтәрең башыңа сығыр инде...

Әсәһе тороп китһә, Әминә тубыҡланып ултырып ала атаһының эргәһенә:

- Атай, һин дөрөҫ йәшәмәйһең. Улайтып йәшәйме кеше? "Ҡайһы ҡара йылан саҡты һине, Әминәм, Әминәм", - тип йырҙама бүтән, белдеңме? Тантый-тантый йырҙап ҡайтып килә ята бит әле. Дасаты ни тора, ғәрҙеге! Һин былай ғына кеше түгел бит, атай! Һин... һин аҡ шоңҡарһың бит, атай! Эсмә, атай. Үләһең бит улайтһаң. Эсһәң дә белеп эс... Йәме, атай...

Ҡыҙыҡай атаһының сәстәрен һыйпай. Атаһы һиҙелер - һиҙелмәҫ кенә баш ҡаға...

...Йөҙтүбән ятҡан атаһы эргәһендә тубыҡланып ултырған бәләкәй ҡыҙ төшөрөлгән картина иң сағыу, юйылмай торған буяуҙар менән эшләнгәндер - уңмай ҙа, онотолмай ҙа. Әминәнең күңеленең иң түрендә эленеп тора ул.

Ә Атай менән Әсәй икеһе лә Әкиәт илендә хәҙер. Етәкләшеп кенә шау сәскәле йәпйәшел туғайҙа гел бергә генә йөрөйҙәр, ти. Күргәндәр, күреүселәр бар...

ИР-ЕГЕТҺҮҘЕ

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘҒА КҮҘ ТЕЙҘЕРМӘЙЕК!

✓ *Һинең менән һоҡланған яҡын туғаныңдың да күҙе тейеүе мөмкин. Әлбиттә, тормошта йыш ҡына һоҡланырға, берәй кешене маҡтарға ла тура килә. Шундай осраҡтарҙа Бәйғәмбәребеҙ быға Аллаһ бәрәкәте һорарға ҡушҡан.*

**Бынан ун биш-егерме йылдар элек район үҙәгенән тыуған ауылыма автобус менән ҡайтырға тура килгәйне. Бер нисә ауылдашым менән күрешеп алдым, артабан, тирә-яҡ тәбиғәтебеҙҙе күҙәтә-күҙәтә киләм, пассажирҙарҙың һөйләшкәненә лә ҡолаҡ һалам.**



Өс бабайҙың әңгәмәләшкәненә иғтибар иттем. Икәүһе - минең танышым, ә береһе - күрше ауылдан икән. Бер-береһен электән беләләр, буғай. Түштәрендәге төрлө дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы ордендары уларҙың өсөһөнөң дә һуғыш ветераны икәнен күрһәтә (улар хәҙер мәрхүм инде). Ҡарттарҙың береһе - яҡын-тирәлә һүҙгә йор, мәрәкәсел булып танылған минең ауылдашым - Аҡбирҙе исемле ағай, алмаш-тилмәш теге ике бабайға һорау биргеләй. Ҡоҙа тейеш булған берәүһенең ҡарсығы бер нисә йыл элек мәрхүм булып ҡалғайны. Шуның менән һөйләшә башланы был:

- Һин, Фәлән ҡоҙа, әле ҡабаттан әбей алырға уйламайһыңмы?

- Уйлағаным юҡ, - тип яуаплай бабай.

- Нишләп? - тип төпләшә әлеге ағай, мут йылмайып.

Ҡоҙа кеше лә юғалып ҡалғандарҙан түгел:

- Әле йәшем етмәгән, һикһән биште генә ҡыуам бит!.. - тип яуаплай. Быларҙы тыңлап барған кешеләр сыр-сыу булып көлөшә. Теге Аҡбирҙе ағай хәҙер инде күрше Ишмырҙа ауылына китеп барған кешегә һөжүмгә күсә:

- Ә һинең әбейең бар ҙа баһа, нишләп уны үҙең менән бергә алып йөрөмәй, яңғыҙ ғына китеп бараһың? Яҡшы түгел!

- Кеше араһына алып сыҡһам, күҙ тейҙерерҙәр тип ҡурҡам, - тип яуаплай был ҡарт. Автобуста барған пассажирҙар тағы көлөшә. Улар менән бергә көлөшкән Аҡбирҙе ағай тегегә ахырҙа:

- Һуң, күҙ тейә тип ни... Күҙ тейерҙәй ере ҡалмағандыр инде уның хәҙер!.. - тигәс, барыбыҙ ҙа ауылға еткәнсе көлөштөк.

Ифрат етди темаға ҡағылышлы мәҡәләмде бына ошо мәрәкә менән башлап ебәреүемә бына шул "күҙ тейеү" тигән төшөнсә сәбәпсе булды әле. Ҡасандыр беҙ йәшерәк саҡта уны юҡбар йә иһә боронғо әбей-бабайҙарҙың уйлап сығарған әкиәте тип аңыбыҙға һеңдергәндәр ине. Илебеҙҙә атеизм тигән нәмә хөкөм һөргән дәүерҙә. Алла ла юҡ, ендәр-шайтандар ҙа бер ҡасан да булмаған, тигән инаныу менән үҫте бит беҙҙең быуын. Шул осорҙа үҫкән кешеләрҙең күптәре, айырыуса диндә өйрәнмәгәндәре, әле булһа шундайыраҡ яҙыҡ фекерҙә. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм мосолмандарҙы ошо хаҡта ла иҫкәртә килгән. Минең өммәтемдәге кешеләрҙең күпселеге күҙ тейеү арҡаһында һәләк була, тигән мәғәнәләге хәҙис тә бар. Һәр төрлө сирҙәрҙең күп кенәләре ана шул күҙ тейеү сәбәпле икәнен дә белмәйбеҙ. Ҡайһы берәүҙәр тик насар кешенең генә күҙе тейә, тип уйлай. Улай түгел икән шул. Кемдер берәүҙең матурлығына һоҡланған яҡшы кешенең дә күҙе тейеүе мөмкин. Матур үҫешкән мускулатуралы, мыҡты кәүҙәле бер сәхәбәнең ярты биленә ҡәҙәре сисенгәнен күргән икенсеһе, уға һоҡланыуын йәшерә алмай, был хаҡта әйтә башлағас, Бәйғәмбәребеҙ: "Һин уға күҙ тейҙерҙең. Ашығыс ҡына ғөсөл ал һәм ана шул һыу менән һинең күҙең тейгән кеше йыуынһын (ғөсөл ҡойонһон)!" - тип әйткән сахих хәҙис тә бар. Һинең менән һоҡланған яҡын туғаныңдың да (хатта ата-әсәңдең дә!) күҙе тейеүе мөмкин. Әлбиттә, тормошта йыш ҡына һоҡланырға, берәй кешене маҡтарға ла тура килә. Шундай осраҡтарҙа Бәйғәмбәребеҙ быға Аллаһ бәрәкәте һорарға ҡушҡан. Берәүҙең яҡшы эше йә иһә матурлығы хаҡында маҡтау, хуплау һүҙе әйткәс тә, артынса: "Аллаһүммә, бәрик фи һи" (Йә Аллаһ, ошоға бәрәкәт бир), тиергә, йә иһә "БәрәкАллаһу фи кә (ҡыҙ кешегә - "фи ки")" тиеп әйтеп ҡуйыу кәрәк. Һиңә Аллаһ бәрәкәте булһын, тигәнде аңлата был доға.

Әйткәндәй, ендәрҙең дә күҙе тейеүе мөмкин. Кискеһен, йоҡлар алдынан сисенгәндә "Бисмилләһ" әйтеү мотлаҡ. "Аят әл Күрси" аятын уҡыу ҙа кәрәк (стенаға элеп ҡуйыу түгел). Ул саҡта таңға ҡәҙәре кешегә шайтан яҡынлай алмай. Тәндәренең матурлыҡтарын ҡаплап йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ана шундай-бындай зарарлы тышҡы "агенттарҙан" һаҡлаулы ла була.

Гәзитебеҙҙең 6-сы һанында Миләүшә Ҡаһарманованың "Матурлыҡ туйҙа кәрәк" тигән ифрат та ҡыҙыҡлы мәҡәләһе баҫылғайны. Һуңғы осорҙар модаға инеп киткән һәр төрлө "Һылыуҡай" конкурстары хаҡында ине ул. Бер яҡтан ғына ҡарағанда һис зыянһыҙ тойолған бындай сараларҙың бер нисә кире яғын да һанап киткән автор ошо мәҡәләһендә. Ундай бәйгеләрҙә ҡатнашып еңә алмаған ҡыҙҙарҙы "утҡа осҡан күбәләк" менән дә сағыштырған. Ә еңеүселәрендә башҡалар алдында маһайыу тойғоһо уяныу ихтималлығы хаҡында ла иҫкәрткән. Миләүшәнең фекерҙәрен дә хуплайым. Әммә иң беренсе нәүбәттә ошондай ҡыҙҙарға әлеге күҙ тейеү ҡурҡынысы янауы тураһында иҫкәртеүҙе лә үҙемдең бурысым тип һанайым.

Мәҡәләм башында иҫкә алып киткән ауылдашым Аҡбирҙе ағай мәрхүм әйтмешләй, һикһән биш - туҡһан тирәһендәге ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тышҡы матурлығына ҡарап һоҡланыусылар әллә ни күп булмауы ла мөмкин. Әммә әле генә тормош юлын башлаған, тулышып бешкән еләк һымаҡ матур ҡыҙҙарыбыҙҙың бөтә халыҡ алдында барлыҡ гүзәллектәрен күрһәтергә тырышыуы - уларҙың файҙаһына түгел, тимәксемен. Бер генә кеше лә түгел, ә меңәрләгән күҙҙәр ҡарап һоҡлана бит уларға! Милләттәштәрем бына ошо ифрат та етди нәмәне белһә ине, һәм үҙҙәренә-үҙҙәре зыян килтермәһендәр ине, тигән теләгем бар. Ә инде быға ышанмағандарҙы бер нисек тә "шундай матур сараларҙан" баш тарттырып булмай инде. "Үҙе йығылған - иламаҫ", тиҙәр беҙҙең яҡта.

Минең, әлбиттә, ҡыҙҙарым юҡ, кемдер әйтмешләй - "туплы малайҙар". Әммә, ейәнсәрҙәрем үҫеп килә, әлхәмдүлилләһ. Улар хаҡында кемдер берәү (хатта үҙебеҙ ҙә!) яҡшы һүҙ әйткән һайын әле үрҙә килтерелгән доғаларҙы уҡып ҡына торам, үҙҙәренә лә өйрәтәм. Малайҙарға ла күҙ тейеүе мөмкин. Бәхеткә, барлыҡ булған матурлыҡтарын көслө заттарыбыҙ әллә ни күрһәтеп йөрөмәй. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙан айырмалы, ир-аттың "күҙ тейер" ерҙәре лә күпкә әҙерәк. Шунлыҡтан, был тарафтан ир-егеттәребеҙ сағыштырмаса һаҡлаулыраҡ. Әммә сәскәләй матур ҡыҙҙарыбыҙҙы нығыраҡ ҡыҙғанам. Быуаттар буйы Ислам динендә булған боронғо өләсәйҙәребеҙ ғүмерҙә лә ҡыланмаған нәмә менән булышып, уларҙың башҡаларға оҡшарға тырышыуҙары, үҙҙәренә-үҙҙәре ғәҙелһеҙлек ҡылыуҙары - йәл, йәмәғәт.

**Хөрмәтулла ҠЫУАНДЫҠОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ХӘБӘРҘӘН...

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Баҡтиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Бындай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән.

■ Сардиния утрауы - Италияның автономлы өлкәһендә йәшәүселәр йөҙ йәште үтеүселәре күп булыуы менән рекорд ҡуя. Фән әлегә быны сәбәбен асыҡлай алмай. Шулай ҙа күптән түгел Британияның биотехнологик компанияларының береһе Сардинияның көнсығышында урынлашҡан тарихи район Ольястра халҡын тикшереп ҡарарға булған. Унда оҙон ғүмерлеләр иҫәбе бөтөн донъя менән сағыштырғанда биш тапҡырға күберәк икән. Ғалимдар ғүмер оҙайлығына генетик факторҙарҙың һәм тирә-яҡ мөхиттең тәьҫирен өйрәнмәксе. Элегерәк бында көн күргән халыҡтың башлыса йәшелсә, емешеләк һәм балыҡтан торған файҙалы аҙыҡтүлек менән туҡланыуы уларҙы оҙон ғүмерле итә, тип иҫәпләйҙәр ине. Был продукттар файҙалы матдәләргә бай, уларҙа май күп түгел. Әммә быға ышанып булмай, ти белгестәр, сөнки был диета күп илдәрҙә популяр, тик улар оҙон ғүмер менән маҡтана алмай.

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы үҫмерҙәргә D витамины ҡабул итеү файҙалы түгел, был йөрәк сәләмәтлегенә һиңғай йогонто ла яһамай, диабет хәүефен дә түбәнәйтмәй. Етмәнә, был холестерин артыуына килтереүе лә бар, ти эндокринологтар. Өҫтәмә рәүештә D витамины ҡабул итеүсе балаларҙы 10 йыл тикшергәндән һуң, ғалимдар был үҫмерҙәрҙең тән массаһында, тән массаһының индексында, ҡан баҫымында йәки ҡан әйләнешендә бер үҙгәрештәр ҙә күҙәтелмәгәнлеген асыҡлаған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе билдәләүенсә, был D витамины дифициты һәм балаларҙың хроник сирҙәре араһында бәйләнеш булмауы тураһында һөйләмәй. "D витамины ҡабул итеү кәрәкмәй, тип тә әйтмәйбеҙ, һимеҙ балаларҙың ҡайһы берҙәре был витаминға ҡытлыҡ кисерә. Беҙ бары тик D витамины ҡабул иткәндән үҫмерҙәрҙең дөйөм сәләмәтлеге яҡшырыуы тураһында дәлилдәр юҡлығын ғына белдерәбеҙ", - ти ғалимдар.

■ Гүзәл затҡа бәйле бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметик фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

МАТУР ХӘТИРӘ

# ӨЛӘСӘЙЕМ



**Ҡыршт-ҡыршт, ҡыршт… Урам буйлап ҡар шығырлатып икәү бара. Береһе оло ғына әбей, икенсеһе туптай кейенгән бала. Бала кеше юлдан туптай тәгәрләй, олоһо ныҡлы баҫып яйлап бара. Өләсәйем һәм мин ул.**

Белмәйһегеҙ беҙ шулай ҡарҙы шығырлата баҫып ҡайҙа китеп барғанды. Ҡар шығырлай инде. Аяҡтарыбыҙҙа сыуаштар баҫҡан быймалар. Улар үҙ эшен белә шул. Йыл да Эткөсөк-Яңауыл ауылына буш өйгә килеп ятып, тирә-яҡтағыларға быйма баҫып бирәләр. Өләсәйем миңә ҡараһын да, ағын да баҫтырып ҡуя. Эсенә тетелгән йөн дә һалалар. Эсенә аяҡ тыҡһаң, аяҡ йөҙөп киткәндәй була. Китәһең йылынып. Өләсәйем, һарыҡ йөнөнә ҡояш йылыһы һеңгән, тигән була. Дөрөҫтәр, ул һөйләһә, гел дөрөҫтә генә һөйләй.

Бына шундай шәп быймаларыбыҙ менән шығырлата баҫып урам буйлап китеп барабыҙ. Мине өләсәйем ҡалын итеп кейендергән. Бәлтә өҫтөнән дебет шәлде арҡа аша арҡыры бәйләгән. Йызлап күҙем генә күренеп тора. Ә үҙе башына дебет шәл өҫтөнән шаҡмаҡ ҡалын шәлен дә һалып алды. Миңә лә шулайтмаҡсы ине. Сырылдап ҡысҡырып, ҡалын шәл һалдыртманым. Улай тын алғыһыҙ булып китә.

Өләсәйем, алға ныҡ китмә, тип тыйып-тыйып бара. Ҡапҡа төптәренән бәйһеҙ эттәр килеп сыҡмаһын, ти. Мин һикертә баҫып барам. Берҙе һикерәм, икене атлайым. Өләсәйем етәкләмәксе итә. Етәкләтмәгән булам. Мин хәҙер ҙур инде. Биш йәшемде ошо ҡыш тултырҙым бит. Ҙурайып бөткәс, етәкләтеп йөрөмәйһең инде...

Ҡарҙы шығырлата баҫып һаман барабыҙ. Ҡайҙа тиһегеҙме? Ҡу-наҡ-ҡа!

Өләсәйемдең әхирәт-әбейҙәренә ҡунаҡҡа китеп барыуыбыҙ. Улар шулай ҡыш етһә, бер кинәнеп саҡырышып алалар. Өләсәйем үҙе лә саҡыра.

Тик улар быны ҡунаҡҡа кил тип түгел, ә сәйгә кил тип саҡыра. Шулай итеп сәйгә китеп барыуыбыҙ.

Мин ҡайһы өйгә барыуыбыҙҙы беләм. Эткөсөктә йөрөй торғас, вис таныш бөткәнмен шул. Тик ҡапҡа төбөнә килеп етеү менән бар ҡыйыулығым һыпырып алғандай юҡ була. Бында инде өләсәйемдең үҙем етәкләп алам.

Ишек төбөндә быймаларыбыҙҙы селек һепертке менән һепергәс, өйгә инәбеҙ. Өйгә инеү менән танауға тәмле аш еҫе бәрелә. Тик ул мине артыҡ ҡыҙыҡһындырмай. Инеүем менән ҡаш аҫтынан ғына әбейҙәрҙе барлай башлайым. Араларында теге мин яратмаған ике әбей бармы икән, тип тикшерәм. Ни өсөн яратмайыммы? Хәҙер белерһегеҙ.

Өләсәйем минең бәлтәмде систереп элгәс тә, әбейҙәрҙең һәр береһе минең сибек кенә арҡамды дөпөлдәтеп, көсләп ҡулдары менән яратып алды. Саҡ торҙом. Һәр береһе яратһын әле! Өҫтөмдәге ситса ғына күлдәгемде маҡтап алдылар. Күлдәгем ысынлап та матурмы икән, тип, үҙем дә уны тағы бер ҡат күҙҙән үткәрҙем. Матурҙыр инде. Шул хәтлем кеше әйткәс.

Шул саҡ теге ике әбей кем уҙарҙан минең янға килеп, "Алып ҡайтып китәм, миңә лә шундай матур ҡыҙыҡай кәрәк", тип әйтә лә башланы. Ысынлап та алып ҡайтып китәләр тип ышанам бит инде, "Мин өләсәйемдеке, үҙегеҙгә ҡыҙ иметь итегеҙ", тип ҡаршы төшәм. Әбейҙәр ҡапыл шым булалар, шунан тотоналар геүләшеп көлөшөргә. Бот сабып аптырашалар минең һүҙҙәремә. Тик өләсәйем генә аңламай, йә әбейҙәргә, йә миңә ҡарай. Ишетмәй шул ны-ы-ыҡ итеп ҡысҡырмаһаң.

Өҫтәл артына ултырышалар. Мин әҙәп һаҡлап урындыҡта ултырам. Хужабикә әбей өләсәйем эргәһенә ултырғыс ҡуйып, мине ултыртырға итә. Мин өләсәйемә теҡләйем. Ул риза булһа, ултырам, булмаһа, юҡ инде. Башҡа әбейҙәр ҙә, ултырһын шул, тиешкәс, күнәм инде.

Өҫтәл тулы һый. Күпереп бешкән икмәк, кипкән өрөк, йөҙөм, эре итеп бешерелгән картуф менән ит... Өләсәйем миңә тигән ашҡа ҡорот, борос һалып бирә. Алдыма йомшаҡ ҡына икмәк телеме һала. Иткә, картуфҡа ымлай. Мин, юҡ, тип баш һелкәм. Кипкән емештәрҙән дә баш тартам. Өләсәйемдең өйөндә улар күп ул. Ә бына ашты яратам. Ҡунаҡ ашы бит ул. Ҡалағымдың осона эләктереп, аштағы йоҡа ғына һалманы телемә һалам. Һәм тәмлелектән күҙҙәрем йомолоп китә. Һалма ауыҙым эсендә иреп кенә юғала. Икенсе ҡалаҡ ауыҙыма яҡынлай. Шулай йәлап ҡына һалманы ашап бөтәм. Иң аҙаҡ ҡоротло-боросло һурпаны һемереп ҡуям.

Әбейҙәр үҙ хәбәрҙәренә төшөп китеп, яйлап ҡына ризыҡланалар. Ҡапыл ҡыҙыҡлы хәбәрҙәре килеп сыҡһа, өләсәйемә лә ҡысҡырып һөйләп алалар. Өләсәйем ишетәме-юҡмы, йылмайып ҡына ҡуя.

Мин өҫтәл артында оҙаҡ ултырмайым. Сәй эсергә тип саҡырғансы урынымдан тороп китәм. Тәҙрә төбөнә килеп баҫам да урамға ҡарап тора башлайым. Тышта ап-аҡ ҡар, кәртәләүҙә ҡаплап киткән инде. Күрше өйҙәр яртылаш ҡына күренә. Юл ситтәрендә лә ҡар бейек булып өйөлгән. Урамдан кем үткәне лә күренмәй.

"Ҡыҙым, әйҙә, сәй эсеп ал", тигәстәр кире урыныма килеп ултырам. Өҫтәлгә тәмле бәлеш, бауырһаҡ, ҡош теләре өҫтәлгән икән. Былдай ҡунаҡтарҙа бәлештәр йә үткәрелгән кипкән ер елогенән, йә кипкән алманан, йә баландан була торғайны. Был юлы ла шулай булып сыҡты. Мин үҙем яратҡан балан бәлешен һорап алып, бер сынаяҡ сәй эсәм. Шунан тәҙрә төбөнә кире килеп баҫам. Мин ҡунаҡҡа йөрөһәм, хатта тәртиплегә әйләнеп китә инем ул шулай.

Яйлап әбейҙәр өйҙәренә таралышырға булып китәләр. Хужабикә әбей, күстәнәс алығыҙ, ти. Әбейҙәр, ҡуй, ашап туйҙыҡ, тағы ниндәй күстәнәс ул, тигән булалар. Хужабикә ҡыҫташа. Шунда инде әбейҙәр кеҫәләренән ҡулъяулыҡтарын сығарып, күстәнәс һала башлайҙар. Өләсәйем балан бәлеше генә һалып ала. Минең өсөн инде. Кейенеп, тыштан тағы ла шәлемде арҡыры бәйләп, ҡайтырға сығабыҙ. Ҡайтҡанда инде мин тыныс ҡына ҡайтам. Һикергеләмәйем.

...Аяҡ аҫтында ҡар шығыр- шығыр, ҡыршт-ҡыршт... Нисәмә йылдар үткән, ә минең һаман аяҡ аҫтында ҡар шығырлаһа, ҡунаҡҡа барғым килә башлай. Быйма кейеп, ҡырштҡыршт тауыш сығарып. Йоҡа һалманы тел осона һалып ҡына, балан бәлешен ауыҙҙа иретеп кенә ашарға.

Үҙең бешер ҙә аша, йәки, ҡунаҡҡа саҡырмайҙармы әллә, тип һорамағыҙ. Үҙем бешереп тә, саҡырылып та торам. Тик бала саҡтағы тәм икенсе ине шул. Яулыҡтарын яҙып бәйләгән, үҙемә алып ҡайтам тип шаяртҡан әбейҙәрҙең табыны икенсе ине...

**Фирүзә ХӘСӘЙЕНОВА-ӘБДРӘХИМОВА.**
**Күгәрсен районы.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ҒҮМЕРЛЕК ҮКЕНЕС

Асия еңгәм менән ир-кенләп ултырып сәй эсәбеҙ. Күптән күрешмәгәс, яңылыҡтар ҙа күбәйеп киткән икән шул. Бер хәбәргә икенсеһе ялғана: бала-сағаларҙың уҡыуы, эштәге хәлдәр, донъя мәшәҡәттәре... Шул саҡ телефоным йырлап ебәрҙе. Экранды йәһәт кенә ҡарап алам да, еңгәмдең һүҙен бүлдергем килмәйенсә, уны ситкә һалып ҡуям.

- Бикәс, кем шылтырата? Нинә алмайһың?

- Эй, Рима апайым. Уның менән һөйләшеү өсөн кәмендә бер сәғәт ваҡыт кәрәк. Оҙон тәбәрәккә төшә лә китә ул. Ҡайтҡас ләпелдәшербеҙ әле, - тием аҡланғандай.

- Алыр инең телефоныңды, бикәс. Бәлки, берәй мөһим йомошо булғандыр апайыңдың? Икенселәй улайтма, йәме? - тип еңелсә генә шелтәләй еңгәм.

- Юҡтыр, йомош төшкәндән түгел инде. Көн дә шылтыратып, үҙенең хәл-әхүәлен һөйләп, беҙҙекен һорашмаһа, апайымдың күңеле булмай ул, - тием рыя ғына.

- Ҡуй, улай тимә, бикәс. Рима ситтә бер үҙе бит, һағынып та китәлер инде. Ярай, һинең ҡырҙа булһа ла, апайың бар, бында ағайың йәшәй. Һәләк бәхетле кеше һин. Бына минең күҙ төбәп барыр туғаным да юҡ хәҙер, япа-яңғыҙ торҙом да ҡалдым.

Былтыр уның берҙән-бер һеңлеһе үлеп ҡалғанын белгәнгә, тиҙерәк еңгәмдең хәленә керергә ашығам:

- Ах, янғыҙ түгелһеңсе, еңгә! Ағайым, бала-сағалярың, бына беҙ бар бит.

- Шулайын шулай ҙа, тик бер ҡарында ятып, бер әсә һөтөн имеп үҫкән ҡан туғаныңа берәү ҙә етмәй икән шул. Шул тиклем һағынам һеңлемде... - Еңгәм моңһоу күҙҙәре менән минә бер һирпелеп ҡарап алды ла, шул арала һығылып сыға һалған йәшен күрһәтмәҫ өсөн ҡараштарын тәҙрәгә күсерҙе. Байтаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырғас, ауыр итеп көрһөнөп лә тағы һүҙ башланы. - Бикәс, тыңла, бер үкенесем тураһында һөйләйем әле һиңә. Ғүмерем буйы йөрәгемде һыҙлатыр ҙа торор инде ул. Үлеренән бер көн алда Айсиләм шылтыратҡайны. Әмин ул ваҡытта баҡсала ҡаңғыра инем. Йыл һайын суғым ғына булып емеш бирген ҡарағаттарыма ҡорт төшкән дә, көйәләнә-көйәләнә шуларҙы ағыулап маташҡан ваҡытта ҡайҙан телефондан һөйләшеү ҡайғыһы булһын. "Ошо Айсилә булһа, мәлһеҙ шылтырата ла ултыра! Ауылда йәшәмәгәс, йәйҙең бер көнө йылды туйҙыра, тигән нәмәне уйлап та бирмәй инде!" - тип, эстән генә һуҡранып, әрләп тә алдым әле һеңлемде. Кискелек ҡайтарып шылтыратырмын, тип уйланым да, алманым. Ә ауылда, беләһең бит инде, кистең үҙ мәшәҡәттәре. Айсилә тураһында бөтөнләй онотҡанмын. Иртәнсәк, һыйырҙарҙы һауып бөткәс, ағайыңды көтөү артынан ебәрә һалайым тип өйгә инһәм, ул телефонын тотҡан да бер нөктәгә ҡарап ҡатҡан. "Һаман йоҡондан уяна алмай, иҫең китеп торһаң бында!" - тип тегене әрләйем бит әле, етмәһә. Балдыҙының үлем хәбәрен ишетеп шаңҡыған булған икән Айрат.

Һин дә мин йәшәп яткан, һаулығына бер ҡасан да зарланмаған Айсиләбеҙ, ана шулай, инсульттан үйламағанда ғына китте лә барҙы. Ғүмеренең ҡыҫҡа ғына булырын белгән кеүек, кешеләргә, бигерәк тә туғандарына шул тиклем иғтибарлы, ихтирамлы булғандыр инде һеңлем. Байрам етһә, ҡустәнәстәрен тейәп, килә һалып төшөрҙәр ине. Көн һайын шылтыратып, хәл белешергә лә онотманы. Мин генә ул, туң йөрәк, һеңлемдең ҡәҙерен белмәгәнмен. Шылтыратһа, эш күплеккә һылтанып, телефонды йәһәтләп һалыу яғын ҡараным. Ҡунаҡҡа саҡырһалар ҙа, йөҙ сәбәп табып, тороп ҡалыр инек. Ярай үҙе ихлас булды, бер ҡасан да үпкәләп ултырманы, ауыл кешеһенең эше күп инде, тип, хәлемә инә белде. Ана шул һуңғы шылтыратыуын иҫләйем дә, йөрәгем әрней хәҙер. Нинә генә яуап бирмәнем икән, тием. Нимәләр генә әйтергә теләне икән һеңлекәшем, тип уйланам. Ашамағаным ҡарағатмы ни! Бер йыл емеше булмаһа, икенсе йылына булыр ине әле. Бөтөнләй ҡороһа ла йәл түгел! Һатып алыр ҙа ултыртыр инек. Уның ягымлы тауышын, сылтыратып көлгәнен ишетер өсөн телефондан сәғәттәр буйы һөйләшергә лә ризамын хәҙер, тик Айсиләм генә юҡ... Йыназа ваҡытында, әллә ҡаңғырыҡтан, әллә шаңҡыуҙан, ошоғаса таянысым да, серҙәшем дә булған берҙән-бер туғанымды юғалтыуымды аңлап та етмәгән булғанмын, ахыры. Ә ҡайтҡас башланды... Илай-илай хәл дә, күҙ ҙә ҡалманы. Үҙәк өҙгәс һағыштан саҡ алийып китмәнем хатта. "Айсилә, шылтырат миңә!" тип телефонымды онтай һуҡҡанымды ла, төнөн сығып, теге ҡарағаттарҙы йән асыуыма сапҡылап бөткәнемде үҙем белөм дә, ағайың ғына белә...

Бына шулай, бикәс, бөгөн барбыҙ, ә иртәгә кем йәшәрен-йәшәмәҫен Аллаһы Тәғәлә үҙе хәл итә. Донъя мәшәҡәтенә һылтанып, ярай, һуңынан һөйләшермен, йәки аҙаҡ күрешербеҙ әле, тип йөрөп, һуңлап ҡуйыуың да бар. Туғандарыңдың ҡәҙере...

Еңгәмдең һүҙен бүлдереп, әрһеҙ телефоным тағы йырларға кереште. Экрандың зәңгәр фонында "Рима апай" тигән яҙыу балҡыны.

- Алло! Һаумы, апай!..

**Зөлфиә МУЛЛАҒОЛОВА-СӘЛИХОВА.**

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

# ҠЫРЫҪЛЫҠ ҠАМАСАУЛАЙМЫ?

**Йыш ҡына ир-егеттәр араһында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡырыҫлығы тураһында бәхәс ҡуба. "Киске Өфө"лә лә был турала сығыштар булғыланы. Ә шулай ҙа, яҡшымы, насармы беҙҙең ҡыҙҙарҙың бындай холҡо? Ике төрлө фекер ишеттек ошондай һорау менән мөрәжәғәт иткән ике ир-егеттән.**

## Ыңғай яғы шул...

Беҙ күп нәмәне тәбиғәт күренештәре менән сағыштырып, ундағы оҡшаш яҡтар менән бер ҡатар ҡуйып, мәсьәләгә образдар күҙлегенән ҡарарға яратабыҙ. Ғәмүмән, һәр бер фекер образлы, ҡанатлы булыуы менән отошло һәм күңелгә һеңеп ҡалыусан.

Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы хаҡында уйланғанда ла, һис шикһеҙ, йәй буйына көтәү йөрөгән болон-ҡыр йә урман эсе күҙ алдына килеп баҫа. Йәй буйына көтәү йөрөүгә һәм урыны сандауға әүерелеүгә ҡарамаҫтан, унда ата дегәнәктәр һәм ҡаҙаяҡ үләндәре, тоғро һалдаттар кеүек, һерәйеп баҫып тороп ҡала. Һалҡын ҡыштарға ла, ыжғыр бурандарға ла бирешмәй улар. Ҡыш үтеп, яңылары тамырҙарынан баш төртөп, үҫеп сыҡҡас ҡына ергә ауа ундай үләндәр. Уларҙы мал ашамай, теләһә лә ашай алмай, хатта "ҡатыморон"дар ҙа ата дегәнәк менән ҡаҙаяҡты мөрхәтһенмәй. Әммә улар тәбиғәткә кәрәк, башҡа тере йәндәргә, нәфис үләнсәскәләргә йәйен-ҡышын дым һаҡлау өсөн кәрәк.

Әгәр ҙә "Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы милләт өсөн нимәгә кәрәк?" тигән һорау ҡуйылһа, мин "Тәбиғәткә ата дегәнәк менән ҡаҙаяҡ нинә кәрәк булһа, ҡыҙ-ҡатын ҡырыҫлығы шуның кеүек кәрәк", тип яуап бирер инем. Ысынлап та, дегәнәк менән ҡаҙаяҡ үҫкән ергә мал да, кеше лә килмәй, ул ер тапалмай. Дегәнәге кешенең кейеменә йәбешеп бара, үлән ашайым тип, ҡаҙаяҡтан ауыҙын ҡанатҡан мал бүтәнсә был урынға аяҡ та баҫмай.

**Хәниф МӘЖИТОВ.**

## Ҡырын яғы ла бармы?

Ҡыҙ-ҡатын холҡондағы ҡырыҫлыҡ ир-аттың уға ҡарата етди булыуын талап итә, уға шаярып, йә юрый ғына ҡыйылап булмай. Һәм был күренештең кире һөҙөмтәләрен үҙемдә күп татыным. Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарына ҡапыл ғына яҡын барырлыҡ түгел. Улар һинең һәр төрлө мөнәсәбәтеңде ысынға ҡабул итеп бара, йөҙөңә бәреп, тураһын әйтә, маҡсатың нисек кенә изге булмаһын, уның менән бәйләнешкә инергә теләүеңде тиҡ бер яҡлы ғына - "бәйләнергә маташа" тип кенә баһалай. Йәки булмаһа, һин янына барған һылыу, әгәр ҙә кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ икән, ул һинде үҙенең булаcаҡ потенциаль ирен күрергә теләй һәм тәүге мәлдән алып көтҡи һәм аныҡ талаптар ҡуя. Дөрөҫөрәге, ир-атты бының менән унайһыҙ хәлгә ҡуя.

Хөрмәтле нәфис заттар шуны белһен, бындай осраҡта теләһә ниндәй ир-ат ситкә тайпылыусан. Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙҙың ҡырыҫлығы ҡайһы саҡ ана шулай кире һөҙөмтәгә алып килә: беҙҙең ир-ат бер ситкә тибәрелгәс, башҡа милләт ҡыҙҙарының "тоҙағына эләгә", ә ҡыҙҙарыбыҙ иһә, көтөп-көтөп өтөк булғас, башҡа милләт вәкиле ир-атына кейәүгә барырға мәжбүр. Йә, беҙҙең ҡыҙҙарҙың ҡырыҫлығынан ниндәй файҙа шулай булғас?

**Әнүәр ХӘЛИСОВ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ ҡырыҫлығы хаҡындағы фекерҙе артабан дауам итеүселәр, йә булмаһа, инҡар итергә теләүселәр булһа, редакцияға хат яҙып ебәрергә онотмағыҙ. Нәфис затыбыҙ нинә ҡырыҫ һуң?**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**11-се идея: Матур төргәк**

Һинә матур төргәк оҡшаймы? Күбебеҙгә оҡшай, әлбиттә. Шулай, юл йөрөгәндә, ҙур бер универмагҡа ингән саҡта, миндә матур төргәккә ҡарата ҡыҙыҡлы бер фекер барлыҡҡа килде. Мин ниндәйҙер тауар ҡарап торғанда күрше прилавка эргәһендәге бер ханым үҙенсәлекле модалы һабын таптыра ине. Был ҡәҙимге ҡулланыу өсөн беҙ һатып алған һабын түгел. Уның һәр кисәге үтә күренмәле ҡағыҙға төрөлгән һәм ҡатырға ҡумтаға һалынған, ҡумтаһы ла үҙ сиратында үтә күренмәле ялтырап торған ҡағыҙға матур итеп төрөлгән. Һабын менән был бөләкәй генә ҡумталар иҫ киткес матур биҙәкле пленкаға уралған ҡатырға батмусҡа ҡуйылған. Былар барыһы ла нәфис ҡағыҙ таҫманан бант яһап уратып бәйләнгән һәм бәләкәй генә яһалма миләүшә сәскәләре гөлләмәһе ҡыстырылған. Өс кисәк һабындан торған шундай пакеттың бар тәғәйенләнеше - һеҙҙе таҙа итеү.

Ә инде һатыусының һатып алыусыға мөләйем йылмайып биргән һорауынан мин бөтөнләй ҡаушап ҡалдым, аһ иттем. Ул: "Әйберегеҙҙе бүләк ҡағыҙына төрөп бирергәме?" - тип һораны. Мин үҙ ҡолағыма үҙем ышанманым.

Кеше тормошонда ла күп нәмәләр менән шулай килеп сыға түгелме һуң? Бына ғәҙәти, файҙалы һабын шул хәтлем итеп төрөлгән, хатта беҙ уның төүгә төп тәғәйенләнеше хаҡында онота башлайбыҙ. Был төргәктең тәүге тәғәйенләнеше - кешене йыуына торған һабын менән тәьмин итеү. Әммә был осраҡта беҙ таҙалыҡтан бигерәк, уның шулай төрөлөүенә иғтибар бирәбеҙ.

Ҡәҙимге тормошта ла беҙ йыш ҡына ҡатлап-ҡатлап төрөү менән булашып, төп материал хаҡында онотоп ташлайбыҙ. Мин ғүмерҙең асылын күҙ уңында тотам. Йыш ҡына беҙ эш, йорт, ғаилә, финанстар менән борсолоп, үҙебеҙ тураһында бөтөнләй онотабыҙ.

Көндәлек ығы-зығы ялтырауығы аҫтында беҙ Тормоштоң тере сағылышы бит. Һин - Тормоштоң үҙенең тере сағылышы. Был һинең Дөйөм Аҡыл көсөнөң тере сағылышы икәненде белдерә. Һәм һин был тормошто ҡат-ҡат урауҙарына, ошо төп, нигеҙ булып тороусы концепцияны күҙ уңынан ысҡындырыуға юл ҡуйма.

Үҙеңдең Дөйөм Аҡылдың тере сағылышы булыуыңды аңлағас ҡына, һин тәғәйенләнешең буйынса йәшәй башлаясаҡһың, һәм был ғүмерең һинең бөтә фантазияларыңдан өҫтөн булыр.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 9 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Гусарская баллада". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Д/ф Премьера. "Лариса Голубкина. "Прожить, понять..." К юбилею актрисы. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.45 Х/ф "Весна на Заречной улице". Кино в цвете. [12+]
16.35 Д/ф "Любовь и голуби". Рождение легенды". [12+]
17.25 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.25 Х/ф "Kingsman: Золотое кольцо". [18+]
2.05 На самом деле. [16+]
3.05 Про любовь. [16+]
3.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Х/ф "Люблю 9 марта!" [12+]
6.20 Х/ф "Любимые женщины Казановы". [12+]
10.20 Сто к одному.
11.10 Аншлаг и Компания. [16+]
13.20 Х/ф "Большой". [12+]
17.40 Ну-ка, все вместе! . [12+]
20.00 Вести.
21.00 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.20 Праздничное шоу Валентина Юдашкина.
1.35 Х/ф "Лекарство для бабушки". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**8.15, 5.30 "История одной любви". [12+]**
**9.15 "Ҡыҙҙар-йондоҙҙар". Концерт. [0+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Спектакль "Гайфи агай, женись, давай!" [12+]**
**14.00, 4.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**14.30, 18.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.45 Детей много не бывает. [0+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.00 "Гора новостей". [6+]**
**16.15 Ради добра. [6+]**
**17.30 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**19.00 "Жизнь в песне". Концерт заслуженной артистки РФ, народной артистки РБ Н. Кадыровой. [12+]**
**21.00 "Гүзәлкәй". [6+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15, 4.00 Теге өсәү. [12+]**
**23.45 Күстәнәс. [12+]**
**0.15 Х/ф "Вот такая музыка". [12+]**
**2.15 Спектакль "Шомбай". [12+]**
**5.00 Историческая среда. [12+]**

## 10 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.30, 1.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-15". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Акула". [16+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Земляки. [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [16+]**
**0.00 Х/ф "Лекарство против страха". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.30 Күстәнәс. [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 11 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.05, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Таблетка для жизни. Сделано в России". [12+]
3.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-15". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Акула". [16+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "АйТекә!" [6+]**
**15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Линкольн для адвоката". [16+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Любовница". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Магомаев". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Гол на миллион". [18+]
3.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-15". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Т/с "Невеста комдива". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Х/ф "Акула". [16+]
4.20 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Сируси". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30, 23.45 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Д/ф "По букве закона". [16+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15, 4.45 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Машина времени в джакузи". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Заноза". [12+]**
**5.15 "Весело живем!" [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 13 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Григорий Горин. "Живите долго!" [12+]
1.15 Х/ф "Берлинский синдром". [18+]
3.10 На самом деле. [16+]
4.10 Про любовь. [16+]
4.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия-15". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.30 Х/ф "Брачные игры". [12+]
3.05 Х/ф "Васильки для Василисы". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Д/ф "Блеск и слава Древнего Рима". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Яңылыҡтар.**
**13.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Детей много не бывает. [0+]**
**17.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Әлләсе... [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.30 Юлдаш йыры-2020. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Х/ф "Чужие". [18+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**3.30 "Млечный путь". [12+]**
**4.15 Х/ф "Машина времени в джакузи". [16+]**

## 14 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Муслим Магомаев. Нет солнца без тебя..." [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.45 Концерт, посвященный юбилею Муслима Магомаева. [12+]
16.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.50 Эксклюзив. [16+]
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
22.40 Большая игра. [16+]
23.50 Х/ф Премьера. "Чужой: Завет". [18+]
1.55 На самом деле. [16+]
2.55 Про любовь. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]
4.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.55 Х/ф "Верни меня". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "С тобой хочу я быть всегда". [12+]
0.55 Х/ф "Второе дыхание". [12+]
4.05 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Яңылыҡтар.**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30, 2.00 Аҙна яңылыҡтары.**
**23.15 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**0.15 Х/ф "Другая Бовари". [16+]**
**2.45 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

## 15 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Комиссарша". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.55 Д/с Премьера. "Великие битвы России". [12+]
16.40 Точь-в-точь. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Dance Революция". [12+]
23.45 Х/ф Премьера. "Жажда смерти". [18+]
1.40 На самом деле. [16+]
2.40 Про любовь. [16+]
3.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

4.25 Х/ф "Брачные игры". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.30 Устами младенца.
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.20 Х/ф "Однажды и навсегда". [12+]
14.00 Х/ф "Гражданская жена". [12+]
18.10 Ну-ка, все вместе! [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.30 Большой праздничный концерт "Крымская весна".
3.10 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Яңылыҡтар.**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Аҙна яңылыҡтары.**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Творческий вечер заслуженной артистки РФ, народной артистки РБ Гузель Сулеймановой. [12+]**
**19.00 Полезные новости. [12+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Х/ф "Последнее испытание". [16+]**

✓ *Һин һуғып та, һиңә яуап бирмәгән кешенән һаҡлан: ул һине бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ һәм үҙе лә ғәфү үтенмәҫ.*

*(Бернард Шоу).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАЙРАМ МЕНӘН ҠОТЛАП




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 март "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+
**11 март "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**12 март "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+
**13 март "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+
**14 март** РФ һәм БР халыҡ артисы **Хөрмәтулла Үтәшевтың юбилей бенефисы**. 18.00 12+
**15 март "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 март "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев) музыкаль комедия. 18.00 12+
**15 март "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 март "Игра в прятки"** (Н. Шувалов) 12.00, 14.00 0+
**14 март "Сказка о царе Салтане"** (А.С. Пушкин) 12.00, 14.00
**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова) 16.00 0+
**15 март "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов) 12.00, 14.00 0+
**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова) 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**11 март "Флейта плюс"** (Л. Фоменко) классик музыка. 6+
13 март **"Страшная сказка для взрослых. Н. Гоголь "Вий"** 6+
**"О чем поют птицы?"** рус-башҡорт телдәрендә концерт-әкиәт. (Л. Дәүләтбаев) 6+

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Вертикаль буйынса:** Теләктәш. Тәлмәрйен. Иҙеүкәй. Бина. Тырнаҡ. Урама. Әсирә. Әрмәк. Маймыл. Бикбай. Дөйә. Әсғәт. Миагр. Ир. Ара. Бишек. Лапы. Арҡа. Ҙур. Уҡыһа.
**Горизонталь буйынса:** Әйтем. Биишева. Әйбер. Тышау. Андыҙ. Реактор. Талхина. Алдар. Манара. Әүрәү. Әй. Бығау. Дини. Әрем. Шамбы. Әрней. Йәше. Тәкмәс. Койка. Ниғмәти. Ҡышлау.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Март (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (14) дүшәмбе | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 10 (15) шишәмбе | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 11 (16) шаршамбы | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 12 (17) кесе йома | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |
| 13 (18) йома | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |
| 14 (19) шәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 15 (20) йәкшәмбе | 6:02 | 7:32 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# ЕТМЕШ ЙӘШТӘ...

**Оло йәшкә тиклем күптәр йәшәргә теләй. Балаларыңдың тормошон күреп, ейән-ейәнсәрҙәреңде бағып, бүлә-бүләсәрҙәреңде һөйөп, донъяның йәмен тойоп йәшәүҙәргә ни етә! Был йәшкә еткән ҡатын-ҡыҙ үҙенә нимә килешә, нимә килешмәй икәнен яҡшы белә. Шулай ҙа ситтән килгән кәңәштәр ҙә ярҙам итеп ебәреүе бар. Әйҙәгеҙ, ҡатын-ҡыҙға 60 йәштә лә, 70-тә лә гүзәллеген һаҡларға ярҙам итер бер нисә ябай ғына ҡағиҙәгә күҙ һалайыҡ.**

**Таҙалыҡ яратыу һәм шәхси гигиенаны тотоу мөһим.** Оло йәштәге ҡатындар, бигерәк тә хаҡлы ялға сыҡҡандары, йыш ҡына, ҡиммәтле кейемдәр алырлыҡ аҡсам юҡ, ти. Уларҙы аңларға була, бөгөнгө йәшәйешебеҙ еңелдәрҙән түгел. Әммә ябай ғына кейемен дә бөхтәләп, таҙартып кейеп йөрөгән оло йәштәге ҡатындарға ҡарауы ла күңелле. Кейем тураһында һөйләгәндә, шәхси гигиенаны ла онотмау кәрәк. Йылдар үтеү менән кешенең еҫе лә үҙгәрә һәм һабын, еңел хушбуй, дезодорант менән ҡулланыу мотлаҡ.

**Матур аяҡ кейеме һайлағыҙ.** 50 йәштән һуң аяҡтарға бәйле төрлө проблемалар башлана. Әммә нисек кенә булғанда ла аяҡтарҙа матур күренгән, һаулыҡҡа зыян килтермәгән, зауыҡлы ла күренгән уңайлы аяҡ кейеме һайлап алығыҙ.

**Төҙ йөрөргә тырышығыҙ.** 70 йәшлек кешегә был еңел бирелмәй, быуындар һығылмалығын юғалта, остеохондроз да булыуы мөмкин. Әммә кәүҙәнде төҙ тотоп йөрөргә кәрәк: тын алыуы ла еңеләйер, кәйеф тә күтәрелер. Кәүҙәне төҙ тотоу кешене йәшәртә, үҙенә ышанысын арттыра, дәртләндерә.

**Өләсәйҙәр әйберҙәренән баш тартығыҙ.** Иң бәхетле йәшкә еткән ҡатындар ҡайһы саҡта үҙен-үҙе ҡартайта. Күптән эшлектән сыҡҡан сумка тотоп йөрөй, ҡалаға ырҙынға эшкә сыҡҡан кеүек кейенеп бара. "Өләсәйҙәрҙеке" тип һаналған әйберҙәр була, улар оло йәштә булыуыңды сағылдырып тора. Ысынлап та өләсәй булһағыҙ ҙа, тәү сиратта һеҙ ҡатын-ҡыҙ икәнлекте, шунан ғына әсәй, хәләл ефет, өләсәй, инәй булыуығыҙҙы хәтерҙән сығармағыҙ. Йәшкә ҡарамайынса күркәмлек һаҡлағыҙ.

ИР-ЕГЕТ ҺҮҘЕ

# ҒӘФҮ ИТЕГЕҘ МИНЕ...

**Байрамдары алдынан үҙем кеүектәр исеменән бөтөн ҡыҙ-ҡатындар алдында ғәфү үтенгем килә. Минең кеүек ғәфү үтенергә теләүселәр, ай-һай, әҙ түгелдер, тим.**

Иң тәүҙә өләсәйҙәрем алдында ғәфү үтенер инем: балалығым арҡаһындалыр инде, уларҙың һөйөүен тойҙом, ә үҙем уларға һөйөү өләшә алманым. Өләсәйҙәр ейәндәрен иркәләр өсөн генә йәшәй, тип уйлағанмындыр инде. Эй, бер ҡатлылыҡ! Өләсәйҙәрем күптән инде фани донъяла юҡ. Уларҙың иркәләүе, кеҫәләрендәге бөтмәҫ күстәнәстәре, яҡты йөҙҙәре генә хәтергә уйылған. Ике өләсәй бергә саҡта, сутыр-сутыр, донъя хәлдәре тураһында һөйләшкәнен тыңларға ярата инем. Улар һәүетемсә генә һөйләшеп ултыралар ҙа, әңгәмәләренең ҡайһы бер урынында шыбырлауға күсәләр. Күрәһең, уныһы минең ҡолаҡҡа инергә тейешле хәбәр булмағандыр. Шыбырлашып алғас, тағы мин ишетерлек итеп дауам итәләр. Ә телдәре һуң, телдәре! Бөгөн улай һөйләшмәйҙәр. Өләсәйҙәрем ул саҡтың һутлы телмәрен үҙҙәре менән алып китте, буғай. Сәхнәләге "әбейҙәр" телен тыңлайым да, өләсәйҙәремде һағынам. Яһалма-яһалма инде - теле бар, һуты юҡ. Өләсәйҙәремде тыңлай-тыңлай ҡай саҡ йоҡлап китә торғайным. Уяныуыма улар, бер ни булмағандай, һаман да һөйләшеп ултыра торғайны. Оҙон итәкле күлдәктәрен ялпылдатып, тышҡа сығып инәләр ҙә, тағы һөйләшәләр. Баштарында яҙып ябынған яулыҡ, яҡты йөҙ, ҡулдарында шәл бәйләгән энәләр йүгерә...

Әсәйем алдында ла ғәфү үтенгем килә минең. Ғәйепле булғандан түгел, иғтибар бүлеп еткерә алмағаным өсөн. Ҡояш кеүек, әсәй ҙә бирәү генә бит. Ҡояштың йылыһын тойһаҡ та, ҡасан беҙ ҡояшҡа рәхмәт әйткәнебеҙ бар? Шулай уйлап микән, бер ваҡытта ла әсәйемдең күҙҙәренә ҡарап, "Рәхмәт, әсәй!" тип әйткәнем юҡ. Ул уға мохтаж да түгел, шикелле. Шулай уйлап, бәлки, яңылышамдыр. Яңылышһам, әсәй, зинһар, мине ғәфү ит! Көслө һөйөү тойғоһо бар икән, ниңә уны ҡысҡырып әйтеп, йәмен боҙорға, тәмен юғалтырға, тип уйлайым мин ниңәлер. Мөйөш һайын ҡысҡырып, ауыҙ һыуын ҡойоуҙан һөйөү тойғоһо кәмер төҫлө тойола. Һинең тыуған көнөңдө лә билдәләгәнебеҙ юҡ, 8 Март менән дә мәктәп йәшендә уҡытыусылар ҡушыуы буйынса ғына ҡотлау бүләге алып ҡайта торғайным. Әммә һиңә булған һөйөү тойғоһо бик оло - быныһына иманым камил. Иң мөһиме, һин һау бул, тере бул - миңә, мәҫәлән, шунан башҡа бер ни кәрәкмәй. Әлбиттә, һин мине һаман да бала кеүек күреп, һуңғынды өҙөп-йолҡорға әҙерһең. Һау булайыҡ, әсәй, рухыбыҙ тере булһын, донъя байлығы - аяҡ аҫтындағы сүп кенә!

Тәүге мөхәббәтем, һин дә ғәфү ит мине! Бәлки, ғүмер юлында бергә булырға тейеш булып та, бергә була алмауыбыҙ өсөн ғәфү ит. Иҫләйһеңме, һигеҙенсе класта саҡтағы күҙ асып йомған аралағы хәлде. Һин ни, тәртипле бала, беренсе рәттең беренсе партаһында ултыра инең, ә мин - "Камчаткала". Ниндәй дәрес булғандыр, иҫләмәйем, һин ҡапыл артҡа әйләнеп ҡараның һәм матур итеп йылмайҙың. Беҙҙең ҡараштар бер аҙға ғына осрашты, буғай. Тик, ниңәлер, ғүмерлеккә һинең күҙҙәреңдең төпһөҙ дарьяһына батҡандай тойҙом үҙемде. Ул көндө мин мәктәптән йүгереп ҡайттым. Сөнки аяҡтарым ерҙе тоймай ине. Мин ғашиҡ булдым! Элек әҙәби китаптарҙан уҡып, киноларҙан ҡарап белгән мөхәббәт тойғоһонон ләззәтен ана шул ҡараштан башлап тойҙом, йәшәүемдең мәғәнәһен аңланым. Беҙ дуҫлашып киттек. Һин нисек атағанһыңдыр, минең өсөн ул тәүге саф мөхәббәт тойғоһо ине. Рәхмәт һиңә, үҫмер сағымды яҡтылыҡҡа сорнаның! Сәстәребеҙ сәскә бәйләнмәүе өсөн ғәфү ит...

Икенсе мөхәббәтем, һин дә ғәфү ит! Һөйөүем үтә лә көслө булған өсөн ғәфү ит мине. "Әсәйем һинең турала, үтә ҡыҙыл тиҙ уңа, тип әйтте", тигәйнең һин бер мәл. Башҡа ҡыҙыл уңалыр, мөхәббәт кенә һүнмәй икән ул. Беҙ бит һинең менән биш йыл буйы бер бөтөн булып йәшәнек. Йәндәребеҙ йәнәш йәшәне, тәндәребеҙҙең һыуһыны ҡанманы. Шулай йәшәнек тә, тормош тигән юл сатында айырылыштыҡ - һинең үҙ юлың, мин дә яҙмышыма яҙылғанды лайыҡлы үтергә тырышып ятыуым. Һинһеҙ үтеүе генә күңелде һаман да өйкәй. Кем белә, бәлки, бергә ҡалһаҡ, беҙ суд аша рәсми айырылышҡан булыр инек. Сөнки мөхәббәтебеҙ йәмғиәт ҡанундарына һыймайынса, тик һөйөүҙән һәм тойғоларҙан ғына тора ине. Ирекле осраштыҡ, ирекле айырылыштыҡ. Әммә шул ирektән бөгөн ирекһеҙлек тоям. Бүтәнсә ғашиҡ булыр инем дә, һөйкөмлө буй-һыныңды һағынам, күңелендә юҡһынам. Ни эшләйһең, булыры-булған, ваҡыт яраларға шифаһын япҡан. Мин бөгөн бит һине түгел, шул саҡтағы образыңды ғына ятатамдыр һымаҡ. Нимәһе аянысл: йәнемдең икенсе өлөшөн мин бит һиңә тиклем дә эҙләй инем, һаман да эҙләйем. Тимәк, мин уны әле һаман да тапмағанмын. Бәлки, ул эргәлә генәлер, ә мин, иҫәр, һаман һөйөүгә һыуһаған мосафир кеүек, юлдан тайпылмайымдыр. Минең кеүек иҫәрҙәр, ай-һай, әҙ түгелдер, тим. Минең кеүек иҫәрҙәр шулай ғүмер буйы йәненең икенсе өлөшөн эҙләйҙер ул. Эҙләйҙер ҙә ... ерҙә ер кешеләре кеүек йәшәү өсөн ғаилә ҡоралыр. Шуға ла бөтөн ҡыҙ-ҡатындар алдында ғәфү үтенәм дә инде. Берәүҙәрҙе яратабыҙ ҙа, икенселәргә өйләнәбеҙ шул.

Ҡатыным, балаларымдың әсәһе, һин дә ғәфү ит мине. Ғаилә ҡороу өсөн үҙеңде миңә ҡорбан иткәнең өсөн ғәфү ит. Ғәфү итегеҙ, ҡыҙ-ҡатындар!

**Кинйә ШӘМСИНУРОВ.**

## ҠОТЛАЙЫМ!

Ғаилә усағын, милләт ҡотон, башҡортлоҡ асылын, өләсәй-инәйҙәр асылын үҙ ҡанында, рухында, һын-йөҙөндә һаҡлаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, нисә йәштә булыуға ҡарамай, Ағинәй вазифаһында. Ошо вазифала булғандарҙы, аңында, хәтерендә, ҡылыҡ-фиғелендә ағинәйлек сифаттарына өлгәшергә ынтылғандарҙы күркәм Яҙ байрамы менән ихлас ҡотлап, иң изге теләктәремде еткерәм.

Милләт бишеге булған Тыуған төйәгебеҙ бөтөнлөгөн, ҡотон, халҡыбыҙ рухиәтен, йолаларын, йәшәйеш ҡағиҙәләрен, туған телебеҙҙе, моңобоҙҙо һаҡлауға артабан да бар көсөбөҙҙө, фиҙаҡәрлегебеҙҙе сарыф итергә яҙһын.

Юлдарыбыҙ киҫешһен, уйҙарыбыҙ берекһен, ниәттәребеҙ хуплаһын, иҫәнлектә-именлектә осрашып, изге эштәр атҡарыуҙы дауам итергә яҙһын!



**Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ШАПШАҠ ҠАТЫНДЫҢ...

## ашын ашама, һүҙен ишетмә

Яҡшы һүҙ әйтте тип ҡыуанма ихласлығын белмәйенсә; яман һүҙ әйтте тип көйөнмә көнсөллөгөн белмәйенсә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Уға бер ваҡытта ла:"Мин ятатҡан кеше - һин беренсе", - тип әйтмә. Уға шулай тиң: "Һине белмәгәнгә тиклем мин бәхеттең ни икәнен белмәгәнмен икән". Ир кеше быныһына шунда уҡ ышанасаҡ.

**(Жорж Массон).**

Ялған менән хәҡиҡәт араһында... ниндәйҙер кешелеклерәк нимә өсөн урын бар.

**(Доминик Опольский).**

Уйыңды тота алмаһаң да, һүҙеңде тот.

**(Славомир Троцкий).**

Һин һуғып та, һиңә яуап бирмәгән кешенән һаҡлан: ул һине бер ваҡытта ла ғәфү итмәҫ һәм үҙе лә ғәфү үтенмәҫ.

**(Бернард Шоу).**

Изгелектәрҙән тыуған хәтерҙән үпкәләүҙәрҙән тыуған хәтер оҙағыраҡ һаҡлана.

**(Пьер Буаст).**

Берәүҙәр үпкәләүҙәрен йота, икенселәр - үпкәләтеүсене.

**(С. Крытый).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер һуҡыр ҡыҙ күҙҙәре күрмәгән өсөн үҙенә ҡарата күңелендә нәфрәт йөрөткән. Һөйгән йәренән, егетенән башҡа донъялағы бер генә тереклекте лә яратмаған. Егет уға һәр эштә ярҙам итеп торған. Ҡыҙ йыш ҡына: "Донъяға үҙ күҙҙәрем менән баға алһам, һис шикһеҙ, һиңә кейәүгә сығыр инем", - тиер булған. Бер ваҡыт ҡыҙға кемдер үҙ күҙҙәрен бүләк иткән. Ниһайәт, ул яҡты донъяны, һөйгән егетен дә күрә алған. "Хәҙер, барыһын да күргәс, миңә кейәүгә сығаһыңмы?" - тип һораған егет. Тик әле генә өҙөлөп һөйгән егетенең һуҡыр булыуын аңлаған ҡыҙҙың ҡото осҡан һәм тәҡдимдән баш тартҡан. Егет йәштәр түгеп, уны ташлап киткән һәм күпмелер ваҡыт үткәс кенә: "Ҡәҙерлем, тик минең күҙҙәремде һаҡлай күр, һине ятатыуым шул ҡәҙәре көслө булған өсөн ҡорбан иттем мин уларҙы", - тип хат яҙған.**

**...Хәл-торошо үҙгәргәндә кешенең фекер-фиғеле лә башҡасаға әйләнеү осрағы был. Бик һирәктәр генә быға тормошо ниндәй булыуын һәм иң ауыр минуттарҙа эргәһендә кемдәр ярҙам ҡулы һуҙып тороуын хәтерендә һаҡлай".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 6 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3600
Заказ - 186/03